ИЖТИМАҒИ-СӘЙӘСИ-МӘҘӘНИ ГӘЗИТ

# Киске Өфө

5-11 октябрь (карасай) 2019

№40 (874)

kiskeufa.ru • 2002 йылдан башлап сыға • һатыуҙа хаҡы ирекле

БЫЛ ҺАНДА УҠЫҒЫҘ:

**Дөрөҫмө...**

баланы ҡырҡ ерҙән тыйыу?



6,9

**Суд ҡарарын үтәгәндәргә...**

приставтар килмәй



8-9

**Башҡортса кино ҡарайбыҙ!**



11

**Халҡыбыҙ әмәле -**

үҙ еребеҙҙең төрлө үләне



12-13

**ТВ-программа** 14

***Мөхтәрәм йәмәғәт! Арзанға яҙылып ҡалығыҙ!***
***Республикабыҙҙың һәр районы-ҡалаһында, иң төпкөл ауылдарҙа ла 3 октябрҙән 13 октябргә тиклем иғлан ителгән ун көнлөктә 2020 йылдың беренсе яртыһына ПР905 индекслы "Киске Өфө"гә - 611 һум 70 тингә яҙыла алаһығыҙ. Был мәғлүмәтте йәнәшәләге дуҫ-иштәрегеҙгә, туғандарығыҙға ла еткерһәгеҙ ине.***

***МӨХӘРРИРИӘТ.***

ӘЙТ, ТИҺӘГЕҘ...

## Заман уҡытыусыһы образын нисек һүрәтләйһегеҙ?

***Шамил БАТЫРШИН, М. Аҡмулла исемендәге Башҡорт дәүләт педагогия университетының өлкән уҡытыусыһы:*** Бөгөн беҙҙең мәктәптәрҙәге күпселек педагогтарыбыҙ - ҡатын-ҡыҙҙар. Әлбиттә, уларға рәхмәтле булырға тейешбеҙ. Ә шулай ҙа был хәлдең ир балаларҙы тәрбиәләүҙәге кире һөҙөмтәһен дә күрмәйенсә булмай. Элек башҡорт ғаиләһендә әсәй ир баланы 5 йәшенә тиклем генә тәрбиәләй, артабан был яуаплылыҡты атай кеше ала, тигән ҡағиҙә булған. Атай кеше тәү сиратта улын үҙаллылыҡҡа өйрәткән. Тимәк, ул улының үҙе өсөн генә түгел, ә ғаиләһе, иле, Ватаны, ырыуы, халҡы өсөн яуаплылыҡ алырға ярҙам иткән ижади һәләттәрен, ир-атҡа хас сифаттарын асырға тейеш булған. Шуға ла, заман уҡытыусыһы ниндәй булырға тейеш, тигәндә, бөгөн иң тәүҙә мәктәптәргә ир-егет педагогтарҙы йәлеп итергә кәрәк, тип яуаплар инем. Үҫтереүсе предметтарҙы ир-ат уҡытыусы, ә адаптив предметтарҙы ҡатын-ҡыҙ уҡытыусылар алып барһа, бигерәк тә отошло буласаҡ. Ғөмүмән, педагог - дәүләттең нигеҙен тәшкил иткән һөнәрҙәр рәтенән, шуға уҡытыусыны хәрбиҙәр рәтенә ҡуйырға кәрәк һәм уның эшенә талаптар ҙа юғары булырға тейеш. Мәктәпкә ир-егеттәрҙе йәлеп итеү юҫығында уҡытыусыларҙың эш хаҡын арттырыу бигерәк тә әһәмиәтле аҙым булыр ине. Йә булмаһа, Ғәҙәттән тыш хәлдәр министрлығы, Эске эштәр министрлығы, Хәүефһеҙлек федераль хеҙмәте һәм башҡа дәүләт структураларында хеҙмәтен үтәп, иртә хаҡлы ялға киткән белгестәрҙе эшкә алырға кәрәк. Мәктәпкә ир-ат килһә, беҙҙең илдә иҡтисади, социаль, сәйәси мәсьәләләр һәм ғаиләләрҙәге мөнәсәбәттәр яйға һалынасаҡ.



**Уҡытыусының төп сифаттарының береһе - әхлаҡлылыҡ. Ул эсмәй, тәмәке тартмай, татуировка эшләтмәй. Уҡытыусы юғары рухи-әхлаҡи тәрбиәле кеше, сөнки ул беҙҙең балаларҙы тәрбиәләй, сәләмәт быуын үҫтерә. Сәләмәт быуын ғына яңы матди ҡиммәттәр төҙөй ала. Ә бына балалар эскән-тартҡан, ғауғасыл уҡытыусынан өлгө алһа, беҙҙе ниндәй киләсәк көтөүе көн кеүек асыҡ. Шуға, тәү сиратта, рухи-әхлаҡи тәртип булырға тейеш уҡытыусыла.**

Тағы ла заман уҡытыусыһы үҙ эшенә ижади күҙлектән ҡарарға тейеш һәм уның төп бурыстарының береһе - балаларҙы коллективҡа тупланырға, үҙаллы ойошорға һәм уртаҡ эште күмәкләп атҡарырға өйрәтеү. Әлбиттә, педагог һәр баланың үҙенсәлеген, һәләтен асырға һәм уға тормошта үҙ урынын табырға ярҙам итә. Әммә ул, бөтә балалар ҙа һәләтле, тип ҡарарға һәм һәр береһенең һәләтен асырға тырышырға тейеш. Ни өсөн беҙ айырым бер нисә баланың үҫешен генә ҡайғыртып, махсус мәктәптәр асырға тейеш? Башҡортостандың һәр мәктәбендә талантлы балалар белем ала, һәр мәктәпкә дәүләттең ҙур ярҙам күрһәтеүе зарур. Ә уҡытыусы - остаз булһын, балаға йүнәлеш бирһен, потенциалын асырға ярҙам итһен. Мәҫәлән, бөгөн беҙҙең мәктәптәрҙә "Семьеведение" дәресе индерелә башланы, кәрәк түгел ул. Айырым категорияларҙы иҫәпкә алмағанда, балаларға психолог кәрәкмәй, уларға үҙ өлгөһөндә үрнәк күрһәтә алған остаз кәрәк. Был йәһәттән күптән һыналған үҙебеҙҙең уҡытыу методикаларына мөрәжәғәт итергә кәрәк, мәҫәлән, шул уҡ Макаренконың китаптары хатта ЮНЕСКО тарафынан танылған. Юғиһә, ни өсөндөр ниндәйҙер һыналмаған, ыңғай һөҙөмтәһе булмаған яңылыҡтар артынан ҡыуып, тәү сиратта уҡытыусының ижади шәхес тәрбиәләргә тейеш булыуын онотоп киттек.

**(Дауамы 2-се биттә).**

ӘЙТЕР ҺҮҘЕМ БАР!

## БАЙМАҠТА ҠОРОЛОҠ -

### халыҡ арзанға малын тарата...

**Әле ни өсөндөр республика мәғлүмәт даирәһенә сыҡмаған проблема борсоуға һала. Быйыл Урал арьяғында ҡоролоҡ булды, шул айҡанлы ундағы кешеләрҙән борсоулы, "Бесән булмағас, кеше арзанға малын хата, беҙҙә бер арба бесән 10 мендән артыҡ тора, кешегә былай ҙа эш, аҡса юҡ", тигән йөкмәткеле хәбәрҙәр килеп тора.**

Элек республиканың бер осонда һалам етмәһә, икенсе осонан ташый торғайнылар. Районлар бер-береһенә ярҙам итә ине. Бер яҡта ҡоролоҡ була ҡалһа, икенсе яҡтан "малсылыҡ - удар фронт", "ҡала - ауылға" тип ярҙам ылауҙары ағыла торғайны.

Ауыл хужалығы мөхитенән айырылғанғамы, мин әле лә шулайҙыр тип уйлай инем. Хәҙер улай түгел икән шул... Ямғыр яумай икән - үҙ көнөндө үҙең күр. Минеңсә, был дөрөҫ түгел, нисек кенә булмаһын, башҡорттар күпләп йәшәгән районларҙа малсылыҡ - ул халыҡтың аҡса килтергән төп кәсебе. Уны кәметеүгә юл ҡуйырға ярамай.

Әгәр махсус министрлыҡ кешеләргә, шәхси хужалыҡтарға ярҙам ҡулы һуҙмай, малһыҙ ҡалдырһа, ул төбәктәге иҡтисади-социаль хәлдең тағы ла насарайыуына килтерәсәк. Бесән юҡ тип, малын һатҡан башҡорт ҡышын нимә эшләһен, тағы ла зимагурлыҡҡа Себергә китә инде...

Ошо проблемалар хаҡында ни уйлай ауыл халҡы, яуаплы хеҙмәткәрҙәр, район етәкселәре, махсус министрлыҡ белгестәре? Баймаҡтар үҙҙәре өндәшмәй, әллә бөтә Урал улдары хәҙер "тәрән шахта эсендә алтын ҡаҙыу эшендәме" икән? Урал арьяғындағы бесәнһеҙ ҡалған халыҡҡа берәй ярҙам ойошторолаМЫ, кем белә?

**Дәүләт СУРА.**

12+

✓ *Әлбиттә, ата-әсәйҙәрҙең уҡытыусыға мөнәсәбәтенән дә күп нәмә тора. Атай-әсәйҙәр балаһы алдында уҡытыусының абруйын һаҡлай белһә, уға ышаныс белдерһә, барыһына ла яҡшы буласаҡ.*



КИЛЕШМӘЙЕМ!

# КИРЕ МӘҒЛҮМӘТ ЯЛҠЫТТЫ!

**Интернет селтәрҙәрендәге төрлө форумдарҙа киң мәғлүмәт саралырындағы мәҡәләләр, Башҡортостан юлдаш телевидениеһы тапшырыуҙары тураһында һүҙ-бәхәстәр булғылап тора. Мин, ғәҙәттә, үҙебеҙҙең телевидениены, Үҙәк телевидениеның көнө-төнө талаш-аҡырыш күрһәткән тапшырыуҙарынан, үлтереш-ҡыйралыштан башланған яңылыҡтарынан айырмалы, үтә лә тыныс, йөкмәткелерәк тип, гел яҡлай торғайным. Хәҙер иһә беҙҙең телевидение ла "боҙолдо", яңылыҡтарҙа тәфсирләп-тәмләп, нәҡ "заманса" итеп, үлтереш, авария күренештәре менән таныштыра башланылар. Был үҙгәреште күптәрҙең ҡабул итмәүен белмәйме икән ни беҙҙең телевидение журналистары?**

Һуңғы ваҡытта гәзиттәр ҙә яңы ысул тапты: сайттарында, социаль селтәрҙәге сәхифәләрендә көнөнә егермешәр яңылыҡ баҫтыралар. Уларҙың күбеһе шул уҡ юл һәләкәттәре, енәйәтселәр ҡылғандар тураһында. Кемдер аяҡ-ҡулын өҙҙөргән, кемдер тапалған, кемделер ире туҡмаған. Йыш ҡына сит өлкәләрҙә булған хәбәрҙәр әле улары ла. Үкенескә күрә, хәҙер беҙ шулай аҡрынлап негативҡа өйрәнә, негатив көсәй барабыҙ.

Тағы нимә аптырата: гәзиттәр ҙә, телевидение ла тутыйғош һымаҡ бер үк хәбәрҙе тылҡый. Яҡшы хәбәрме, насармы, әммә ул мәғлүмәт төрлө яҡлап килеп инә ҡолаҡҡа. Мәҫәлән, Салауат ҡалаһындағы, хәҙер инде Өфө ҡалаһындағы аҡса урлаған кассирҙар тураһындағы хәбәрҙәрҙе көнөнә нисәмә тапҡыр ҡабатлайҙар. Йәки 5-се Бөтә донъя башҡорттары ҡоролтайында булған ваҡиғаны шаштырып-шаштырып, нисәмә-нисә тапҡырҙар ҡабатланылар, оноторға бирмәйҙәр һаман, сурыталар ҙа сурыталар. Етмәһә, был мәғлүмәттәр ҙә бер төрлө генә, бер текста яҡтыртыла. Шул мәғлүмәттән ары китеп булмай икән, ниңә уны үҙгәртерәк, төрлө күҙлектән ҡарап, анализлап яҙып сыҡмаҫҡа? Фекерҙәр ҙә бер төрлө, игеҙәк һымаҡ. Шул уҡ ваҡытта халыҡты ысынлап борсоған мәсьәләләр яҡтыртылмай. Әллә һеҙ икенсе, виртуаль донъяла йәшәйһегеҙме, журналистар, тип һорағы килә хатта. Милләтебеҙҙең таҙалығын-сафлығын, күркәм сифаттарын сағылдырайыҡ үҙ мәғлүмәттәребеҙҙә, халҡыбыҙҙың ғәйбәт менән түгел, ғәҙеллек менән дан тотҡанын онотмайыҡ, тип тә өҫтәге килә.

**Ғәҙел ИСРАФИЛОВ.**

ӘЙТ, ТИҺӘГЕҘ...

# *Заман уҡытыусыһы образын нисек һүрәтләйһегеҙ?*

**(Башы 1-се биттә).**

***Айгөл АТАНОВА, Бөтөн донъя башҡорттары ҡоролтайы Башҡарма комитетының ата-әсәләр комиссияһы рәйесе урынбаҫары:*** Һәр заманда ла уҡытыусы тәү сиратта үҙ дәрәжәһен юғалтмаҫлыҡ кимәлдә белемле булырға тейеш, тигән талап ҡуйыла. Унан инде, үҙ предметын яратыуы һәм һөнәренә күңелен һалып эшләүе шарт. Шулай булғанда, ул уҡытыусыға уҡыусыһына тейешле белем биреүҙә бер ниндәй ҡыйынлыҡтар ҙа ҡаршылыҡ була алмай. Өҫтәүенә, балалар менән эшләргә яратһа һәм заманса уҡытыу методикаларынан баш тартмаған кеше булһа, уҡыусылар уны яҡын, үҙ кешеһе итеп күрәсәк. Балалар ололарға ҡарағанда һиҙгерерәк бит ул, бер-ике дәрестән үк уҡытыусыны һынап алалар. Ҡайһы бер уҡытыусы мәктәпкә килеп-китеп кенә йөрөргә өйрәнһә, дәрестә китап буйынса үҙаллы уҡырға ҡушып, үҙ эштәре менән булышһа, шаярған малайҙарҙы тынлата белмәһә, шундуҡ уҡыусы алдында абруйын юғалта. Был уҡытыусының яңылыш һүҙ ысҡындырғанын көтөп, телефонға төшөрөп алырға ла күп һорап тормай хәҙерге балалар. Һөнәрен һөйөп, күңелен һалып эшләмәгән уҡытыусыны ихтирам итмәйҙәр. Әлбиттә, ата-әсәйҙәрҙең уҡытыусыға мөнәсәбәтенән дә күп нәмә тора. Атай-әсәйҙәр балаһы алдында уҡытыусының абруйын һаҡлай белһә, уға ышаныс белдерһә, барыһына ла яҡшы буласаҡ. Мәҫәлән, беҙҙең ғаилә өсөн оло йөрәкле педагог - ул өлкән ҡыҙымдың башланғыс синиф уҡытыусыһы Минсрур Йәһүт ҡыҙы Байбулова. Оҙаҡ йылдар үтеүгә ҡарамаҫтан, Минсрур Йәһүт ҡыҙының беренсе синиф уҡыусыларын "Әлифба" байрамына нисек әҙерләүе һаман күҙ алдында: бер нәмә лә белмәй килгән балаларыбыҙ йырланы ла, бейене лә, сәхнәләштереүҙә лә ҡатнашты, матур итеп шиғырҙар һөйләне. Мәктәпкә көн дә теләп йөрөнө ҡыҙыбыҙ, сөнки уҡытыусы һәр баланы иртән: "Ий, бәләкәстәрем, һәйбәттәрем", - тип ҡаршы ала торғайны. Класта шаян-шаян малайҙар булыуға ҡарамаҫтан, һис тауыш күтәрмәй генә тынысландыра, иғтибарҙарын үҙенә йәлеп итә белә ине. Әле бәләкәс ҡыҙыбыҙ М. Кәрим исемендәге 158-се башҡорт гимназияһында уҡый, уның класс етәксеһе башҡорт теле һәм әҙәбиәте уҡытыусыһы Айгөл Игелекова ла бик яҡшы педагог, класс сәғәттәрендә ниндәй генә тематик дәрестәр үткәрмәй, бергәләп экскурсияларға ла йөрөйҙәр, төрлө саралар ойошторалар. Уҡытыусыны яратһа, уның предметын да яҡшы өйрәнергә тырышып тора бала, артынан ҡалмай эйәреп йөрөй, яратыуын белдереү өсөн ниҙәр генә эшләмәй. Беҙгә, атай-әсәйҙәргә, уҡытыусыларҙың рухлы, тәрбиәле, белемле, башҡорт телен белгән шәхестәр үҫтереүҙә ҙур ярҙам күрһәтеүе мөһим. Шуға уларға һөнәрҙәренә күңел һалып эшләүҙәрен һәм заман афәттәренә бирешмәй, балаларыбыҙға белемдәрен тапшырырға үҙҙәрендә көс табыуҙарын теләйем.

***Рәхимә МУСИНА, журналист:*** Бөгөн уҡытыусыны уҡытыусы тип тә һанамаусылар күп, ҡыҙғаныс-ҡа күрә. Бөтә нәмә кешенең үҙенән тора, тигән хаҡ һүҙҙәрҙе хәтергә төшөрһәк, заман уҡытыусыларының абруйы ҡаҡшауында улар үҙҙәре лә ғәйеплелер, тип тә уйланыла. Ул үҙе тураһында төплө белемле, тәртипле, әхлаҡлы тигән фекер ҡалдырырға бурыслы. Хәҙер педагог алдына ҡуйылған талаптар ҙа ниндәйҙән бит: компьютерҙы биш бармағы кеүек белһен, заманса технологияларҙы ҡулланһын, заманса фекерләһен, замандан алда барһын. Был талаптарға ҡаршы түгелмен, әммә тәү сиратта уҡытыусының яҡшы кеше булыуы шарт. Бөгөн һәр кемдә, шулай уҡ уҡытыусыла ла белем етерлек, ә бына кешелеклелеккә, изгелеккә, балаларға иғтибарлы булыуҙарға ҡытлыҡ тыуҙы. Бәлки, шуға ла замана балаһының мәктәпкә барғыһы килмәйҙер? Балалар уҡырға теләмәй, тиһәләр, тимәк, уҡытыусыһы йүнле түгелдер, тип уйлайым. Китапханасы булып эшләгәндә мәктәптә Әнүәр Бикчәнтәевҡа 100 йыл тулыу айҡанлы ойошторолған конкурс сиктәрендә бер сәғәтлек сара үткәргәйнем. Балалар бик әүҙем ҡатнашты, ә дәрестән һуң бер ҡыҙыҡай артымдан эйәреп килде лә: "Апай, һеҙ беҙҙең уҡытыусыбыҙ булһағыҙ икән", - тине. Һуңынан да ошо балалар урамда осраһа, әллә ҡайҙан ихлас һаулыҡ һорашып, аралашып китәләр. Үҙ дәресемдә биреп сыҡһам - булды, тип түгел, ә үҙ уҡыусымдың тормош уҡытыусыһы булһам ине, тигән теләк-мөнәсәбәт булырға тейеш был һөнәрҙә һайлаусыларҙа.

**Сәриә ҒАРИПОВА яҙып алды.**

ТОРМОШ ҺАБАҠТАРЫ

# ҠЫҘЫҠҺЫНҒАНҒА - ҠЫҘЫҠ

**Кешенең күңелендә маҡсаты, хыялы, ғәме, сәме булғанда ул йәшәй! Кешесә йәшәргә бурыслы икәнен һиҙгән, йәшәгән дәүере менән ҡыҙыҡһынып, атҡарған хеҙмәтенән, башҡарған шөғөлөнән рухи ҡәнәғәтләнеү ала белгән кеше лайыҡлы дан, хөрмәттә йәшәй. Йәшәйем, тигән кеше, ауыр хәлдә лә үҙендә көс, дәрт табып, башҡалар менән тигеҙ йәшәргә һәләтле. Йәнендә ҡыҙыҡһыныу тойғоһо һүнмәһә, кеше әллә ниндәй шарттарҙа ла йәшәүгә һәләтлелер тип уйлайым.**

Эйе, тормошта бөтәһе лә ал да гөл булмай. Ҡайһы берҙә әҙәм ғәмәли һәләмтәләр алып тормошонда ҡулланыр өсөн түгел, ябай ҡыҙыҡһыныуын ҡәнәғәтләндереү өсөн дә төрлө хәүефле хәл, ғәмәлдәргә тәүәккәлләй. Үҙенә зарар килтерерлек күренеш менән артыҡ ҡыҙыҡһынып, самаһыҙ мауығып китеүе һәләмтәһендә нәселен ҡырырлыҡ, оло афәт ҡуптарырлыҡ уңышһыҙ тәжрибәләр ҙә булып тора. Аңлы әҙәмгә ҡаршылыҡтарҙы үтеп, ауырлыҡтарҙы күтәреп, яңылыштарҙы төҙәтеп йәшәргә лә көс, һәләт бирелгән. Хаталарын ваҡытында аңлап, танып, төҙәтеп, алға бара белеү аңлы әҙәмдең өҫтөнлөгө. Кеше бөтәһен дә алдан белеп йәшәһә, ғүмере һүлпән, төҫһеҙ, йыбаныс ҡына булыр ине. Ҡыҙыҡһыныулыҡ нәмәһе булмаһа, маҡсаты ла тыумай, ғәме булмаһа, сәме лә юҡ. Ә былай, килһә секундта тормош алдыма ниндәй мәсьәлә ҡуйыр, уны ҡасан, нисек хәл итермен, ҡайҙа ниндәй аҙым яһармын, тип, әҙәм аңы һәр ваҡыт әүҙем уйҙа, хәрәкәттә, гәмдә. Шуға күрә лә, һәр кемдең ғүмере һәр ваҡыт өр-яңынан башланған һәм ғүмере буйы туҡтауһыҙ дауам иткән шахмат уйыны. Фигуралары, йөрөштәре, ҡағиҙәләре, төрлө уйын алымдары, һәйбәтме, насармы, билдәле, бөтәһе лә таныш

## Н И М Ә ? Ҡ А Й Ҙ А ? Ҡ А С А Н ?

✓Шәмбе, 5 октябрҙә, республикала "Йәшел Башҡортостан" акцияһы уҙғарыла. Мәсьәлә хөкүмәттәге оператив кәңәшмәлә тикшерелде. Радий Хәбиров үҙенең Хакимиәте хеҙмәткәрҙәренә ултыртыу урындары, материалдарҙың күләме, ҡатнашыусылар һанын иҫәпләү, халыҡты йәлеп итеү алымдары буйынса аныҡ мәғлүмәттәр алыу өсөн муниципалитеттар менән кәңәшмә үткәрергә ҡушты. Акция тамамланғас, муниципалитеттар фотоотчеттар тапшырырға тейеш.

✓Башҡортостан Дәүләт Йыйылышы үҙешмәкәр театрҙарға ярҙам тураһында закон ҡабул итте. Ҡоролтайҙа аңлатыуҙарынса, 2020 йылдың йәйендә Башҡортостан Бөтә донъя фольклориадаһын ҡабул итә, унда үҙешмәкәр театрҙар ҙа ҡатнаша. Уларҙы әҙерләү өсөн шарттар булдырырға кәрәк. Закон Фольклориаданан һуң да үҙешмәкәр театр ижадын үҫтереүгә өҫтәмә этәргес көс булыр, тип билдәләнде.

✓2020 йылдың 1 ғинуарынан Рәсәйҙә 30 миллиондан ашыу кеше арттырылған пенсия ала башлай. Тулаү 6,6 процентҡа арта. 2020 йылдың 1 апреленән шулай уҡ 2019 йылда пенсионерҙың йәшәү минимумы артыуына ярашлы дәүләт тәьминәте буйынса пенсияны яҡынса 7 процентҡа арттырыу күҙаллана. Илдә бындай сара 4 миллионлаған кешегә ҡағыла, уларҙың 3,2 миллионы социаль пенсия ала.

✓Әлеге ваҡытта Башҡортостанда йәшәгән 1,2 миллион пенсионерҙың 143 меңе 80 йәште үткән, тип хәбәр иттеләр Пенсия фондының республика буйынса бүлегенән. Билдәләнеүенсә, Башҡортостанда 100 йәшен тултырған 176 оҙон ғүмерленән быйыл 82 пенсионер үҙенең бер быуатлыҡ юбилейын билдәләне. 80 йәше тулған пенсионерҙар юғары пенсия алыу хоҡуғына эйә. 80 йәштән һуң 5334,19 һум күләмендәге ҡартлыҡ буйынса страховка пенсияһы, ике тапҡырға артып, 10 668,38 һум була.

✓Республика көнө айҡанлы Башҡортостанда йәшәүселәргә өҫтәмә ял көнө көтә. Хеҙмәт министрлығында билдәләүҙәренсә, 11 октябрь - Республика көнө - БАССР-ҙың дәүләт суверенитеты тураһында Декларация ҡабул ителгән көн - байрам көнө булып тора. Быйыл 11 октябрь йомаға тура килә. Рәсәйҙең Хеҙмәт кодексы статьяһы нигеҙендә йыллыҡ төп йәки йыллыҡ өҫтәмә түләүле отпуск биргәндә 11 октябрҙәге эшләмәгән байрам көнө - Республика көнө - отпуск иҫәбенә индерелмәй.

**✓ *Кешегә үҙенең һүгенеүе, шул һүҙҙәрҙе әйткәндәге, ҡолағы менән ишетеп ҡабул иткәндәге торошо бик тә насар тәьҫир итә. Быны наркотик йәки тәмәке зыяны менән сағыштыралар.***

*УЙЛЫҒА - УЙ*

**Бөгөнгө интернетта һүгенеү шундай көслө, хатта Юрий Хованский, Евгений Баженов, Макс Голополосов, Дмитрий Куплинов, Олег Brain кеүек мәҙәни тапшырыу алып барғандар ҙа норматив булмаған лексиканан азат түгел. Башҡорт төркөмдәрендә лә күҙәтелә был, башҡортса дөрөҫ итеп яҙа белмәй, ғәҙәттә, бындай "авторҙар", әммә борсаҡты эре ярып һүгенә. Унан һуң, ҡала урамдарында ирҙәрҙән генә түгел, ҡатын-ҡыҙ, йәштәр һәм бала-саға ауыҙынан да ишетеп "туйырға" була. Берәй мәктәп эргәһенән үт, бармаҡ башындайҙары ла һүгенешеп әләкләшеп китеп бара. Ә инде әрләшкәнде, әлеге интернетта ла бәхәсләшкәндәрҙе, хис-тойғоларын белдерә булып һүгенеү һүҙҙәре ҡулланғандарҙы әйтеп тә тораһы түгел. Ошоларҙан сығып, һорау тыуа: ни өсөн һүгенәбеҙ? Нимәнән кеше бындай лексикаға мөрәжәғәт итә? Ниңә бындай телмәргә ғәҙәтләнә?**

# ҺҮГЕНМӘЙЕК!

Бөгөнгө беҙ "оятһыҙ" тип белеп үҫкән һүҙҙәрҙең тарихы бына нимәнән килә. Бик борон замандарҙа, әле диндәр барлыҡҡа килгәнгә тиклем үк, Тибет, Мысыр халыҡ медициналарында ҡатын-ҡыҙҙың енси яҡынлыҡ ҡылыуҙа ҡатнашҡан тән ағзаларын исемләп әйтеү ирҙәр өсөн дауа иҫәпләнгән икән. Потенция менән проблемаһы булған ирҙәр был һүҙҙәрҙе ниндәйҙер кәрәкле мәлдәрҙә ҡабатлап, кәр-ҡөҙрәт ала алған. Йәғни, был ағза атамалары тоҡом дауам иттереүгә булышлыҡ иткән кодлы, мөғжизәле көскә эйә булған һүҙҙәр иҫәпләнгән. Һәм был һүҙҙәрҙе башҡа мәнфәғәттә ҡулланыу тыйылған.

**Мәҫәлән, кемделер ул һүҙҙәр менән әрләү йәки атау ирҙәрҙе кәрһеҙлеккә килтерә, ҡатын-ҡыҙҙы ҡатын-ҡыҙ функцияларынан мәхрүм итә, тип иҫәпләнгән. Балаларына һүгенеүсе ҡатын оятһыҙ һүҙҙәре менән уларҙың мейеләрендәге енси ағзалар эшмәкәрлегенә яуап биреүсе өлөштәренә зыян итә, тигәндәр. Тимәк, был һүҙҙәрҙе берәү ҙә ғәҙәти тормошта ҡулланмаған һәм хатта сәбәпһеҙ әйтеүҙән ҡурҡҡан да.**

Халыҡтар диндәргә килеү менән, яйлап енси бәйләнешкә ҡағылышлы темалар ҙа, ул ағзалар атамалары ла "оят" тамғаһы аҫтына инеп, тыйыла. Һәм бөгөнгә тиклем беҙ был һүҙҙәрҙе оятһыҙ һәм әшәке һүҙҙәр тип беләбеҙ. Әммә шулай ҙа һүгенәбеҙ әле.

Норматив булмаған лексиканы кемдәр ҡуллана? Ниндәйҙер ваҡытта һүгенеп ебәрмәгән кеше бик һирәктер, әммә ундайҙар барҙыр, шулай бит. Бер ҡыҙыҡлы тикшереү тураһында ла әйтеп китке килә. Аварияға осраған самолеттарҙың ҡара йәшниктәрендәге яҙмаларҙы тыңлағанда пилоттарҙың һуңғы секундтарҙа әйткән һүҙҙәре күп осраҡта һүгенеү була икән. Яҡындары был пилоттарҙы, бер ваҡытта ла һүгенмәне һәм ундай һүҙҙе әйтеүе мөмкин түгел, тип иҫбатлағанда ла хәҡиҡәт шундай - сараһыҙлыҡ сигендә кеше эмоцияларының иң негативын сығара, күрәһең. Шуның кеүек ниндәйҙер сиктә, йәки шаярыуын, әйткәнен, хис-тойғоларын көсәйтеберәк күрһәтергә теләгәндә һүгенеп ебәргәндәр була. Быны улар аңлы рәүештә эшләй. Һәм бындай һүҙҙәр бары бик яҡын кешеләр араһында ғына әйтелә һәм бынан тыңлаусылар ҙа, ишеттереүсе лә артыҡ зыян күрмәйҙәр. Ә бына һүгенеүҙе аңһыҙ, уйһыҙ, ғәҙәт буйынса ҡулланыусылар, һүгенеп һөйләшеүселәр инде әлеге телмәрҙәре менән үҙҙәренә лә, ишетеүселәргә лә, хатта осраҡлы шаһиттарға ла зыян килтерә икән. Кеше телмәре эмоцияларҙан торғанлыҡтан, тулыһынса контролдә тотоп була торған процесс түгел.

**Шулай уҡ оятһыҙ һүҙҙәрҙең кеше мейеһенә тәьҫире лә көслө. Һүгенгән ваҡытта йөрәк тибеше көсәйә һәм ауыртыуҙы тойоу кәмей. Шуға ла күптәр һыуыҡ һыуға ингәндә, ҡапыл бешкәндә, төртөлгәндә, һуғылғанда, ҡыҫҡаһы, тәнен ауыртырған йәки шокка индерә торған берәй хәл-торош булғанда аңһыҙ рәүештә һүгенә. Ҡыҙыҡ, шулай бит, асылда беҙ бит инде һүгенергә теләмәйбеҙ ҙә, ҡайһы ваҡыт хатта оятлы ла булып ҡалабыҙ, ә мейе аңдан алда һаҡланыу сараһын күреп өлгөрә, тимәк.**

Әйнде туҡтауһыҙ һүгенеү, һүгенеп һөйләшеү, асыуланғанда һүгенеп ирешеү, йәғни, оятһыҙ һүҙҙәрҙе күп ҡулланыу ул мейенең сәләмәт булмауының бер билдәһе. Мейе тыйылғанды, кешелек өсөн оят тип табылған һүҙ-тойғоларҙы күрһәтмәгә, ишетмәгә сығара башлаған һәм үҙе уларҙан тартынмай икән, был шәхестең (йәғни мейенең) үҫештә түгел, ә, киреһенсә, деградацияла икәненең күрһәткесе, тип таба белгестәр. Медицинала һүгенеү ауырыуы ла бар икән. "Туретта синдромы" тип атала ул. Был нервы ауырыуы. Күптәр был сирҙең еңел формаһын кисереп, ғүмер буйы ла йәшәй. Бындай сирлеләр көйөп киткәндә, артыҡ тулҡынланғанда, ниндәйҙер көслө кисерештәрҙә сәсәгән шикелле итеп тыйылмаҫтан һүгенеп алып китә. Был "өйәнәк" уларҙың эмоциональ торошон ныҡ ҡаҡшата. Үҙенең һүгенеүенән ул ысынлап зыян күрә. Йөрәге, башы, быуындары ауырта, хәле бөтә. Ҡыҫҡаһы, кешегә үҙенең һүгенеүе, шул һүҙҙәрҙе әйткәндәге, ҡолағы менән ишетеп ҡабул иткәндәге торошо бик тә насар тәьҫир итә. Быны наркотик йәки тәмәке зыяны менән сағыштыралар. Шулай уҡ әлеге һүҙҙәрҙе ишеткән башҡаларға ла тәмәкесенең төтөнөн еҫкәп торған һымаҡ хәүеф янай. Ул да насар эмоциялар, бөтөнлөгөн, энергетикаһын емерә торған негативты ҡабул итә.

**Туҡтауһыҙ һүгенеп һөйләшкән ирҙәрҙең дә эсендә тынысһыҙлыҡ, ҡурҡыу, бала саҡ травмалары, үҙ-үҙенә ышанмау тойғолары йәшәй һәм улар шуны йәшереү, һаҡланыу, үҙҙәрен көслө итеп күрһәтеү өсөн дә һүгенә, телмәрҙең тупаҫ төрөн һаҡланыу сараһы итеп ала, тип ышандыра психологтар. Интернет селтәрендә фейк биттәре аша ҡойоп һүгенеп әрләшеп ултырыусылар ҙа шул психик тайпылышы булғандар, йәғни агрессияларын ошондай юл менән сығарыусылар. Уларға ысынлап еңел булып ҡала икән.**

Шулай уҡ был норматив булмаған лексика менән күберәк түбән социаль ҡатлам ҡуллана. Үҙен хөрмәт иткән, тәрбиәле тип иҫәпләгән һәм башҡаларҙың да уны шулай ҡабул итеүен теләгәндәр, әлбиттә, телмәрен дә шул кимәлдә төҙөй. Беҙ бер нисек тә зәңгәр экран аша оятһыҙ шаярған комиктарҙы, ярамаған һүҙҙәр ҡулланған етәксене, хеҙмәтләндереүсене, әңгәмәсене һәм хатта тупаҫ һөйләшкән автобус водителен дә ҡабул итә алмайбыҙ. Сөнки мейебеҙгә әҙәм итеп яратылғандан алып "оят" төшөнсәһе, хатта ки аңылыр тип уйлайым, һалынған.

Халыҡ аҡылы ла, дини тәрбиә лә һүгенеүҙән тыя. Ир-егет һаҡал-мыйыҡ йөрөтөргә тейеш, сөнки шул һаҡалға фәрештәләр ҡунып, уның ауыҙынан йәмһеҙ һүҙҙәрҙе сығармай, тигән була беҙҙең инәйҙәр. Ҡарғау, тупаҫ әрләү ҙә хупланмай. Тимәк, һүгенеүҙең, оятһыҙ һүҙҙәрҙең ябай һүҙ генә түгел, ә организмды, мейене, энергетиканы ҡыйратыусы көскә эйә булған ҡөҙрәтле һүҙҙәр икәнен дә онотмайыҡ. Телмәр таҙалығы ул шул уҡ күңел сафлығы ла бит. Ҡыҫҡаһы - һүгенмәйек!

**Әлиә СӘЙҒӘФӘРОВА.**

---

кеүек, ә даими үҙгәреүсән шарттар киләһе секундта ниндәй ҡатмарлы мәсьәлә ҡуйыр, ниндәй ҡарар ҡабул ителеп, ниндәй аҙым яһалыуы билгеһеҙ. Шуның өсөн дә ғүмеребеҙ ваҡыт уҙғарыу түгел, һәр миҙгеле көсөргәнешле хәрәкәттәге йәшәү! Шуға ла бер-береһенә оҡшаш булһа ла, бер төрлө яҙмыштар юҡ! Һәр кем ғүмерендә үҙ уйынын уйнай. Уйламаҫтан яҙмышы менән уйнағандар үҙен-үҙе отолоуҙарға дусар итә. Кемдер тормоштан "мат" алып, сараһыҙҙан уйынын туҡтатырға мәжбүр була, кемдер, отолоп ҡуйыуынан ғәрләнеп, үҙенең һаулығын, тормошон ҡаҡшата, кемдер цейтнотта иҫәнгерәп ултыра, кемдәрҙер, ауыр хәлдә ҡалһа ла, төңөлмәй, бирешмәй, сәмләнеп, ауырлыҡтан сығыу ысулдарын, отошло юлдарҙы, дөрөҫ аҙымдар эҙләй, таба, еңмәгән хәлдә лә лайыҡлы "ничья"ға ризалаша. Маҡсатына өлгәшер өсөн ҡурҡмай, яңы партияны башларға баҙнат итә! Ғүмерендә шахмат уйынын профессияһы иткән кеше лә отола, уйындағы кеүек, тормошта ла уңышлы, отошло булыр өсөн хәтһеҙ оҫталыҡ, таһыллыҡ, йылдамлыҡ талап ителә. Ҡыйыу кешенең уйыны бер ваҡытта ла уйналып бөтмәй, ул иң һуңғы пешкаһы менән дә һөжүмгә ташлана, һәр йөрөшө маҡсатына ҡыйыу аҙым булғас, барыбер еңә!

Йәнендә сәме, ғәме бар ҡыйыуҙар, егәрлеләр яңынан-яңы тәбиғәт мөғжизәләрен аса, йыһан серҙәрен сисә, кеше аңының үҫеү сиктәрен киңәйтә, йән, тән мөмкинлектәрен камиллаштыра. Донъяла ҡыҙыҡһыныусылар барҙа кешелектең тормош усағы яңынан-яңы ялҡындар сәсеп, осҡондар атып яныр әле. Ул усаҡ янына һыйыныусылар быуындан-быуынға аҡыллыраҡ, һәләтлерәк, үҙҙәренең донъяһына һәм бер-береһенә сабырлыраҡ, мәрхәмәтлерәк булырына ышанғы килә. Әҙәмдең күңелендә ҡыҙыҡһыныу ялҡыны дөрләгәндә, оло маҡсаты булғанда ул йәшәр, бөгөнгөһөнән дә ҡыҙығыраҡ, бөгөнгөһөнән дә ҡыйыуыраҡ йәшәр әле, тигән өмөт бар. Донъяһы менән ҡыҙыҡһынған кеше генә яңы асыштар яһай, данлы еңеүҙәр яулай, томошта туҡтауһыҙ алға барырға һәләтле! Әҙәмде әҙәм иткән дә, бәхетлешат иткән дә, хәүефле сиктәргә эткән дә, ҡайғы-хәсрәткә дусар иткән дә фәҡәт шул ҡыҙыҡһыныу тойғоһо! Әҙәм ғүмерендә ҡыҙыҡһына, тәүәккәлләй, яңылыша, үкенә, илай, төҙәтә, еңә, дан яулай, тимәк, яҙмышына һәр кем үҙе түрә! Быуындарҙан-быуындарға мираҫ ителгән йәшәйеш рәүеше шулайҙыр, күрәһең...

*Рәнйетелгән йән, тәнгә лә,*
*"Ғәҙеллек юҡ", тигәнгә лә,*
*Түҙемлек бир, Хаҡ Тәғәлә!*
*Һәләтлек бир саф ғәмәлгә,*
*Ул бит Һинең менән түгел,*
*Үҙе менән хаҡ дәғүәлә…*

**Урал МОСТАФИН.**

---

## НИМӘ? ҠАЙҘА? ҠАСАН?

✓Башҡортостандың Кушнаренко районында урынлашҡан "Первушин" аэродромына легендар летчик, ике тапҡыр Советтар Союзы Геройы Муса Гәрәевтың исемен бирергә тәҡдим иттеләр. "Кызыл тан" республика гәзите шундай башланғыс менән сығыш яһаны. "Первушин" бәләкәй авиация аэродром комплексы Рәсәйҙә иң яҡшы аэродромдарҙың береһе һанала. Ул район һәм республика халҡы өсөн ғорурлыҡ сығанағы булып тора.

✓Өфөлә режиссер Булат Йософов "Башҡортостан" киностудияһы булышлығында яңы ижади проектҡа - күренекле башҡорт шағиры Рәми Ғариповтың тормошо һәм ижады хаҡында фильмға тотондо. "Шағир көндәлеге" фильмының бюджеты 23,3 миллион һум булыр тип көтөлә. 20 сентябрҙә кино төшөрөү өсөн халыҡтан аҡса йыйыу башланды. Проекттың рәсми төркөмө хәбәр итеүенсә, 10 көндә 60 мең һум йыйылған. Премьера 2020 йылдың октябренә билдәләнгән.

✓Башҡортостанда грипҡа ҡаршы вакцинация дауам итә. Быйыл республикала профилактика прививкаларының милли календары сиктәрендә миҙгелле грипҡа ҡаршы 1 миллион 830 мең кешегә, шул иҫәптән 418 мең балаға прививка яһау күҙаллана.

✓Башҡортостанда йыл башынан 192 кеше, шул иҫәптән 7 бала янғында һәләк булды. Башҡортостандың Ғәҙәттән тыш хәлдәр буйынса дәүләт комитеты 55 йәштән өлкәнерәк яңғыҙ йәшәгән фәҡир граждандарҙы янғын тураһында хәбәр иткән приборҙар менән тәьмин ителергә тейешле граждандар категорияһына индерергә тәҡдим итте.

✓Башҡортостандың Өфө районында сүп-сар эшкәртеүсе завод барлыҡҡа килеүе ихтимал. Был хаҡта Башҡортостан Республикаһының тәбиғәттән файҙаланыу һәм экология министры урынбаҫары Нияз Фазылов хәбәр итте. Уның һүҙҙәренсә, тиҙҙән проект республика Хөкүмәтендәге "инвестиция сәғәте"ндә ҡарала.

✓Республикала Берҙәм медицина порталының "К-Врачу" рәсми мобиль ҡушымтаһы эшләй башланы. Ҡушымта менән теркәлеүһеҙ ҡулланырға мөмкин. Сервис аша үҙең нығытылған медицина учреждениеһын иҫәпкә алып табипҡа яҙылырға, шулай уҡ медицина ярҙамы күрһәтеү буйынса мәғлүмәт менән танышырға була. Мобиль ҡушымтаны телефонға ҡуйыу өсөн AppStore йәки Google Play ҡулланығыҙ.

*✓ "Торатау" геопаркын халыҡ-ара рекреацион һәм экологик туризмы селтәренә индереү тар йүнәлешле белгестәрҙең генә түгел, Рәсәйҙең һәм халыҡ-ара аудиторияның да иғтибарын йәлеп итә.*



*ҠЫҪҠАСА*

# ДҮРТЕНСЕ УРЫНДА...

✓ **2019 йылдың август йомғаҡтары буйынса Башҡортостан үҙенең позицияларын яҡшыртты һәм Яңы проекттарҙы үҫтереү буйынса стратегик башланғыстар агентлығының Рәсәй төбәктәренең инвестиция мөхите медиарейтингында дүртенсе урынды алды.** Беренсе урынды Приморье крайы яуланы, икенселә - Һамар өлкәһе, өсөнсөлә - Мәскәү өлкәһе. Медиарейтинг федераль һәм төбәк киң мәғлүмәт сараларында телгә алыу нигеҙендә төҙөлә. Төҙөгәндә Рәсәй Федерацияһы субъекттарында Инвестиция мөхите торошоноң милли рейтингы күрһәткестәре баһалана. Медиарейтинг төбәктәрҙе инвестиция һәм эшлекле мөхитте яҡшыртыуҙағы уңыштарын асыҡ яҡтыртыуға дәртләндереү өсөн булдырылған. Был эш, тәү сиратта, урындағы эшҡыуарҙарға, шулай уҡ инвесторҙарға йүнәлтелергә тейеш.

✓ **Быйыл көҙ Башҡортостандан 5 меңгә яҡын егет Рәсәй армияһына хәрби хеҙмәткә саҡырыла, тип хәбәр итте республиканың хәрби комиссары Игорь Харченко.** Кремль сайтында Рәсәй Президенты Владимир Путиндың указы баҫылды, уға ярашлы 2019 йылдың октябрь-декабрь айҙарында илдән 132 мең кеше хәрби хеҙмәткә алына. Уларҙың 5 меңгә яҡыны - Башҡортостандан. "Көҙгө саҡырылышҡа старт бирелде. Быйыл көҙ саҡырылғандарҙың күбеһе Көнбайыш хәрби округына оҙатыла, - тип хәбәр итте журналистарға Башҡортостандың хәрби комиссары Игорь Харченко. - Республиканың саҡырыу пункты эшкә әҙер. Тәү сиратта, яҙ көнө оҙатылмаған егеттәр саҡырыла. Беренсе оҙатыу 24 октябргә билдәләнгән". Уның һүҙҙәренсә, быйыл көҙ саҡырылғандарҙың 3 меңгә яҡыны ҡоро ер ғәскәрҙәренә хеҙмәт итергә ебәрелә.

✓ **1 октябрҙән Башҡортостандың күп функциялы үҙәктәре инвалид баланы реабилитациялау өсөн сертификат алыуға ғаризалар ҡабул итә башланы.** Тимәк, ошо көндән ғаризаларҙы һәм документтарҙы йәшәгән урын буйынса яҡындағы күп функциялы үҙәккә тапшырырға мөмкин. Башҡортостандың күп функциялы үҙәктәре етәкселеге һәм Ғаилә, хеҙмәт һәм халыҡты социаль яҡлау министрлығы тейешле килешеү төҙөнө, тип хәбәр итә ведомствоның матбуғат хеҙмәте. Алдан хәбәр ителгәнсә, Башҡортостанда инвалид бала тәрбиәләгәндәр быйыл көҙҙән башлап 42 мең һумға (анығыраҡ әйткәндә, 41 722,59) сертификат алыу мөмкинлегенә эйә. Уның менән баланы реабилитациялау өсөн түләргә була. Башҡортостан Башлығы Радий Хәбиров шундай йөкләмә бирҙе.

✓ **Башҡортостан халыҡтың сәләмәт йәшәү рәүешенә ынтылыу буйынса төбәктәр рейтингында 29-сы урынды биләй, тип хәбәр итә Росстат.** Тикшереү барышында экспертар һигеҙ күрһәткесте, шул иҫәптән: физик культура һәм спорт менән шөғөлләнгән халыҡтың өлөшөн; тәмәке тартыуҙы; алкоголь һатыуҙы; иҫерек килеш һәм наркотик тәьҫирендә енәйәт ҡылған кешеләр һанын; спиртлы эсемлектәрҙән ағыуланып үлеү осраҡтарын; зарарлы һәм хәүефле хеҙмәт шарттары менән эштә мәшғүлдәр өлөшөн анализланы. Башҡортостан 70,6 балл йыйып, 29-сы урынды алды. Уртаса күрһәткес 65,4 балл тәшкил итте. Рейтингта беренсе урында - 90,9 балл менән Дағстан Республикаһы. Һуңғы баҫҡыста 4,7 балл менән Камчатка крайы тора.

*ТӨРЛӨҺӨНӘН*

# ЕВРАЗИЯ ЙӨРӘГЕ - БЕҘ

**1 октябрҙә Сочиҙа Башҡортостан Башлығы Радий Хәбиров "Рәсәй һәм ислам донъяһы: ике яҡ өсөн дә уртаҡ роль һәм үҙ-ара йоғонто" махсус сессияһында ҡатнашты һәм сығыш яһаны. Сессия "Валдай" Халыҡ-ара дискуссия клубының XVI ултырышы барышында уҙҙы.**



- Башҡортостанда йәшәгән 4 миллион халыҡтың 67 процентҡа яҡыны - мосолмандар, тип билдәләне республика Башлығы үҙенең сығышында. - 36 проценты тирәһе - рустар, 30 проценты самаһы - башҡорттар, 24 проценты - татарҙар. Тағы бер нисә ҙур этнос, атап әйткәндә, сыуаштар һәм мариҙар республика биләмәһендә 100 меңдән ашыу иҫәпләнә. "Беҙгә республика цивилизациялар, төрлө конфессиялар киҫелешендә тора тип әйтеүҙәре оҡшамай, сөнки беҙ киҫелештә түгел, ә үҙәктә урынлашҡанбыҙ. Үҙәктә бөтәбеҙ ҙә дуҫ йәшәйбеҙ. Шуға күрә Башҡортостан - Евразия йөрәге тип йыш әйтәбеҙ", - тине Радий Хәбиров һәм Башҡортостанда милләттәрҙең һәм конфессияларҙың бер бөтөн булып йәшәүе: мосолмандарҙың - Пасханы һәм Раштыуаны, ә православие динендәгеләрҙең Ҡорбан һәм Ураҙа байрамдарын билдәләүе хаҡында һөйләне. Уның әйтеүенсә, Башҡортостанда дин таратыусылар менән проблема юҡ, бында мосолмандар-сөннәттәр йәшәй, республикала ваххабизм күренеше теркәлгән бер мәсет тә юҡ. "Ошондай ҡыҫҡа тезистар, дәлилдәр менән мәҙәниәттәрҙең, диндәрҙең һәм милләттәрҙең бер-береһенә ысынлап та тәрән үтеп инеүен күрһәтергә тырыштым. Төп байлығыбыҙҙы ошонда күрәбеҙ", - тип билдәләне Радий Хәбиров.

# ҺИГЕҘ АЙ ӨСӨН ТҮЛӘ

**Башҡортостан Башлығы Радий Хәбиров йылытыу өсөн факт буйынса йәки 1/8-гә түләүгә күсеү йәһәтенән халыҡҡа ҙур аңлатыу кампанияһы үткәрергә ҡушты.**

"Элек йылылыҡ өсөн аҡса бер тигеҙ, 12 календарь ай буйына йәки 1/12 схемаһы буйынса алына ине. Хәҙер кешеләр йылытыу миҙгелендә генә түләй. Йылы биреү туҡтатылһа, улар түләмәй",- тип белдерҙе Радий Хәбиров республика Хөкүмәтендәге оператив кәңәшмәлә. Республика Башлығы һүҙҙәренсә, әле киң мәғлүмәт сараларында "хаҡты арттырыу тураһында теманы ҡуйыртыу башлана". Тәү сиратта был республика халҡына "мәғлүмәт еткермәү" тураһында һөйләй. "Шуға иғтибар итеүегеҙҙе һорайым. Халыҡҡа быны ысынлап та ғәҙел икәнен, беҙҙең уға оҙаҡ әҙерләнеүебеҙҙе аңлатырға кәрәк", - тип өҫтәне ул. Йылытыу осоронда түләүгә күсеү дөйөм йорт иҫәпләү приборҙары күрһәтмәһенән сығып, ҡулланылған йылы өсөн түләргә мөмкинлек бирә. Ошондай приборҙар ҡуйылмаған йорттарҙа иһә нормативтар буйынса иҫәпләнә. Башҡортостанда йәшәүселәргә йылытыу өсөн яңы "1/8" ысулы буйынса түләү квитанциялары октябрҙә үк таратыла. Иҫәп-хисап йылытыу миҙгеле башланған көндән - 2019 йылдың 23 сентябренән башлана.

# "ТОРАТАУ" ГЕОПАРКЫ...

**Испанияның Севилья ҡалаһында ЮНЕСКО-ның 15-се конференцияһында тәүге тапҡыр халыҡ-ара кимәлдә Башҡортостандың "Торатау" геопаркы менән таныштырыу сараһы уҙҙы.**

Конференцияла бөтә донъянан төрлө геопарктарҙың 400-ләгән вәкиле ҡатнашты. Мәскәү дәүләт университетының "Мәҙәниәт иҡтисадын, ҡала үҫешен һәм креатив индустрияларҙы өйрәнеү үҙәге"нән "Торатау" геопаркы концепцияһын төҙөүселәр биләмәне үҫтереү моделе менән таныштырҙы. Бынан алда презентация Башҡортостан Башлығы Радий Хәбировҡа һәм ошо көндәрҙә Мәскәүҙә Башҡортостан Республикаһы көндәрендә күрһәтелде. Геопарк вәкилдәренең ошондай кимәлдәге сараларҙа ҡатнашыуы геопарктың, республиканың һәм Рәсәйҙең халыҡ-ара имиджына ыңғай йоғонто яһай. "Торатау" геопаркын халыҡ-ара рекреацион һәм экологик туризмы селтәренә индереү тар йүнәлешле белгестәрҙең генә түгел, Рәсәйҙең һәм халыҡ-ара аудиторияның да иғтибарын йәлеп итә, был иһә Башҡортостандың туристик ҡеүәтен федераль кимәлдә үҫтереүгә булышлыҡ итергә тейеш", - тип белдерҙеләр үҙәктә. Конференцияла Рәсәйҙең башҡа геопарктары, шул иҫәптән "Глобаль геопарк" статусына эйә "Янғантау" геопаркы менән таныштырыу булды. Быйыл ноябрь аҙағында "Янғантау" геопаркында Геопарктарҙы үҫтереү буйынса стратегик сессия була, унда Европа геопарктары һәм ЮНЕСКО-ның геопарктар буйынса халыҡ-ара программаһының Рәсәй комитеты вәкилдәре ҡатнаша.

# АУЫЛҒА ЯРҘАМ

**Башҡортостан Башлығы Радий Хәбиров Рәсәй Хөкүмәтенә "Техника паркын яңыртыу 2.0" программаһын киңәйтергә тәҡдим итте. 2 октябрҙә Дмитрий Медведев етәкселегендәге министрҙар кабинеты ултырышында сығыш яһап, ул ағымдағы йылда старт алған Росагролизинг проектының һөҙөмтәлелеген билдәләне. Ошондай ярҙам менән Башҡортостан аграрийҙары 500 миллион һумға техника һатып алыуға өлгәште.**

Йыл башынан Башҡортостандың агросәнәғәт комплексы предприятиелары 4,5 миллиард һумға ауыл хужалығы техникаһы һатып алды. "Ләкин был ғына аҙ. Әлеге мәлдә беҙгә 1200 иген йыйыу комбайны, 3 мең юғары етештереүсәнле тракторҙар етешмәй", - тине Башҡортостан етәксеһе. Радий Хәбиров аграрийҙар эшендәге ауырлыҡтар хаҡында ла һөйләне. Яҙ көнө 170 мең гектар сәсеүлек юҡҡа сыҡты, 585 предприятие 865 миллион һумдан ашыу юғалтты. Дөйөм алғанда, 2019 йылда сәсеүлек 3 миллион гектар тәшкил итте (2018 йыл кимәлендә), яҙғы сәсеү эштәре 2,12 миллион гектарҙа башҡарылды. "Иген һәм ҡуҙаҡлы культуралар майҙандарының 94 проценты йыйып алынды, төшөм - 3 миллион тоннанан ашыу, гектарҙан уртаса уңыш 20 центнерға яҡын тәшкил итте. Хәҙер техник һәм май бирә торған культураларҙы йыябыҙ, шәкәр сөгөлдөрөнән һәйбәт уңыш көтәбеҙ. Быйыл, фараздарға ярашлы, уҙған йылға ҡарағанда юғарыраҡ уңышҡа иҫәп тота алабыҙ", - тине республика етәксеһе. Радий Хәбиров федераль үҙәккә агросәнәғәт комплексына финанс ярҙамы өсөн рәхмәт белдерҙе: 2019 йылда Башҡортостандың ауыл хужалығына дәүләт ярҙамы 4,4 миллиард һум тәшкил итте, шунын 2,2 миллиарды федераль бюджеттан күсте.

## БАШ ҠАЛА ХӘБӘРҘӘРЕ

✓Айҙар Бәҙғетдинов Өфөнөң Дим районы хакимиәте башлығы итеп тәғәйенләнде. Бынан алда ул район башлығының беренсе урынбаҫары вазифаһын биләне. 2016 йылдан район башлығы булып эшләгән Сергей Плотников июлдә Өфөнөң Октябрь районы хакимиәте етәксеһе итеп тәғәйенләнде.

✓Уҙған ял көндәрендә Өфөлә "Терра Башҡортостан" ат-спорт турнирының һуңғы һайлап алыу этабы уҙҙы. Стартҡа Бәләбәй, Кушнаренко, Ғафури, Хәйбулла һәм Яңауыл районлары вәкилдәре сыҡты. Ике хәл иткес ураү йомғаҡтары буйынса, 12-се этапта Хәйбулла районынан Виталий Рогалев еңеү яуланы. Шулай итеп, марттан алып сентябргә тиклемге ат сабыштарында еңеүселәр - Дыуан, Илеш, Дүртөйлө, Белорет, Федоровка, Ҡыйғы, Бишбүләк, Стәрлетамаҡ, Көйөргәҙе, Күгәрсен, Борай һәм Хәйбулла райондарынан 12 жокей 11 октябрҙә төп бүләк өсөн ярышасаҡ.

✓Яңы уҡыу йылынан Өфөнөң ете балалар баҡсаһында аҙыҡ-түлеккә аллергиянан яфаланған балалар өсөн төркөмдәр эшләй, тип хәбәр иттеләр республика Мәғариф министрлығынан. Һауыҡтырыу йүнәлешендәге төркөмдәр 24-се, 33-сө, 73-сө, 106-сы, 234-се, 279-сы һәм 89-сы Белем биреү үҙәгендә асылды. Балаларҙы ошондай төркөмдәргә урынлаштырыу мәсьәләһе буйынса район мәғариф бүлектәренә мөрәжәғәт итергә кәрәк, тип белдерҙеләр ведомствола.

✓Мәҙәни мираҫ объекттарын дәүләт һаҡлауы идаралығы Өфөнөң биш боронғо йортон муниципаль әһәмиәттәге тарих һәм мәҙәниәт ҡомартҡылары реестрына индерҙе. Өйҙәр XIX-XX быуаттағы Өфөнөң тарихи төҙөлөш өлөшө булып тора. 2017 йылдан алып объекттар асыҡланған мәҙәни мираҫ объекттары исемлегендә булды. Әйтәйек, Зенцов урамындағы Лихтанский йорто, Октябрь революцияһы урамындағы Шамов йорто, Сахаров утарының Көнбайыш йорто, Сперанский утарының Көнсығыш йорто, Аверьяновтар йорто реестрға индерелергә тейеш.

✓Өфөнән өс йәшлек Максим Мухин "Һоҡланғыс кешеләр" программаһы геройы булды. Малай үҙенең мөмкинлектәрен күрһәтеү өсөн әсәһе менән Мәскәүгә барып ҡайтты. Өс йәше саҡ тулған бала рус, башҡорт, испан, инглиз, француз һәм ҡытай телдәрендә иркен һөйләшә. Полиглоттың әсәһе Рәйсә Яруллина һүҙҙәренсә, өйҙә улар рус, башҡорт һәм инглиз телдәрендә аралаша. Үҙе - белеме буйынса лингвист, шуға ла улын телдәрҙе өйрәнеүгә йәлеп иткән.

**"БАШИНФОРМ" материалдары файҙаланылды.**

ҠАЛА ХАКИМИӘТЕНДӘ



**Ҡала хакимиәтендә сираттағы кәңәшмә миҙгел проблемаһына, йәғни һауа торошоноң ҡапыл үҙгәреүе һөҙөмтәһендә юлдарҙа боҙлауыҡтар барлыҡҡа килеү ихтималлығынан һаҡланыу сараларына йүнәлтелде. Һауа торошо үҙенең ҡылығын уҙған аҙнала күрһәтеп, иҫкәртеп ҡуйҙы ла инде. Шул уҡ ваҡытта ҡала территорияһында урынлашҡан күперҙәрҙә, юл сиселештәрендә тиҙлек режимын сәғәтенә 40 километрғаса кәметеү индерелде, махсус юл билдәләре ҡуйылды.**

# БИТАРАФ БУЛМАЙЫҠ!

Ә көн тәртибендә шиномонтаж хеҙмәте күрһәтеүсе предприятиеларҙың эше ҡаралды. Был хаҡта ҡала хакимиәте башлығы урынбаҫары Николай Фадеев бәйән итте. Билдәләнеүенсә, бөгөн Өфөлә транспорт сараларын техник хеҙмәтләндереүсе һәм ремонтлаусы 630-ҙан ашыу предприятие, шул иҫәптән шиномонтаж хеҙмәте күрһәтеүсе стационар булмаған 300 предприятие һәм объект бар. Тәгәрмәстәрҙе һүтеп йыйыу (бортировка, бортовка) миҙгелендә оҫтаханаларға көнөнә 16-50 автоһәүәҫкәр мөрәжәғәт итә. Шиномонтаж хеҙмәте күрһәтеүсе объекттарға, ниндәй милек формаһында булыуҙарына, майҙан күләмено һәм эшселәр һанына ҡарамаҫтан, бер үк ҡануниәт талаптары ҡулланыла. Ул - санитар нормаларҙы һәм янғынға ҡаршы, экологик ҡағиҙәләрҙе үтәү. Әммә ҡайһы бер эшҡыуарҙар уларға күҙ йома, ерҙе маҡсатҡа ярашлы ҡулланмай. Бындай күренеш, ғәҙәттә, стационар булмаған шиномонтаж пункттарына ҡағыла. Бынан ары, ошондай стационар булмаған хеҙмәт күрһәтеү объекттарын урынлаштырыу механизмы үҙгәрә. Хәҙер ундай предприятиелар килешеү төҙөү өсөн электрон торг һөҙөмтәләре буйынса һайланасаҡ. Был ҡала бюджетын тулыландырыу маҡсатын да күҙаллай.

Шулай уҡ уларҙың, йәғни халыҡҡа хеҙмәт күрһәтеүсе предприятиеларҙың, йөҙөн булдырыу концепцияһын эшләү инициативаһы хаҡында ла һүҙ күтәрелде. Йәмәғәт туҡланыуы, көнкүреш хеҙмәте күрһәтеү, сауҙа объекттарының категория буйынса үҙ йөҙө булырға тейеш. Бында инде ҡаланың үҙсешенән һәм халыҡтың ихтыяжынан сығып эш итергә кәрәклеге билдәләнде. Сөнки заман үҙгәрә, бынан күпмелер йыл алдан эш башлаған стационар булмаған объекттар берҙәм архитектура стиленә һәм заман талаптарына тап килтерелергә тейеш. Берҙәм стандарттар булдырыуҙы көйләү өсөн, әлбиттә, дөйөм муниципаль норматив акт булдырыу ҙа талап ителә.

Ошо көндәрҙә туҡталышта урынлашҡан туҡланыу киоскыһынан ризыҡ алып ашап, бер нисә кешенең, шул иҫәптән балаларҙың ағыуланыуы һәм дауаханаға эләгеүе тураһында мәғлүмәт шаңҡытҡайны. Кәңәшмәлә был тема ла иғтибар үҙәгенә сығарылды. Ҡулланыусылар баҙары, туризм һәм ҡулланыусылар хоҡуҡын яҡлау идаралығы начальнигы Луиза Макшукова белдереүенсә, бөгөн Өфөлә стрит-фуд (урамда һатылған ризыҡ) форматында 242 стационар булмаған йәмәғәт туҡланыуы объекты иҫәпләнә. Уларға СанПиН - вентиляцияның, канализацияның булыуы, һыу үтеүе, һатыу мөҙҙәте ваҡыты һәм продукцияның йөнәшәлеге, хеҙмәткәрҙәрҙең санитар кенәгәләре, ҡалдыҡтарҙы утилләштереүгә килешеү, дезинфекция, дератизация һ.б. ҡағиҙәләрҙе үтәү талабы ҡуйыла. Әммә ҡайһы бер эшҡыуарҙар был талаптарҙы даими боҙа. Быға ҡайһы бер ваҡытта алда яҙып кителгән күнелһеҙ осраҡҡа килтергәндәгесә, эшҡыуарҙың эш башлауы тураһында тейешле органдарға хәбәр итмәүе тора. Ә инде бындай объекттар рөхсәтһеҙ урынлаштырылһа, ҡала хакимиәтенең Ер һәм милек мөнәсәбәттәре идаралығына уларҙы асыҡлау һәм ябыу вәкәләте бирелгән. Әлбиттә, бында граждандарҙың яуаплылығы ла ҙур роль уйнай, улар йәмәғәт туҡланыуы урындарында санитария һәм шәхси гигиена ҡағиҙәләре боҙолоу осраҡтарына битараф ҡалырға, күҙ йоморға түгел, ә был хаҡта Роспотребсоюздың Башҡортостан буйынса идаралығына хәбәр итергә тейеш.

**Зәйтүнә ӘЙЛЕ.**

ИШЕТТЕГЕҘМЕ ӘЛЕ?

## БЕРЕНСЕ БАЛАҒА...

**Киләһе йылдан хөкүмәт беренсе балаға пособие түләү өсөн 2019 йылға ҡарағанда өсләтә күберәк аҡса бүләсәк, тип хәбәр итәләр Хеҙмәт министрлығында.**

Финанслауҙың артыуы пособие алыусыларҙың өс тапҡырға тиерлек күбәйеүе менән бәйле. Ғинуарҙан улар өс йәшкәсә балаһы булған, ә ата-әсәнең килеме бер кешегә ике тәбәк йәшәү минимумынан артмаған ғаиләләргә түләнергә тейеш. 2020 йылда пособиеның күләме ил буйынса уртаса 12 мең һум була - әлегеһенә ҡарағанда 7 процентҡа күберәк. 2021 йылда түләүҙәр - 12,3 мең һумға ҡәҙәр, 2022 йылда 12,6 мең һумға тиклем артыр тип көтөлә. Министрлыҡ баһаһы буйынса, киләһе йылдан 1 миллион самаһы ғаилә айлыҡ түләүҙәр ала башлай. Быйыл пособие яҡынса 379 мең ғаиләгә түләнә.

## ТЫЙЫЛА!

**Хәҙер Башҡортостанда балаларға электрон тәмәкеләр, кальяндар, вейптар, тәмәкеһеҙ тартыу ҡатнашмалары, таштар, сироптар һәм уларҙың аналогтары тыйылды.**

Республика Дәүләт Йыйылышы депутаттары балиғ булмағандарға ошондай тауарҙар һатыуҙы сикләү тураһында тейешле закон ҡабул итте. "Тиҙҙән Башҡортостан Республикаһының Административ хоҡуҡ боҙоуҙар кодексына балаларға ошо тауарҙарҙы законһыҙ һатҡан өсөн яуаплылыҡ билдәләгән үҙгәрештәр индерелә, - тип аңлатты Башҡортостан Республикаһы - Дәүләт Йыйылышы рәйесе Константин Толкачев. - Тәүҙә, тыйыуға ҡарамаҫтан, яҙа нормаһының булмауы мөмкин. Шулай ҙа сауҙа селтәрҙәре вәкилдәре әле үк законды үтәр тип ышанам. Уларҙың абруйы туранан-тура шуға бәйле. Өҫтәүенә бындай хәл оҙаҡ дауам итмәҫ". Башҡортостан парламенты спикеры яҡын арала законды боҙған өсөн яза билдәләнер тип вәғәҙәләне. Ә уға тиклем уның үтәлешен йәмәғәтселәр контролдә тота.

## ҺАЛЫМДАН...

**Рәсәй Президенты Владимир Путин граждандарҙың бер нисә категорияһын физик берәмектәрҙең килеменә һалым (НДФЛ) түләүҙән азат итеү тураһындағы федераль законға ҡул ҡуйҙы.**

Әйтәйек, йылына дүрт меңдән артыҡ булмаған күләмдә матди ярҙам алған студенттар, курсанттар, аспиранттар, адъюнкттар, ординаторҙар һәм ассистент-стажерҙар НДФЛ түләүҙән азат ителә. Бынан тыш, стихиялы бәлә-ҡазаларҙа, терактарҙа һәм башҡа ғәҙәттән тыш хәлдәрҙә зыян күргән граждандар һалымдың ошо төрөнән азат ителә, уларҙың ғаиләләренә лә НДФЛ түләргә кәрәкмәй. Яңылыҡ торлағын ғәҙәттән тыш хәлдәрҙә зыян күргәндәргә ҡуртымға биргәндәргә лә ҡағыла. Закон 2020 йылдың 1 ғинуарынан үҙ көсөнә инә.

ҮӘТ, ШУЛАЙ!

# ЗӘҢГӘР ЭКРАНЫҢДЫ КӨЙЛӘ!

**14 октябрҙә Башҡортостанда федераль телевизион каналдарҙың аналог тапшырыуҙары туҡтатыла. Телевидениеһыҙ ҡалмаҫ өсөн һанлы сигналға көйләнергә кәрәк.**

Аналог телевидениеһы һүрәт һәм тауыш йәһәтенән һанлынан күпкә ҡалыша, ҙур йышлыҡ ресурсын талап итә. Һанлы сигнал тораҡ пункттың алыҫлығына һәм ҙурлығына ҡарамай. Кабель һәм спутник операторҙары селтәрен ҡулланыусыларҙан айырмалы рәүештә, һанлы телевидение тамашасыларына абонент түләүе юҡ. Өфө хакимиәтенең матбуғат хеҙмәтендә билдәләүҙәренсә, "цифрға" күсеү кабель, интернет-телевидение, IP-TB менән файҙаланғандарға йәки юлдаш телевидениеһын тоташтырғандарға ҡағылмай. Башҡаларға үҙҙәренең телевизорҙарын тикшерергә кәрәк - хәҙерге моделдәр өҫтәмә йыһазландырыу талап итмәй. Әгәр телевизорҙың кинескобы бар һәм алты-ете йыл элек һатып алынған икән, һанлы приставка кәрәк. Аҙ тәьмин ителгән граждандарға һәм пенсияһына федераль социаль өҫтәмә алған пенсионерҙарға һанлы эфир йәки юлдаш телевидениеһын ҡабул итеү өсөн ҡорамал һатып алып ҡуйыуға дәүләт ярҙамы күрһәтелә. Һанлы эфир телевизион тапшырыуына күсеүгә бәйле һорауҙар менән "ҡыҙыу линия"ға шылтыратырға мөмкин.

**- Һанлы эфир телевизион тапшырыу хеҙмәттәрен күрһәтеү, телевизион һәм ҡабул итеү ҡорамалын көйләү** тураһында мәғлүмәтте 8-800-220-20-02 номерына шылтыратып белергә мөмкин.

**- Өйҙә юлдаш телевизион ҡорамалын алыу һәм ҡуйыу тәртибе** хаҡында мәғлүмәтте 8-800-347-00-55 номеры буйынса белергә була (шылтыратыу бушлай).

**- Республика бюджеты иҫәбенә һанлы приставкалар һатып алған өсөн компенсация алыу** тәртибе тураһында белеү өсөн (347) 282-40-35 телефонына шылтыратырға кәрәк.

"Һан" менән файҙаланған бөтә абоненттарға бушлай 20 канал (Беренсе канал, Рәсәй 1, Рәсәй 24, Рәсәй К, Матч, НТВ, 5 канал, "Карусель", ОТР, ТВЦ, Рен, Спас, СТС, Домашний, ТВ-3, "Пятница", "Звезда", "Мир", ТНТ, Муз.) һәм өс радиоканал бирелә.

"Башинформ" агентлығы хәбәр иткәнсә, республика күптән аналог телевидениеһынан һанлыға күсергә әҙерләнә. Ете меңдән ашыу кешегә ярҙам күрһәтелгән дә инде.

## Х А Л Ы Ҡ Д А У А Һ Ы



**Был рубрикала баҫылған кәңәштәрҙе ҡулланыр алдынан мотлаҡ табип менән һөйләшергә, аныҡ диагноз ҡуйырға, үләндәргә аллергия юҡлығын тикшерергә кәрәклекте онотмағыҙ.**

### Экзема

❖ 20-шәр грамм аҡ сәскә менән кейәү үләнenә 2 стакан ҡайнар һыу ҡойорға, 15-20 минут талғын утта ҡайнатырға, һөҙөргә. Көнөнә бер нисә тапҡыр экзема менән зарарланған урынға һөртөргә.

❖ 15 грамм әстерхан сәтләүеге ағасы япрағына 100 мл үҫемлек майы өҫтәп, 7 көн торорға һәм унан һуң һыу ҡайнап ултырған кәстрүлдә 3 сәғәт буйына ҡайнатырға, ике ҡатлап һалынған марля аша һөҙөргә һәм 50 грамм балауыҙҙы эйләп өҫтәй-өҫтәй тағы ла ярты сәғәт ҡайнатырға. Зарарланған тирегә һөртәү өсөн ҡулланырға.

❖ Экземаға кәбеҫтә япрағы ябып, 2-3 тәүлеккә бәйләргә. Бер нисә тапҡыр ҡабатларға.

❖ Һөттә бешкән кәбеҫтәгә көрпә өҫтәп, экземаға ябырға.

❖ Ҡулдағы экземаны дауалағанда ҡоро йылы ла килешә. Электр плитаһын ҡыҙҙырып, 10-15 минут ҡулдарҙы йылыла тоторға. Курс - 10 процедура. Кәрәк булһа, тағы ла ҡабатларға. Ғәҙәти лампа, шулай уҡ күк төҫтәге быяла лампа ҡулланырға мөмкин.

### Эренле шеш

❖ Эренле шешке тире ҡыҙарып сыҡҡас уҡ дауалай башлау кәрәк. Иң файҙалы ысул - ярты сәғәтҡә медицина банкаһы ҡуйыу.

❖ Картуфты ҡырып, шешкә һалырға. 4 сәғәт һайын алыштырырға.

❖ Һуғанды мейестә бешерергә, 2 өлөш һуғанға 1 өлөш ҡырылған кер һабыны ҡушырға, болғатырға. Сығып ҡына килгән шешкә дауаларға, тәүлегенә 1 тапҡыр алыштырырға.

❖ Һуған да шештең үҙәге тиҙерәк өлгөрөүенә килтерә.

### Ҡалҡан биҙе

❖ 5 стакан һыуға 1 стакан һоло һалып, кеҫәл кеүек масса барлыҡҡа килгәнсе ҡайнатырға. Һөҙөргә, 2 стакан һөт ҡойорға, ҡайнау хәленә еткерергә. 2 ҡалаҡ бал өҫтәгәс, тағы ла 5 минут ҡайнатырға. Көнөнә 3 тапҡыр ашарҙан ярты сәғәт алда яртышар стакан эсергә.

**Айбикә ЯҠУПОВА.**

✓ *Баш эйеп, нимәнелер һорап, үтенеп йөрөү башҡорттарҙың холҡонда бөтөнләй юҡ. Шулай итеп, бында тәрбиә генә түгел, халыҡтың менталитеты ла ҙур йоғонто яһай.*



ЙОЛАНДАН ЙҮН ТАП!

# БАШҠОРТ БАЛАҪЫ

**Башҡорт балаҫы орнаменттары күскенсе үзбәктәр, ҡырғыҙҙарҙың һәм ҡаҙаҡтарҙың бер өлөшөндә осрай. Әммә Урта Азия төбәгендә ныҡ һиҙелгән Төркостан йоғонтоһо башҡорттарҙың балаҫтарында һирәк күҙәтелә. Көньяҡ Уралда өбөрөлө, йөнтәҫ балаҫтар һуғыу үҫешмәгән, балаҫтарҙың биҙәгендә төркмән балаҫы орнаменты "гель" - һигеҙ мөйөшлө фигураға оҡшаш күп ҡырлы медальондар юҡ. Әммә саҡ ҡына төньяҡтараҡ, Кама буйына яҡынайған һайын ҡатмарлы күп мөйөшлө биҙәктәрҙе шаршауҙа, һирәгерәк таҫтамалдарҙа осратабыҙ.**

Иләнгән киндер һәм етендән Волга-Кама традицияһына ярашлы итеп һуғылған балаҫтар, күрәһең, йөндән балаҫ һуғыусы көньяҡ башҡорттарына II быуат буйына өлгө булып торған. Ике осраҡта ла биҙәктәрҙең стилистикаһы яҡын.

С.В. Иванов фин-угырҙарҙың геометрик орнаментында үҙенсәлекле комплекс асыҡлай. Унда башҡа элементтар менән бер рәттән, бер-береһенең өҫтөнә һуғылған ромбтар, һигеҙ мөйөшлө йондоҙҙар, мөйөшлө интегралдар, өсмөйөштәр менән уратып алынған ромбтар бар. Себер халыҡтарының орнаментына бағышланған хеҙмәтендә ғалим уларҙы ентекле өйрәнә. Генетик яҡтан был фигураларҙы ул ябай элементтар - өсмөйөштәр, квадраттар менән бәйләп, төрлө халыҡтарҙа уларҙы ҡулланыуҙың ысулдары тураһында һөйләй. Ғалим был биҙәктәрҙең Көнсығыш Европа һәм Көнбайыш Себер киңлегендә II меңйыллыҡ башында уҡ булғанлығын раҫлай, әммә улар Волга-Кама төбәгендә ҡасан һәм ниндәй юл менән барлыҡҡа килгән, был һорау асыҡ ҡала.



*Стилләштерелгән үҫемлек орнаменты.*
*Миәкә районы. 1969*

Шуныһы ла бар, башҡорттарҙа ошо телгә алынған биҙәктәрҙең һәр береһенең үҙенең тарихы бар. Ромб, йондоҙ биҙәктәре арҡыры селтәр фрагменттары булып тора, тап ошо принцип балаҫ биҙәге нигеҙенә һалынған. Өсмөйөштәр, кәкерсәктәр менән бергә ҡулланылып, тап ошо элементтар балаҫ биҙәген тәшкил иткән. Уларҙың мәғәнәһе төньяҡ башҡорттары һәм фин-угыр биҙәктәренән айырылған. Композициялар ҙа башҡараҡ төҙөлгән.

XX быуатта көньяҡ-көнбайыш райондарында яңы - сәскәле-үҫемлек орнаментлы балаҫтар барлыҡҡа килә башлаған.

**Светлана ШИТОВА.**
**"Халыҡ сәнғәте: көньяҡ башҡорттарында кейеҙ, балаҫ һәм туҡымалар. Этнографик очерктар" китабынан.**

АТАЙ-ӘСӘЙҘӘР ЙЫЙЫЛЫШЫ

# ДӨРӨҪМӨ...

## баланы ҡырҡ ерҙән тыйыу?



**Баланы тәрбиәләүҙә тыйыу алымы йыш ҡулланыла. Ҡулланыла һәм төрлө белгестәр араһында төрлө фекерҙәр, бәхәстәр тыуҙыра. Кемдер тыйыу - тәрбиә нигеҙе, тип уйлаһа, кемеһелер тыйыу - бөгөнгө заман балаларына бөтөнләй тап килмәгән алым, тигән уйҙа. Ғөмүмән, тыйыу ниндәй характерҙа булырға тейеш? Тыйып ҡына баланы тәрбиәләп буламы? Ошо һорауҙарға педагог-ғалимдарҙың яуаптарын тәҡдим итәбеҙ.**

### "Ярамай" һүҙе... ярамай

Баланы тыйған хәлдә лә, ата-әсә был алымды уйлап ҡына, урынлы итеп ҡулланһын ине, тип кәңәш бирге килә. Һәр бер тыйыу нигеҙле булырға тейеш. Ни өсөн теге йәки был эште башҡарыу ярамай икәнен ата-әсәләр тыныс ҡына, әммә ышандырырлыҡ итеп аңлатырға бурыслы. Әгәр ҙә баланды тыяһың икән, "ярамай" һүҙен мөмкин тиклем аҙыраҡ ҡулланыу зарур. Мәҫәлән, Японияла биш йәшкә тиклем баланы бер нәмәнән дә тыймайҙар. Бала изге йән булараҡ ҡабул ителә. "Ярамай" һүҙен нимә менән алыштырырға мөмкин һуң? Ундай һүҙҙәр бихисап. Ата-әсәләр бары тик балаһына яҡшы тәрбиә бирергә әҙер генә булһын. "Теге йәки был эште эшләгән кеше матур булмай", - тип әйтеү ауыр түгел бит. Тыйылған емеш иһә һәр саҡ татлы, ылыҡтырғыс була. Баланың "ярамай" тигәнде ишетеп тә, эш боҙған саҡтары бар. Сөнки ул рөхсәт ителмәгән нәмәнең ни өсөн тыйылғанын аңламай. Ошо тәңгәлдә миҫал килтереп китеү мөһим. Балалар йыш ҡына электр приборҙары менән ҡыҙыҡһыусан. Һуңғылары иһә, үҙ сиратында баланың һаулығын, ғүмерен ҡурҡыныс аҫтына ҡуя. Балаға йылап ҡына ниңә улар менән уйнау хәүефле икәнен аңлатҡандан һуң, эҫе үтеккә берәй тамсы һыу тамыҙып ҡарау файҙалы буласаҡ. Йәғни һүҙ менән түгел, миҫал, эксперимент менән ярамай икәнлеген аңлатырға кәрәк.

### Хаталар өҫтөндә эш

Ата-әсәләрҙең төп хатаһы шунан ғибәрәт: улар баланы тыйғанда ҡурҡытыу алымы ҡуллана. Мәҫәлән, эт янына барып ҡарап торған балаһын күреп ҡалған әсә ҡурҡып ҡысҡырып ебәрә һәм тауышы менән сабыйын да ҡурҡыуға ҡалдыра. Һөҙөмтәлә, психикаһы боҙолған бала агрессияға бирелә, психик ауырыуҙар алдында көсһөҙ була. Ата-әсәһенең иғтибары етмәгән бала юрый эш боҙған булып ҡылана.

Халыҡ педагогикаһы баланы иртә йәштән тәрбиәләп үҫтерергә өйрәтә. Япония мәҙәниәтендә баланы әсә ҡарынында уҡ тәрбиәләү тигән күренеш киң таралған. Ата-әсә баланы тыуымаҫ борон уҡ яратырға өйрәнә, уның киләсәген хәстәрләй. Шулай итеп, үҙ-ара ныҡлы психологик бәйләнеш булдырыла.

Бала ата-әсәһе нимәнәндер тыйғанда, хәстәрлекле ҡараш тойорға тейеш. Тыйыу алымы мотлаҡ рәүештә йомшаҡ булһын. Мәҫәлән, йыш ҡына ниндәйҙер ауырыу менән сирләгән балаға табиптар ҡушыуы буйынса шәкәр ашарға ярамай. Әммә шәкәр тәмен татымаған бала үҙен башҡалар араһында мәхрүм тоя, кәмһенә. Күңелендә көнләшеү, үпкә хистәре яралыуы мөмкин. Шуға күрә ундай бала, исмаһам, бер тапҡыр булһа ла семтемдәй генә шәкәр киҫәгенен тәмләп ҡарарға тейеш.

### Алтын урталыҡ

Тик тыйыуҙар аша ғына тәрбиәләнгән баланың киләсәктә үтә ҡырыҫ холоҡло, агрессив, психик яҡтан тотороҡһоҙ, йә, киреһенсә, йомшаҡ характерлы, үҙ фекере булмаған, кеше менән аралашыуҙан ҡурҡҡан мәмәй булып үҫеүе бар. Шулай уҡ ауылда, мәҫәлән, ата-әсәһенең ҡаты тыйыуы аҫтында үҫкән бала, ҡалаға килеп, үҙен сылбырҙан ысҡынған эт кеүек тотоуы мөмкин. Тәү сиратта бала күңелендә рух таҙалығы, әхлаҡи тәртип нигеҙе һалыу зарур. Баланың рухи үҙәге ныҡ булһа, бер ниндәй ҙә ҡаты тыйыуҙар, баҫыуҙар кәрәк булмаясаҡ. Бары тик ата-әсәнең иғтибары һәм иҫкәртеүҙәре генә етер. Шулай итеп, тыйыу аңлайышлы, әҙәпле һәм йомшаҡ булырға тейеш. Баланы шәхес итеп ҡабул итеү мөһим.

### Заман балаһы бит

Хәҙерге заман балалары бик аҡыллы һәм ҡыҙыҡһыусан. Уларҙы тыйыу мөмкин дә түгел һымаҡ. Мәҫәлән, яңыраҡ ҡына беҙгә өс йәшлек малай ҡунаҡҡа килде. Ксерокс янында уралып йөрөгәнен күреп, һаҡ ҡына иҫкәртеү яһарға булдым. "Был тәтәйҙе тейергә ярамай. Уның менән ҙур ағай-апайҙар ғына уйнай", - тинем мин барыһын да уйынға ҡороп. Өс йәшлек малай минә күҙҙәрен тултырып аптырап ҡарап торҙо ла, мине шаҡ ҡатырғаныс әйтте лә һалды: "Тәтәй түгел, ксерокс бит был!" Шуға күрә, ундай аҡыллы ла, үҫеше буйынса алда барған баланы тыйғанда ла һаҡлыҡ кәрәк. Йәнә шул: нимәнән булһа ла тыйғанда беҙ балалар янында булырға тейешбеҙ. Йәғни ата-әсәләргә бындай ситуацияла балалары менән бер яҫылыҡта, позицияла булыу зарур. Балаларҙың ҡулынан тартып алға әйҙәү түгел, ә теләһә ниндәй осраҡта ла янында барыу дөрөҫ булыр. Әгәр ҙә бала яңылыш юлдан китте икән, уны тыйырға түгел, ә аңлатыу, миҫал килтереү алымы ярҙамында эш итеү, тура юлға баҫтырыу кәрәк. Тәрбиәләү нигеҙе шунда, минеңсә.

### Ғорурлыҡ бәләһе

Башҡорттарҙа балаларҙы тыйыу тигән нәмә бар. "Быны былайтма, тегене тегеләйтмә", тибеҙ ҙә баланы үтә тәртипле, үтә тыңлаусан, үтә аҡыллы итеп тәрбиәләйбеҙ. Һунынан ул балаларыбыҙ башҡалар терһәктәре менән этешеп, алға ынтылғанда, әҙәпле генә итеп сираттың иң осона барып баҫа. Теләгәнен аламы ул, юҡмы? Әҙәплелек, баҫылғанлыҡ ҡына билдәһеме икән ул? Улай түгелдер, минеңсә. Үтә лә ҙур ғорурлыҡ тойғоһо беҙгә алға барырға, берәй нәмәң юҡ икән, кешенән һорарға рөхсәт итмәй. Дәрәжәне генә белеп, һәүетемсә генә эшләп йөрөгән, хәбәр һөйләгән башҡорт рөхсәте булмаған, тыйылған нәмәне ҡурҡаҡлыҡ арҡаһында түгел, ғорурлығы арҡаһында башҡармаясаҡ. Сөнки баш эйеп, нимәнелер һорап, үтенеп йөрөү башҡорттарҙың холҡонда бөтөнләй юҡ. Шулай итеп, бында тәрбиә генә түгел, халыҡтың менталитеты ла ҙур йоғонто яһай. Әлбиттә, әгәр ҙә беҙ балаларыбыҙҙа көслө ихтыяр, үҙ-үҙенә талапсанлыҡ тәрбиәләйбеҙ икән, менталитетты ла иплап кенә заманға яраҡлаштырып була.

### Язаға... тарттырма!

Тыйыу алымы баланы яуапҡа тарттырыу менән оҙатылып килә икән, был ата-әсәнең көсһөҙлөгө тураһында һөйләй. Бала физик язаға ҡарағанда, психологик язаны күпкә ауырыраҡ кисерә. "Һин тыңламағас, мин һине яратмайым", тигән ата-әсә, балаһын һөйөүҙән мәхрүм итеү менән ҡурҡытып, сабыйына ни тиклем ауыр психологик яра һалыуын аңламай. Балағыҙ менән бер ни тиклем һөйләшмәй тороу ҙа баланың өҙөләнеүенә, борсолоуына килтерә. Ә бала "Һеҙ мине яратмағас, мин насар булып ҡалам", тип уйлаһа, нишләрһегеҙ? Язаға тарттырыу алымы ата-әсәләр өсөн бөтөнләй көтөлмәгән һөҙөмтә килтереүе лә бар бит...

### Ниңә тыям?

Тәү сиратта ата-әсәләр үҙ-үҙҙәренә "Ә ниңә мин баламды тыям? Әгәр ҙә мин тыям икән, уны ниндәй маҡсаттан сығып эшләйем?" тигән һорауҙар бирергә тейеш. Балалар үҙҙәренең асылы менән бик аҡыллы, һиҙгер йән эйәләре. Бәлки, сабыйыбыҙҙы тәрбиәләү өсөн икенсе алымдар ҡулланып ҡарарғалыр? Ата-әсәләр иң тәүҙә баланың шәхесен рух менән ҡабул итергә тейеш.

Һәр бер мәсьәләлә алтын урталыҡ булырға тейеш. Ҡайсаҡ ата-әсәләр үҙҙәре уҡ балаларын артыҡ иркәләтеп ташлай. Боронғолар "Балаңды үҙеңдән түргә ултыртма, үҙеңдән татлыраҡ ашатма", тип әйтеп ҡалдырған. Бала һеҙҙе баштан уҡ ихтирам итергә, һаҡларға өйрәнергә тейеш. Мәҫәлән, йыш ҡына автобустарҙа шундай күренешкә шаһит булабыҙ: балаһын ултыртып, ата-әсә баҫып килә. Бала иһә сабый сағынан уҡ өлкәндәрҙе ихтирам итергә, кеселекле булырға өйрәнергә тейеш. Ата-әсәләр балалары менән һөйләшергә, теге йәки был мәсьәләне аңлатып бирергә тартынмаһын ине.

### Йәйен ни эшләйҙәр?

Йәй осоро - балалар өсөн иң хәүефле, көсөргәнешле мәл. Был айҙарҙа балаларҙың, мәктәпкә йөрөмәгәнлектән, буш ваҡыттары күп һәм улар уны төрлө уйындар, сәйәхәттәр менән тултырырға тырыша. Иң хәтәре - ата-әсәләре эштә, йәки баҡса менән мәшғүл саҡта, балалар урам йоғонтоһона ныҡыраҡ бирелә, насар төркөм менән дуҫлашып алып, боҙолоп, тәртипһеҙләнеп китеү ихтималлығы арта. Шуға күрә, йәйге каникулдар башланмаҫ элек, бала менән алдан һөйләшеүҙәр үткәреү фарыз. Мәҫәлән, бәләкәй һәм урта йәштәрҙәге балалар менән күмәкләп йәй мәлендә үҙеңде тотоу ҡағиҙәләрен төҙөп ҡуйырға мөмкин. Әгәр бала был процесса әүҙем ҡатнашһа, тағы ла һәйбәтерәк. Иҫендә лә ҡала, уның тарафынан тыйыу булараҡ та ҡабул ителмәй. Йәки бала менән һөйләшкәндә ошондай алым ҡулланыу уның күңелендә ризаһыҙлыҡ хисе тыуҙырмаҫ: "Һиңә беҙ эштә ваҡытта йәнең ни теләй, бөтәһен дә эшләргә ярай. Тик йылғала яңғыҙыңа һыу инеү, сит кешеләрҙе фатирға ҡунаҡҡа саҡырыу, шырпы менән уйнау һ.б. дөрөҫ түгел".

**(Дауамы 9-сы биттә).**

✓ *Нисек булһа ла, әйле төркөмө башҡорттары Урал территорияһына ваҡыты-ваҡыты менән килеп йөрөүҙән уны үҙҙәренең даими йәшәү төйәгенә әйләндереүе монгол яуҙарынан күпкә алдараҡ була.*



ЫРЫУЫҢ КЕМ?

# БАТШАЛАРҒА БАШ ЭЙМӘГӘН ӘЙЛЕЛӘРБЕҘ!

Шул уҡ ваҡытта уртаҡ этник сығышлы тип иҫәпләнгән төп әйле, тырнаҡлы, ҡаратаулы, һарт-әйле, шулай уҡ мырҙаларҙың боронғо риүәйәттәре бер үк тип әйтерлек сюжетҡа ҡоролған: улар үҙҙәренең ата-бабаларын Уралға Һырдарья йылғаһы буйҙарынан, Бохараға яҡын Башҡорт тауҙары янынан килгән, тип иҫәпләй. Сюжет айырымлыҡтары ошо боронғо төйәктәрен ни рәүешле ташлап китеүҙәренә генә бәйле: йә улар юғалған һарыҡ көтөүен эҙләп китә, йә булмаһа мөгөҙлө айғыр эйәртеп алып киткән йылҡылары эҙенән килеп, Уралға барып сыға икән. Мәҫәлән, мырҙалар ырыуында яҙылып алынған сюжетта бына ошолар бәйән ителә: "Борон беҙ Һырдарья башҡорттары тип атала инек. Ата-бабаларыбыҙ Һыр ярындағы Ҡәйеп тигән ерҙә йәшәгән. Бай бабаларыбыҙҙың береһенең буҙ аты, юртаҡ байталы һәм Ғәҙелбаныу тигән һылыу ҡыҙы юғалған. Өс егет уларҙы эҙләргә сығып киткән. Улар эҙ буйлап оҙаҡ барған һәм Турғаяҡтан алыҫ булмаған ерҙә ҡыҙҙы тапҡан. Аттарҙың эҙе Уралға табан алып киткән; егеттәр Яйыҡ үрен үтеп китеп, Әй йылғаһына килеп сыҡҡан. Бындағы тәбиғәттең - ҡуйы урмандарҙың, йылғаларҙың, үҙәндәрҙең матурлығы һәм байлығы уларҙың хушын алған. Был ерҙәрҙә кешеләр булмаған. Егеттәр бер йылғаны Әй, икенсеһен - Үҙән, ә улар араһындағы тауҙы Ҡөҙрәт тау, тип атаған. Улар ҙур булмаған бер йылға буйында ике атты ла таба һәм Һырдарья буйына ҡайтып китә. Егеттәр үҙҙәре күргән ерҙәр хаҡында һөйләгәс, бөтөн ырыу, барлыҡ Һырдарья башҡорттары Уралға күсеп китә. Күсеп килгәндәр араһында Мырҙабәк исемле кеше - мырҙаларҙың бабаһы, Имса - тырнаҡлыларҙың бабаһы, уның ир туғаны Тумса - әйлеләрҙең бабаһы була". Күреүебеҙсә, мырҙалар ырыуы вариҫтары үҙҙәрен, әйлеләр кеүек үк, Һырдарья башҡорттарынан, тип иҫәпләй, тырнаҡлыларҙың әйлеләргә нәҫелдәш булыуын да раҫлай.

Р.Ғ. Кузеев фекеренсә, боронғораҡ осорҙарҙа, атап әйткәндә, VII - IX быуаттарҙа әйлеләрҙең һәм хәҙерге көньяҡ-көнсығыш башҡорттарының ата-бабалары яҡын этник бәйләнештә тороп, Һырдарья һәм Арал диңгеҙе далаларындағы бәшәнәк-уғыҙ-ҡыпсаҡ союзы ҡәбиләләре составына ингән. Әйле этнонимияһында бохар, һарт, үзбәк, ҡыҙылбаш, төркмән, ҡараҡалпаҡ атамаларының булыуы ла иғтибарға лайыҡ. Әй - ай (әйле) этнонимына үзбәктәрҙең айнлы, Нуратин төркмәндәренең - алты-ата-айтамғалы, төркмән-нохурлиларҙың - айы, ҡырғыҙҙарҙың - ай этник атамалары тап килә. Әй, һарт, таулы (ҡаратаулы), этимгән (этимгән-әйле), көсөк (эткөсөк, ҡаракөсөк), ҡомло (ҡомой), алтмыш (алтмыш ҡолаҡ-әйле), ҡыҙылбаш кеүек уртаҡ этнонимдар әйле башҡорттарының Урта Азия төркиҙәре, уғыҙ-төркмәндәр менән урта быуаттар башында уҡ тығыҙ бәйләнештә йәшәүен дәлилләй. Был боронғо Әйле шәжәрәһендә лә сағылыш тапҡан: "Тоғланыш (Төркөстанда баш булды) - Әфлах (ҡырғыҙҙар бабаһы) - Мәрд - Төркмән - Кинйә (Бохараны буйһондорҙо) - Иштәк (башҡорт ханы булды; Иштәктең улдары күп булды, боронғо тыуған йорто Ғомод дарьяһында ине) - уның улдары Тырнаҡлы, Һарт, Бәкәтун (мәжүси булып вафат ине) - Әйле (Миәс үҙәнендә, атаһы илендә, ул үлгәс тә 50 йыл бей булды, 90 йәшендә Миәс үҙәнендә донъя ҡуйҙы".



Фарсы тарихсыһы Рәшит әд-Дин (XIV б.) уғыҙҙарҙың 24 ырыуы булып, Уғыҙ хандың 6 улының исемдәренә ярашлы, Көн, Ай, Йондоҙ, Күк, Тау, Диңгеҙ аймаҡтарына бүленеүе хаҡында яҙа. Төркмән шәжәрәләрендә Айхандың Ҡумы исемле улы ла теркәлгән. Был әйле ырыуының ҡомой-әйле тармағы исеменә тура килә.

Әйлеләрҙең уғыҙ этник мөхитендә формалашыуы ысынбарлыҡҡа тап килгән хәлдә лә, барса әйлеләрҙе лә уғыҙ сығышлы, тип һығымта яһау дөрөҫ булмаҫ ине. Урта Азия ҡәүемдәре Алтай, Етеһыу, Арал буйында көн итеүсе төрлө сығышлы халыҡтар йоғонтоһонан азат булмай. Билдәле тарихи процестар һөҙөмтәһендә был мөхиттә тәүҙәрәк төрки ҡағанаттарында, һуңынан Дәште-Ҡыпсаҡта һәм монголдарҙың Алтын Урҙа дәүләтендә йәшәүсе халыҡтар өҫтөнлөк ала. Әйлеләрҙең ата-бабалары ошо ҡәүемдәр менән дә бәйләнешкә инә. Р.Ғ. Кузеев яҙғанса, әйлеләр ошо мөхиттә фарсы һәм ғәрәптәргә баджгард исеме аҫтында билдәле булған ҡәбиләләр менән тығыҙ аралашып, туғанлашып китә.

Әйле башҡорттарының ата-бабалары ошо осорҙа Аралдан төньяҡтараҡ ятҡан далаларҙан Көньяҡ Уралға, Тобол, Уй, Яйыҡ, Миәс йылғалары үҙәндәренә тиклем үтеп инә башлай. Күрәһең, урта быуаттарҙың тәү осоронда төрки халыҡтарының төньяҡ күршеһе булған уғыр ҡәбиләләренең бер өлөшө төркиләшә башлай. Ҡайһы бер тикшеренеүселәр уғыр-башҡорт бәйләнештәре мөхитендә уларҙың яңы атамаһы - иштәк этнонимы барлыҡҡа килгән, тип иҫәпләй. Һәр хәлдә лә, башҡорт мөхитенә иштәк термины әйлеләр аша килеп инә. Тап әйлеләр шәжәрәһендә (шулай уҡ һарттарҙа, тырнаҡлыларҙа) Иштәк хан уларҙың (башҡорттарҙың) тәү бабаһы итеп теркәлә. Әйткәндәй, иштәк этнонимы ҡараҡалпаҡтарҙа (улар составындағы ҡыпсаҡ ырыуының бер бүлеме эстек тип атала), ҡырғыҙҙарҙа (эштек), һуңынанырaҡ Тобол һәм Барабин татарҙары араһында ла осрай.

Ҡырғыҙҙарҙың боронғо "Манас" эпосында геройҙың инәһе яғынан булған ағаһының исеме Иштәк була, ул солто исемле ырыуҙың төп бабаһы, ә ошо ырыу составында айтуу һәм һарт бүлемдәре лә бар. Солто ырыуының төп тамғаһы ла, әйлеләрҙеке кеүек, ай-тамғанан ғибәрәт. Шулай уҡ боронғо башҡорт ырыуҙарынан һаналған үҫәргәндәр һәм тамъяндарҙы ла башҡа төркиҙәр ошо уҡ иштәк исеме менән атай башлай. Был әйлеләрҙең хәҙерге көньяҡ-көнсығыш башҡорт ырыуҙары менән боронғо тарихи бәйләнештә булыуын раҫлаусы дәлилдер.

Әйлеләрҙең хәҙерге йәшәгән ерҙәрен ҡасаныраҡ төйәк итеүен аныҡ ҡына дата менән билдәләп булмай. Тарихи сығанаҡтарҙы өйрәнеүселәр Хорезм, Ике һыу (Двуречье) менән Урал аръяғында йәшәүсе ҡәүемдәрҙең скиф-сармат дәүеренән үк хужалыҡ һәм этник бәйләнештәре булыуын раҫлай. Төрки сығышлы ҡәүемдәр беҙҙең эраның I мең йыллығы урталарында Арал - Көньяҡ Урал арауығын үҙҙәренең икһеҙ-сикһеҙ көтөүлектәренә әйләндерә алған. Ғәрәп тарихсыһы Әбүл Ғази яҙыуынса, дала халыҡтары йәй айҙарында Яйыҡ үренә тиклем килеп етеп, ҡыштарын Һыр тамағына кире ҡайтып йөрөгән. Археолог Н.А. Мәжитов Көньяҡ Урал ерлегендә табылған, сығышы менән Азия күскенселәренә хас мәҙәни ҡомартҡыларҙың VIII - IX быуаттарға ҡарауын билдәләй. Р.Ғ. Кузеев Арал буйында йәшәүсе этник төркөмдәрҙең көнбайышҡа һәм төньяҡ тарафтарға күмәкләп күсеп китеүен IX - XII быуаттар сигендә билдәләп, быны бәшәнәктәр, уғыҙҙар һәм ҡыпсаҡ ҡәүемдәренең эске һәм тышҡы хәрәкәте менән бәйләй. Нисек булһа ла, әйле төркөмө башҡорттары Урал территорияһына ваҡыты-ваҡыты менән килеп йөрөүҙән уны үҙҙәренең даими йәшәү төйәгенә әйләндереүе монгол яуҙарынан күпкә алдараҡ була.

**Вәлиәхмәт БӘҘРЕТДИНОВ әҙерләне.**

**(Дауамы. Башы 39-сы һанда).**

ТАРИХИ ХӘҠИҠӘТ



# БОРОНҒО БАШҠОРТ ДӘҮЛӘТСЕЛЕГЕ

Төп белемем буйынса юрист булараҡ, миңә башҡорт төрлө ырыуҙарҙан уҡмашҡан, тигәне әһәмиәтле. "Дәүләт һәм хоҡуҡ теорияһы" тигән юридик фән - нимә ул дәүләт, ул ҡасан, нисек һәм ниндәй сәбәптәр арҡаһында барлыҡҡа килә; халыҡҡа ул нимәгә кәрәк һәм башҡа шундайыраҡ һорауҙарға яуап бирә. Ошо фән менән шөғөлләнеүсе ғалимдар дәүләттең бер нисә юл менән барлыҡҡа килеүен асыҡлаған. Шундай ысулдарҙың береһе - сығыштары төрлө булған ырыу-ҡәбиләләрҙең берләшеүе. Берләшеүҙең сәбәптәре төрлөсә булыуы мөмкин: йә һөйләшеп-килешеп тыныс, татыу юл менән; йәиһә бер ырыуҙың икенсеһен баҫып алыуы, бойһондороуы аша. Берләшеүҙең сәбәптәре ниндәй генә булмаһын, бындай ырыуҙар-ҡәбиләләр берләшмәһе идара итеү органына мохтаж, сөнки сығыштары төрлөсә булған ҡәүемдәрҙең мәнфәғәттәре, ихтыяждары һәм донъяға ҡараштары ла тәүҙә төрлөсә була һәм уларҙы нисек тә булһа бер-береһенә яраҡлаштырырға, килештерергә кәрәк. Яраҡлаштырыу, килештереү тигәндән, донъяның бөйөк кешеләренең кемеһененде "Айырым скрипкасыға дирижер кәрәкмәй, ә бына оркестр дирижерға мохтаж", тигәне иҫкә килә. "Халыҡ һәм дәүләт" тигәндә лә ошо "оркестр - дирижер" мөнәсәбәттәре иҫкә төшә, сөнки халыҡтарҙы килештереү, яраҡлаштырыу, улар менән идара итеү өсөн махсус орган - дәүләт тигән ойошма талап ителә. Был махсус орган бөтә ҡәүемдәр өҫтөнән юғары тора, уның идара итеү өсөн махсус тәғәйенләнгән кешеләре була һәм халыҡ уға буйһонорға мәжбүр, сөнки буйһонмағандар өсөн дәүләттең көсләп буйһондороу өсөн махсус көсө бар. Был көс - яугирҙар, хөкөм сығарыусылар (хәҙергесә әйткәндә, судьялар) төркөмө. Был көс төркөмө батша, хан, бей, батыр тип аталған кешеләргә буйһона, уларҙың талаптарын, бойоролтарын үтәй. Шулай итеп, халыҡтан өҫтөн торған, халыҡ буйһонорға мәжбүр булған көс барлыҡҡа килә. Был - дәүләтте барлыҡҡа килтергән юлдарҙың береһе генә.

Ошо бер генә сәбәпте алып ҡарағанда ла, беҙ башҡорттоң дәүләте бик борондан булған, тигән һығымтаға киләбеҙ, сөнки быны Дәүләт теорияһы фәненең логикаһы талап итә. Беҙ башҡорттар Уралда формалашҡанбыҙ. Уралға беҙ кендегебеҙ менән береккәнбеҙ. Урал менән башҡорт икеһе бер бөтөн төшөнсә. Быны рухы зәғифләнмәгән, теүәл, камил булған һәр башҡорт, үҙ халҡының тарихын йүнләп белмәгән көндә лә, аңлай, тоя. Ләкин ҡайһы бер тарихсылар, башҡорт Уралға бик һуң ғына килеп төпләнгән; уға тиклем был матур ерҙәрҙе фин-уғыр ҡәбиләләре төйәк иткән, тип иҫбат итергә маташты, әле лә маташалар. Ярар, был хата ҡараш менән дә килештек, ти. Тик Уралда йәйрәп йәшәп ятҡан фин-уғыр ҡәбиләләре башҡортто ҡолас йәйеп, әйҙүкләп ҡаршыланымы икән? Ай-һай! Был бик шикле. Берәү ҙә үҙ еренә икенселәрҙе ҡыуанып индереп бармай: төрлөсә ҡаршылыҡ күрһәтәсәк. Тимәк, башҡортҡа был ерҙе талашып, һуғышып баҫып алырға тура килгән, тип уйларға ҡала. Ә һуғышып алыр өсөн көс талап ителә. Был көс - армия, йәғни яугирҙар төркөмө була. Шундай ҡурҡытыусы, баҫыусы, иҙеүсе көсөң булмаһа, һине берәү ҙә танымаясаҡ, үҙ еренә индереп, уны бирел бармаясаҡ. Тимәк, беҙҙең ата-бабаларыбыҙҙың ундай көсө-ҡеүәте булған. Шул көс-ҡеүәтте ойоштороусылары, башлыҡтары ла булған. Шунһыҙ беҙ бер нисек тә ун дүрт йыл буйына татар-монгол баҫҡынсыларына ла ҡаршы һуғыша алмаҫ инек.

**Зәкирйән ӘМИНЕВ, этнограф.**

**(Дауамы бар).**

***✓ Ата-әсә килешеүгә бара алмай һәм приставтарға кемдеңдер ҡулынан балаһын тартып алып, икенсеһенә бирергә тура килә. Был бик ауыр ситуация һәм приставтарҙың ошо хәлгә төшмәҫкә тырышҡандарын да беләм.***

# СУД ҠАРАРЫН приставтар

**Редакцияға уҡыусыларыбыҙҙан банк, һалым, штраф түләүҙәре буйынса төрлө һорауҙар күп килә. Ошо юҫыҡтағы һорауҙарҙы ҡәнәғәтләндереү һәм уҡыусыларыбыҙҙың белем кимәлен киңәйтеү маҡсатында Суд приставтары Федераль хеҙмәтенең Башҡортостан Республикаһы буйынса идаралыҡ етәксеһе - Башҡортостан Республикаһының баш суд приставы Илнур Әнүәр улы МӘХМҮТОВ менән һөйләштек.**

**Хоҡуҡ һаҡлау органдары ябай халыҡ өсөн һәр ваҡыт ниндәйҙер аңлайышһыҙ өлкә булды инде ул. Юридик белемебеҙ етмәү беҙҙе йыш ҡына ошо органдар алдында томана итеп ҡалдыра. Шунлыҡтан, әйҙәгеҙ, баштан уҡ суд приставтарының ниндәй орган һәм ниндәй мәнфәғәттәрҙе күҙәтеүен асыҡлап китәйек?**

- Суд приставтары хеҙмәте, иң беренсе сиратта, суд сығарған ҡарарҙарҙы тормошҡа ашырыуҙы тәьмин итә. Унан һуң, суд барышындағы хәүефһеҙлек өсөн дә яуаплы. Суд залына алып киленгән граждандарҙы оҙатып йөрөү, уларҙың судҡа килеүен талап итеү, суд залындағы тәртипте күҙәтеү хеҙмәтен дә үтәй. Был тәңгәлдә суд приставтарының закон боҙған граждандарҙы мәжбүр итә, көс ҡуллана торған хоҡуғы ла бар. Суд приставтары суд ҡарарын үтәмәүселәргә ҡарата тәүтикшереү, тәфтишселек функцияһын да үтәй. 2017 йылдан алып беҙгә тағы ла бер функция өҫтәлде. Беҙ хәҙер коллектор хеҙмәттәре өҫтөнән дә күҙәтеү алып барабыҙ. Әгәр коллектор граждандың хоҡуғын боҙа, уны ирекһеҙләй, янауҙар менән ҡурҡыта йәки уға ҡарата ниндәйҙер көс ҡуллана икән, граждандар беҙгә мөрәжәғәт итә ала һәм суд приставтары коллекторға ҡаршы енәйәт эше ҡуҙғата.

**Әйткәндәй, әллә күпме халыҡты үҙ тоҙағында тотҡан коллекторҙар баш-баштаҡлығын нисек сикләргә була?**

- Рәсәй Федерацияһында коллекторҙар хеҙмәте элек легаль рәүештә булманы. Уларҙы шәхси банктар булдырҙы ла инде. Һәм был контораларҙың граждандарға ҡарата мөғәмәләһе лә бер кем тарафынан сикләнмәне, күҙәтелмәне. Халыҡ араһында ишеткәнегеҙ ҙә булғандыр, коллекторҙар банктарға бурысы булған граждандарҙың өйөнә, эш урынына ирекле рәүештә килә һәм ғауға ҡуптара, хатта көс ҡулланған осраҡтар ҙа булды. Үҙ хоҡуҡтарын аңлап етмәгәндәр был эштәрҙе банк рөхсәт итә, йәғни закон нигеҙендә башҡарыла икән тип уйлап, сараһыҙ көнгә төштө. Былар, әлбиттә, хоҡуҡ һаҡлау органдарын хәүефкә һалды һәм бына һуңғы йылдарҙа был эштәр менән идаралыҡты күҙәтеү суд приставтары иненә һалынды. Миҫал өсөн алғанда, ағымдағы 8 айҙа ғына ла 70-тән ашыу административ эш ҡаралып, коллектор хеҙмәттәре штраф түләү формаһында яуапҡа тарттырылды. 300-ләп ғариза әлеге көндә тикшереү өҫтөндә. Ошо тәңгәлдә халыҡҡа мөрәжәғәт итер инем. Коллектор хеҙмәттәренең законһыҙ эш итеүе осрағында банкка ла, полицияға ла түгел, ә суд приставтарына ғариза яҙырға кәрәк, сөнки ул вәкәләттәр бөгөн беҙҙең хеҙмәт ҡулында.

**Суд приставы хеҙмәткәрҙәре ябай халыҡ аңында нисектер яуыз образда формалашҡан. Ни өсөн былай, нисек аңлатырһығыҙ?**

- Приставтар хеҙмәте аша республика буйынса бер йыл эсендә яҡынса 1 миллион 700 мең башҡарыу эше үтә. Былтыр, мәҫәлән, 2 миллион 400 мең эште йырып сыҡтыҡ. Бында һалымдар, штрафтар, алимент эштәре һәм башҡаларҙың барыһы ла иҫәпкә алына. Ошоларҙан сығып ҡарағанда, республика халҡының яртыһы тигәндәй приставтар хеҙмәте аша үткән кешеләр булып килеп сыға. Ә беҙҙең эш нимәнән ғибәрәт? Күп осраҡта мөлкәткә ҡағылышлы мәсьәләләрҙә граждандарға сикләүҙәр ҡуябыҙ. Мәҫәлән, йортона, транспортына арест һалына, банк счеттарына "йоҙаҡ" элене. Мөлкәтен тартып алырға ла тура килә. Аңлауығыҙса, беҙҙең хеҙмәттә ниндәйҙер позитив аҙ. Һәм беҙ үҙебеҙҙе был юҫыҡта күрһәтергә лә тырышмайбыҙ. Граждандың эше суд приставтары ҡарамағына килеп юлыҡҡан икән, тимәк, ул йә үҙе хоҡуҡ боҙған, йә уның хоҡуғын үтәмәгәндәр. Был осраҡтарҙың икеһендә лә пристав хеҙмәтенә административ, йәиһә физик көс ҡулланып, закон ягын яҡларға тура килә. Икенсе төрлө булыуы мөмкин түгел. Беҙҙең беренсе бурыс - граждандарҙан бурыстарын үтәтеү. Ҡайһы осраҡтарҙа суд приставтарынан һағайып та тейешлене башҡарып ҡуялар икән - бик мәслихәт. Ә инде эште приставтар ҡатнашлығына алып барып еткереү бик үк күнелле тамамланмаҫҡа ла мөмкин. Беҙ бына ошо ваҡиғаларҙы булдырмау өсөн аңлатыу эштәре алып барабыҙ. Телевизорҙан төрлө арестар мәлен күрһәтеү ҙә ул граждандарға иҫкәртеү булып яңғырарға тейеш. Бында ҡурҡытыу йәки баҫым яһау маҡсат түгел, маҡсат халыҡты законларға ярашлы йәшәргә өндәү һәм өйрәтеү. Статистик мәғлүмәттәрҙе алып ҡараһаҡ, күп граждандарҙың уртаса бурысы 15-20 меңде тәшкил итә. Штрафтары 300-500 һум була. Ошо түләүҙәрен үҙаллы, үҙаңы менән ябып ҡуйыу урынына, приставтарҙы йөрөтөп, ниндәйҙер ҡаты ҡарарҙарға юлығып ҡуялар. Яуаплылыҡ, бары тик яуаплылыҡ етмәй күптәргә. Тимәк, беҙ халыҡты яуаплылыҡҡа ла өйрәтәбеҙ булып сыға. Ә инде приставтарҙың халыҡ аңында ниндәйҙер яуыз образда формалашыуы - ул шул уҡ аңһыҙлыҡ бөләһе тип уйлайым. Суд ҡарарын үтәгән йәки закон боҙмаған берәүгә лә приставтар килмәй, улар ҙа ябай кешеләр, улар ҙа тереклек итеү өсөн үҙ бурысын үтәй.

**Һеҙҙең хеҙмәттә иң ауыры нимә? Приставтар ниндәй эшкә теләкһеҙ бара? Кеше факторы тигән төшөнсәләр йыш күҙәтеләме?**

- Беҙ шундай идеология менән эшләйбеҙ: һәр суд ҡарары - ғәҙеллек, һәр закон - хәҡиҡәт. Суд ҡарары был өлкәләге әллә күпме белгестәрҙең оҙайлы хеҙмәте нигеҙендә сығарылған документ. Шунлыҡтан, ҡарар нисек кенә ҡаты булмаһын, уны үтәтергә бурыслыбыҙ. Эйе, приставтар ҙа хисле, йөрәкле ябай кешеләр, әммә улар суд ҡарары төрлө тикшереүҙәр үтеп, үлсәнеп, өйрәнелеп сығарылған икәнен дә белә. Әгәр беҙ суд өсөн "был дөрөҫмө - дөрөҫ түгелме" тип уйлай, икеләнә башлаһаҡ, әлбиттә, беҙ быны бер ваҡытта ла үтәй алмаясаҡбыҙ. Суд әлеге "кеше факторын" да , башҡа факторҙарҙы ла иҫәпкә алған.



Шулай ҙа үҙеңдән аша үтеп эшләргә дусар булған эштәр ҙә бар. Шундайҙарҙың береһе - балалар яҙмышына ҡағылышлы мәсьәләләр. Ир менән ҡатын айырылыша ла, балаларын бүлешә алмайҙар. Ә бала өсөн атай ҙа, әсәй ҙә ҡәҙерле. Бигерәк тә бәләкәстәр айырылышыуҙарҙы ауыр кисерә. Ата-әсә килешеүгә бара алмай һәм приставтарға кемдеңдер ҡулынан балаһын тартып алып, икенсеһенә бирергә тура килә. Был бик ауыр ситуация һәм приставтарҙың ошо хәлгә төшмәҫкә, был бурысты үтәүсе булмаҫҡа тырышҡандарын да беләм. Үҙем рядовой пристав булып эшләгән мәлдәге хәлдәрҙән сығып та әйтә алам: кемдәндер миллион тартып алыуға ҡарағанда, ҡулынан балаһын йолҡоп алып китеү күпкә ауырыраҡ.

**Иң күп эштәр алименттар буйынсалыр беҙҙә, шулай бит?**

- Юҡ, яңылышаһығыҙ. Әлбиттә, алимент эштәре лә күп, әммә улар беренсе урында түгел. Һәм, әйткәндәй, һуңғы йылдарҙа алименттарға ҡарата закондарҙың ҡатылана барыуына ярашлы, бындай эштәр кәмеүгә китте. Йылына 1,5-2 меңгә кәмей хатта. Мәҫәлән, 2016 йылдың ғинуарында республикала алимент түләмәүселәргә ҡаршы 23 мең башҡарыу эше ҡаралһа, быйылғы йылдың август айына 19 мең башҡарыу эше килгән. Айырылышыуҙар һаны кәмемәһә лә, кешеләрҙең үҙ-ара килешеү, аңлашыу кеүек цивилизациялы мөнәсәбәттәр ҡора белеүгә ынтылышы арталыр, тип уйлайым был күрһәткестәр һөҙөмтәһендә. Һәм, әйткәнемсә, тәртиптәр ҙә ҡатыланды. Ике ай алиментын түләмәгән гражданин башта административ яуаплылыҡҡа тарттырыла. Административ яуаплылыҡ - ул 15 тәүлеккә ябып ҡуйыу ҙа булырға мөмкин. Бөгөнгө көндә республика буйынса ике меңгә яҡын кеше был язаны үтәү өҫтөндә. Уйлап ҡарағыҙ, 15 көн бикле ултырыу ваҡытында эште юғалтырға ла, башҡа нәмәләрҙән ҡолаҡ ҡағырға ла мөмкин. Йәғни, бик етди эҙемтәләр алып килә торған яза был, тип әйтмәксемен.

Унан транспорт йөрөтөү хоҡуғын сикләү, сит илдәргә сығармау кеүек язалар ҙа ҡаралған. Ун меңлек бурысы йыйылған икән, ул кеше шәхси транспорт менән ҡуллана алмай. Административ яуаплылыҡҡа тарттырылып та, һаман эшкә урынлашмайһығыҙ, бурыстарығыҙҙы ҡайтармайһығыҙ икән, енәйәт эше ҡуҙғатыла. Аҡылы булғандар эште был хәлгә алып барып еткермәй. Бөгөнгө көндә 500-ләп гражданға бындай енәйәт эше асылған һәм был республика өсөн ҙур һан түгел.

Ҡыҙыҡ өсөн миҫалға килтереп китәйем: ҡайһы бер республикаларҙа алимент эштәре бөтөнләй юҡ һәм был тәңгәлдә закондар ҙа сығарылмаған. Төньяҡ Кавказда, Ингушетия, Дағстан, Чечняла балаһын тәьмин итеү ир-егеттең беренсе бурысы итеп ҡуйылған һәм унан баш тартыу - ул ирлек намыҫынан баш тартыу кимәленә ҡуйылған. Был нимәнән килә? Тәрбиәнән, әлбиттә! Ир баланың ғаиләлә алған тәрбиәһенән, намыҫ, яуаплылыҡ кеүек төшөнсәләрҙең баһаһы ҙур булыуҙан, ир-егеттең үҙ бурыстарына тоғро булыуынан.

Бына мин үҙем ир кеше, атай кеше булараҡ, баланы тәьмин итеү бурысын тулыһынса ирҙәр инендә булырға тейеш тип иҫәпләйем. Бит алимент түләй алмаусыларҙың 15-20 проценты ғына теләгән хәлдә лә түләй алмаҫлыҡ торошта. Ҡалғандары түләрлектәр, бары тик теләктәре генә юҡ.

Алиментын түләй алмаусылар башлыса эскелеккә бирелгән йәки эшһеҙ ҡалыусы ир-егеттәр. Был тәңгәлдә иһә берәй төрлө хөкүмәт программаһы кәрәктер, тип уйлайым. Уларҙы дауалап, психологик ярҙам күрһәтеп, эшкә урынлаштырып, түләй алмаған айҙарында ниндәйҙер фондтан түләп тороп, йәғни улар елкәһенә бурыс йыймайынса, аяҡҡа баҫтырыу. Сөнки бурысы йыйылып, мөлкәте тартып алынып ҡуйылған кешегә күтәрелеп китеүе еңелдән түгел һәм күптәр быны йырып сыға ла алмай. Саҡ ҡына этәргес көс булғанда, дәрт-дарман биргәндә, унан балаларына ла файҙа булыр ине, шәхес булараҡ та юҡҡа сыҡмаҫ ине.

**Алимент көтөүсе ҡатын-ҡыҙҙы аңлайым мин. Балаларҙы бит көн һайын ашатырға кәрәк, уларҙың кейеме, уҡыу кәрәк-яраҡы өсөн башҡа сығымдары ла бихисап. Балаларының ата-**

**✓ *Беҙҙә халыҡ кредитты кәрәк әйбергә тип түгел, ә алдан алған кредитын түләргә тип ала. Һәм ил буйынса асылған ҙур процентлы микрофинанс учреждениелары бәләкәй эш хаҡына тереклек иткәндәрҙе бурысҡа батыра ла инде.***

# ҮТӘГӘНДӘРГӘ... КИЛМӘЙ

**ны түләй алмаған осраҡта, ул барыһын да бер үҙе күтәрергә тейеш. Ошондай хәлдәрҙе яйлау өсөн алимент фонды булырға тейеш. Күп кенә алға киткән илдәрҙә был фонд бар. Ни сәбәп менәндер алиментын түләй алмаған граждандар, алимент ала алмаған әсәләр был фондҡа мөрәжәғәт итеп ярҙам ала.** Түләүҙәре ваҡытында үтәлгәс, кешеләр араһында низағтар ҙа аҙыраҡ була, әсәләр ыҙаламай һәм бурыстар ҙа йыйылмай. Кешеләр мәнфәғәтен ҡайғырта торған бик файҙалы проект был. Был механизм беҙҙә лә эшләп китһә, күп проблемалар хәл ителер, әллә күпме кире күренештәр юҡҡа сығыр ине.

**▸ Улай булғас, ниндәй башҡарыу эштәре беренсе урынды биләй инде?**

- Иң күбе - түләнмәгән штрафтар. Бигерәк тә юл ҡағиҙәләренә ҡағылышлы эштәр. Мәҫәлән, 500 һумлыҡ штрафты, ҙур түләү түгел әле тип, ваҡытында түләмәйҙәр. Ә инде эш беҙҙең ҡулға килеп эләкһә, беҙ граждананан шул 500 һумды түләтәбеҙ, административ кодексҡа ярашлы рәүештә был сумма тағы ла ҡабатлана, йәғни мең тәңкә килеп сыға. Унан башҡа "башҡарыу йыйымы" (исполнительный сбор) тип аталған штраф һалына. Бына шулай 500 һум 2 мең ярым һумға барып баҫа. Ошо хәлдәрҙе булдырмау өсөн юл ҡағиҙәләре хеҙмәткәрҙәре менән берлектә "Юл приставы", "Бурыслы" тигән операциялар үткәреп, аңлатыу эштәре алып барабыҙ. Юлдарға фотофиксация, камералар ҡуйыла. Быйыл ғына ла баш ҡала буйынса тағы ла йөҙгә яҡын камера ҡуйыласаҡ. 2020 йылға тиклем бөтә федераль трассаларҙа 600-ләп камера өҫтәлә. Әгәр бөтә ошо камералар эше беҙҙең өҫкә килеп төшһә, был ҡот осҡос һан буласаҡ. Быны булдырмау өсөн алдан тырышырға тура килә.

Тамсынан күл йыйыла, тигәндәй, бәләкәй бурыстар олоһон һаяй. Әле ярты йыл эсендә 3 миллиард һумға яҡын бурыс ҡайтарҙыҡ дәүләткә. Унан башҡа тағы 2 миллиарды - түләнмәгән кредиттар. Банк кредиттары, микро кредиттар, ипотека кредиттары буйынса 1 июлгә республикала 243 мең бурысын түләй алмаған кеше иҫәпләнде. Рәсәй буйынса беҙ был тәңгәлдә икенсе урында торабыҙ һәм хәл ысынлап та көсөргәнешле. Ниміһе ҡурҡыныс: беҙҙә халыҡ кредитты кәрәк әйбергә тип түгел, ә алдан алған кредитын түләргә тип ала. Һәм ил буйынса асылған ҙур процентлы микрофинанс учреждениелары бәләкәй эш хаҡына тереклек иткәндәрҙе бурысҡа батыра ла инде. Кредит кәрәк булған осраҡта бары тик дәрәжәле банктарға ғына барырға кәрәк, ә инде был банк һеҙҙең һорауҙы кире ҡаға икән, тимәк, был ваҡытта һеҙгә был юл хәүефле генә. Банк һеҙҙең дошман түгел, ул һеҙҙең мөмкинлектәрегеҙҙе реаль баһалай һәм дөрөҫ булып сыға ла. Банк һеҙҙе бурысҡа батырып, йортоғоҙҙо тартып алырға тигән маҡсат ҡуймай, ә ваҡ финанс учреждениелары шуны там итә лә.

**▸ Халыҡ законтарҙы беләме? Бармы уларҙа хоҡуҡ белеүгә ынтылыш, өйрәнергә, аңларға тырышыу?**

- Әлбиттә, бөгөн интернет заманы, кәрәк нәмәне ҡарап-белеү, бик булмаһа, юристарға мөрәжәғәт итеү бар. Күберәген ҡалала инде. Ә районлдарҙа беҙ һуңғы ике йыл эсендә халыҡты йыйып, аңлатыу эштәре алып барабыҙ. Райондарҙағы хеҙмәткәрҙәребеҙ коллективтар, студенттар, уҡыусылар алдында сығыш яһап, нисек итеп приставтар хеҙмәтенә юлыҡмайынса законға ярашлы йәшәү тәртиптәрен өйрәтә. Быңдай осрашыуҙарға үҙем дә йөрөйөм, һынап ҡарағаным бар, тере аралашыуҙа халыҡтың һорауҙары, белергә теләгәне күп. Ошо айҡанлы егерме процент тирәһе халыҡты беҙ хоҡуҡ сиктәрендә белемле иттек тип иҫәпләйем. Был тәңгәлдә хоҡуҡ һаҡлау өлкәһендәге башҡа чиновниктарҙы ла йәлеп иткәндә, ыңғай күрһәткестәр оҙаҡ көттөрмәҫ ине, тип ышанам. Мәҫәлән, торлаҡ хеҙмәтләндереүенә түләмәгән өсөн ниндәй әҙемтәләр булырға мөмкин, ниндәй штрафтар һәм язалар ҡаралған? Түләй алмаған осраҡта ҡайҙа мөрәжәғәт итергә һәм башҡалар. Ошондай мәсьәләләрҙе белгәндәр бурыстарға ла юл ҡуймаҫҡа тырышыр ине. Шул уҡ микрофинанс учреждениеларының судҡа биреүен дә тикшертеп, түләүҙәрен иҫбатлап була. Мөлкәтен тартып алырға килгәндә квитанцияларын сығарып күрһәтеп торғандар бар. Хоҡуҡтарын белмәү сәбәпле, бурыслы булып ултыралар. Асылда, беҙҙең халыҡ законтарҙы ихтирам итә ул, бары уларҙың тәфсиленләнешен генә аңлап етмәй.

**▸ Суд приставы ниндәй осраҡта көс ҡуллана ала?**

- Суд приставында ике функция бар, береһе - суд ҡарарын тормошҡа ашырыу, икенсеһе - тормошҡа ашырыусыны яҡлау. Мәҫәлән, суд ҡарарын тормошҡа ашырырға килгән приставтарҙы йортҡа индермәйҙәр, мөлкәтен бирмәйҙәр икән, ул ишекте емереп аса, тартып ала, һуғышыусының ҡулына бығау кейҙерә ала. Айырым граждандарға ҡаршы эштәрҙә беҙ сама белеп, мәҙәни сиктәрҙә, бәрелешһеҙ хәл итергә тырышабыҙ. Ә инде хәрби һаҡ кеүек учреждениеларға ҡатыраҡ тотонабыҙ. Ситуацияға ҡарап, физик көс тә, ҡорал да ҡулланылырға мөмкин. Нисек булғанда ла, ниндәй хәлдә лә суд ҡарары үтәлә.

**▸ Ни өсөн тап ошо хеҙмәтте һайланығыҙ? Хоҡуҡ һаҡлау өлкәһенең иң ауыр һәм яуаплы өлөшө был, миненсә.**

- Башҡорт дәүләт университетының Стәрлетамаҡ филиалында юридик белем алып сыҡтым. Хыялым судтарҙа кеше хоҡуғын яҡлаусы, ярҙам итеүсе, төплө матур сығыштар яһаусы адвокат булыу ине... Былар, моғайын, һәр йәш юристың уйында булалыр. Әммә тора-бара шуны аңланым, яҡшы адвокат булыу өсөн иң башта хоҡуҡ һаҡлау структураларында эшләп, тәжрибә тупларға кәрәк икән. Был өлкәнең бөтөн эске ваҡ операцияларын, аҫҡы ағымын аңламай тороп, ҙур эштәрен башҡарып булмай. Тәфтишсегә лә, прокуратура белгесенә лә әҙерлек талап ителә. Һәм, бәхеткә күрәлерме инде, шул йылдарҙа яңы хеҙмәт - суд приставы хеҙмәте барлыҡҡа килеп, мин шунда эшкә килдем. Башта, әлбиттә, алда әйткән хеҙмәттәргә күтәрелеүгә тәжрибә туплармын, тип уйлағайным. Ә инде йылдар үтеү менән башҡа бөтөн хоҡуҡ һаҡлау структураларының да эше тап беҙҙең пристав хеҙмәте нигеҙендә тороуын төшөндөм. Әгәр приставтар яҡшы һәм сифатлы башҡармай икән үҙ бурысын, судтың да, прокуратураның да, полиция хеҙмәтенең дә эштәре елгә осасаҡ. Мәҫәлән, полиция енәйәтсене эҙләп табып, прокуратура, суд уға ҡарар сығарып, приставтар шул ҡарарҙы үтәтмәй икән, йәмғиәттә тәртип тә булмаясаҡ. Бына ошоларҙы һынап-һынап ҡараным да, пристав хеҙмәтендә ҡалырға ҡарар иттем.

**▸ Суд приставтары булып хоҡуҡ һаҡлау өлкәһенә килгән йәштәр ниндәй мәктәп үтә? Һәм һеҙҙә эшкә ҡалғандар ниндәйҙәр улар?**

- Йәштәр, ғәҙәттә, бөтә өлкәгә лә тәжрибәһеҙ килә. Ә инде беҙҙең өлкәлә бер генә йыл эшләп китһәләр ҙә, уларҙың донъяны ҡабул итеүе, тормошҡа ҡарашы үҙгәрә. Әҙәм балаһына хас булған ниндәй генә хәлдәрҙе күрепбелмәй ҙә, йәшәйештең ниндәй генә мәсьәләләренең шаһиты булмай улар! Күп нәмәне аңларға, ҡабул итергә, төшөнөргә өйрәнәләр. Күҙ ҡараштары, андары ғына түгел, үҙҙәрен тотоштары ла үҙгәрә. Был өлгөрөү, етлегеү процесын күп йәш коллегаларымда күҙәткәнем бар. Йәмғиәттең ысын яғы, артыҡ матур булмаған, йәмле булмаған яғы менән танышып, үҙ позицияларын булдырып, һығымталар яһап, шәхес булараҡ формалашалар улар. Әлбиттә, яндарында һәр ваҡыт ярҙамға килеүсе тәжрибәле коллегалары, остаздары, етәкселәре лә була. Ә инде беҙҙә эштә ҡалыусылар шул мәктәпте үтә алғандарҙың иң сыҙамлы һәм ныҡтары ғына.

**Миләүшә ҠАҺАРМАНОВА әңгәмәләште.**

---

**ТЕМАНЫ ДАУАМ ИТЕП...**

# ДӨРӨҪМӨ...
## баланы ҡырҡ ерҙән тыйыу?

**(Башы 6-сы биттә).**

**Баланы тыйып тәрбиәләү алымына ҡарата мөнәсәбәтегеҙ нисек? Ошо һорау менән бер нисә кешегә мөрәжәғәт иттек:**

***Гөлниса ҒӘЛИМОВА, ике бала әсәһе:*** Бала нимә эшләргә ярай, нимә ярамай икәнлеген бәләкәй генә сағынан уҡ белеп үҫергә тейеш, тигән фекерҙәмен. Баланың характеры өс йәшкә тиклем үк формалаша. Шунлыҡтан, баланы сабый сағынан уҡ тыйып тәрбиәләү мөһим. Мин балаларымды, мәҫәлән, бик кес кенә саҡтан уҡ ихатала уйнауҙан тыйҙым. Сөнки ҡала ерендә баланы урам тәрбиәһе йоғонтоһонда ҡалдырыу ни тиклем емергес көскә эйә икәнен мин белә инем. Улар һәр ваҡыт минең күҙ уңымда булды. Шуғалырмы, балаларым күҙ ҡарашымдан уҡ минең нимәнелер хуплау-хупламауымды тойоп, ни әйтергә теләүемде белеп торҙо. Тыйыу тигән нәмә ата-әсәнең һүҙендә генә түгел, күҙ ҡарашында ла булырға тейеш. Тәрбиәнең иң юғары нөктәһе булған был күренеш һуңынан ғәҙәткә инеп китә, хатта балаға нимәнендер тыйыл тип әйтеү ҙә кәрәкмәй. Мин үҙем дә әсәйемдең күҙ ҡарашынан тыйылып үҫтем.

***Миләүшә ҒАЙСИНА, студент:*** Ҡаты тыйыуға ҡырҡа ҡаршымын. Сөнки бала баҫыла һәм үҫә килә үҙенең теләгенә өлгәшә алмай, ата-әсәһенең ҡушҡанын ғына үтәүсегә әйләнә. Ә бына урыҫтарҙа, йәһүдтәрҙә ундай күренеш юҡ: улар бармаҡ башындай балаларының да һүҙенә ҡолаҡ һалып, уларҙы оло кеше, шәхес итеп ҡарай. Шунлыҡтан, бала үҙен тыйыу тота һәм юғары маҡсаттарға ирешеү мөмкинлектәре күберәк була. Ғөмүмән, балаға шәхес итеп ҡарау кәрәк. Әгәр ҙә мине тыймаһалар, мин күп нәмәләргә өлгәшер инем, тип уйлайым. Үҙемдә юғары потенциал булғанын һәр ваҡыт тойҙом. Әммә тыйылған балала үҙ-үҙенә ышанмау кеүек комплекстар тыуа.

***Гөлсинә КИРӘЕВА, мәҙәниәт хеҙмәткәре:*** Мине әсәй-атайым бер ҡасан да бер нәмәнән дә тыйманы. Бишенсе синыфта уҡ апайҙарыма эйәреп, клубҡа сығып йөрөнөм. Әсәйем сығарып ебәргәндә "Матур йөрөгөҙ" тип кенә әйтә ине. Студент мәлдәрендә лә тыйыу тигән нәмә булманы. Мин нимә теләйем, шуны һайлайым, тип иҫәпләй әсәйем. Әсәйемдең миңә ҡарата шундай мөнәсәбәте үҙ-үҙемә яуаплылыҡты арттырҙы. Уның ышанысына яуап биреү өсөн, әлбиттә, мин хәҙер үҙ-үҙемде күп нәмәләрҙән тыйырға тырышам.

***Әлфис ҒӘЛИМУЛЛИН, юрист:*** Кешелек йәмғиәте булған ерҙә тыйыу һәр ваҡыт буласаҡ. Баланы тыймаһаң, тәртипһеҙлектәр буласаҡ, тигән фекер бар. Тыйыуға барып еткән баланың ата-әсәһе кем һуң? Кеше менән идара итеү өсөн дә тыйыу алымын ҡулланыу осраҡтары булыуы мөмкин. Ә кешенең тәбиғәте шундай: уны тыялар, ә ул киреһен эшләй - ҡыҙыҡ күреп тә, кирелеге арҡаһында ла. Тәбиғәттән, тимәк, тыйыу кеше өсөн хас түгел.

Ата-әсә үҙенең балаһын ни өсөн тыя? Улар быға хоҡуғы бар, тип уйлай. Йәнә улар балаһының киләсәге өсөн ҡурҡа. Әгәр ошо ҡурҡыу тойғоһо булмаһа, тыйыу ҙа булмаҫ ине. Ҡасандыр ныҡ тыйылған кеше һуңынан икеләтә арттырып киләһе быуынды тыя. Тыйыуҙы иректе сикләү, тип аңларға мөмкин. Ә беҙҙә тыйыу баланы киләсәктә бәхетле, тәртипле итә, тигән яңылыш фекер йөрөй. Тәртип иһә үҙе үк ҡанун, ҡалыпҡа һалыусы. Бала тыйылмаған хәлдә лә яҡшыяманды айыра белә. Иң мөһиме - ирекле булһын. Балаға һөйөүҙән башҡа бер ни ҙә биреп булмай. Ата-әсә балаһын ни тиклем ярата, шул тиклем әҙерәк тыялар һымаҡ. Баланы тыйыу биләүҙәргә төрөп, сәңгелдәккә һалғанда уҡ башлана. Балаларға йомшағыраҡ булығыҙ - ул ирекле, бәхетле булып үҫһен. Әммә мин көндәлек тыйыуҙарға ҡаршы түгелмен: мәҫәлән, бысраҡ йөрөмә, шырпы менән уйнама һ.б. Ләкин әхлаҡи тыйыу кеше күңеленә һорауһыҙ үтеп инеү менән бер ул.

**ШУЛАЙ ИТЕП...**
**Тыйыу алымы - тәрбиә өлкәһендәге иң сетерекле һәм үҙенсәлекле күренеш. Белгестәр фекеренсә, иң мөһиме - баланың шәхесен таныу, уның рухын ихтирам итеү, күңелен уйлау. Йәнә шул: тәрбиәле ата-әсә үҙенең миҫалында ла аҡыллы, тәртипле бала үҫтерә ала. Ә шулай ҙа, был тәрбиә алымы тураһында һеҙ нисек уйлайһығыҙ, хөрмәтле ата-әсәләр? Яуаптар көтәбеҙ.**

✓ **Бәрәңге янында йөрөгән Алманан бәрәңге есе сыға башлар, тип ҡурҡаһығыҙмы әллә? Икенсе икмәк изгелек, татыулыҡ, таҙалыҡ ҡына өләшә. Ҡояш апайҙың ерҙәге алмаһы бит ул.**





Сәрүәр СУРИНА

# КҮК АЛМАҺЫ МЕНӘН ЕР АЛМАҺЫ

**(Мәктәп сәхнәһе өсөн көҙгө әкиәт)**
**Бер күренештә**

**Ҡатнашалар:**
**Алма - матурлыҡ алиһәһе кейемендә**
**Бәрәңге - культурист костюмында**
**Кишер - муйынына витамин тоҡсайҙары аҫып алған**
**Помидор - косметикаға батҡан**
**Башаҡ - һары мыйыҡлы франт**

*Баҡса. Алмағас ботағында Алма бәүелә.*

**АЛМА:** *Мин - Алма, мин - Алма,*
*Һин мине күрмәй ҡалма.*
*Күктә - ҡояш, ерҙә - мин,*
*Донъяла юҡ беҙгә тиң!*

*Башаҡ инә.*

**БАШАҠ:** Эй Алма, Алмаҡай! Ҡайһылай матурһың!
**АЛМА:** Ҡояш апай ҙа шулай ти.
**БАШАҠ:** Ҡояш бөтәбеҙҙе лә уңыш байрамына йыя. Мин - саҡырыусы.
**АЛМА:** Кем ул һин?
**БАШАҠ:** Мине белмәгәндәр ҙә бар икән. Башаҡ - ул мин, Алтын башаҡ.
**АЛМА:** Мыйыҡтарың шәп!
**БАШАҠ:** Әйҙә байрамға!
**АЛМА:** Ҡояш апай үҙе килеп саҡырһын.
**БАШАҠ:** Ваҡыты булмаҫ.
**АЛМА:** Минең өсөн табыр!
**БАШАҠ:** Бер нәмә лә аңламайым... *(Сыға).*
**АЛМА:** *Мин - Алма, мин - Алма,*
*Һин мине күрмәй ҡалма.*
*Күктә - ҡояш, ерҙә - мин,*
*Донъяла юҡ беҙгә тиң!*
Бәлки, мин Ҡояштан да матурыраҡтыр.

*Бәрәңге инә.*

**БӘРӘҢГЕ:** Ҡайһылай рәхәт икән ер йөҙөндә.
*Бер, ике, өс!*
*Ерҙән алдым көс!*
**АЛМА:** Эй һин, көс эйәһе!
**БӘРӘҢГЕ:** Ә-ә... Һаумы? Мин Бәрәңге булам.
**АЛМА:** Бә-бә-бәрәңге? Ха-ха!
**БӘРӘҢГЕ:** Минең икенсе исемем дә бар - Картуф йәки Кәртүк, тиҙәр.
**АЛМА:** Кәртүк? Ү-һу-һу!
**БӘРӘҢГЕ:** Көлһәң, көлә бир... Мине ҡайһы бер яҡта Бүлбе тип әйтәләр.
**АЛМА:** Бүлбе? Бүл-бүл-бүл! Ха-ха.
**БӘРӘҢГЕ:** Белгең килһә, мине ҡайсаҡ Ер алмаһы, тип маҡтайҙар.
**АЛМА:** Нимә? Тағы ниндәй алма? Минең исемемә ҡағылма. Алма - мин! Күк алмаһы! Иң матур, иң нурлы, иң татлы алма - мин! Тәүҙә битеңде йыу, балсыҡҡа буялып бөткәнһең. Ҡарамороң!
**БӘРӘҢГЕ:** Нинә рәнйетәһең? Һинә ни зыяным тейҙе? Мине бөтә ерҙә яраталар, ер аҫтынан сыҡҡанымды көтөп алалар. Ә һин... *(Илап, китә).*
**АЛМА:** Мин булғанда һине яратып тормаҫтар инде.

*Кишер инә.*

**КИШЕР:** Бәрәңге дуҫтың тауышы сыҡты. Ҡайҙа үҙе?
**АЛМА:** Быныһы ниндәй ерән таяҡ?
**КИШЕР:** Таяҡ түгел, Кишер: Алтын ҡаҙыҡ. Витамин һандығы буламын.
**АЛМА:** Минеңсә, һин - ерән томшоҡ!
**КИШЕР:** Ә һин, ә һин... ҡыуыҡ! Көлә бир әле, хәҙер шартлайһың. Эй, һинең менән ваҡыт уҙғарғансы... *(Сыға).*
**АЛМА:** Минең матурлығымды күргән юҡ, үҙҙәре генә әллә кем.
*Мин - Алма, мин - Алма,*
*Һин мине күрмәй ҡалма...*
*Ҡояш тик минә ҡарай,*
*Елдәр тик минә йырлай.*

*Помидор инә.*

**ПОМИДОР:** Сәләм, сәләм, Алмаҡай!
**АЛМА:** Быныһы йүнлерәк күренә. Сәләм! Кем һин?
**ПОМИДОР:** Помидор.
**АЛМА:** Пом-пом!..
**ПОМИДОР:** Оҡшамаһа, томат, тип әйт.
**АЛМА:** Томаты - ярарлыҡ. Үҙең дә, башҡаларға ҡарағанда, арыуыраҡ.
**ПОМИДОР:** Уңыш байрамында һылыуҙар конкурсында ҡатнашырмын әле.

**АЛМА:** Беренсе матур кем икәнен күрәһеңдәр ул?
**ПОМИДОР** *(үҙ алдына)*: Ҡайҙа инде минә һинең менән ярышыу! Уф, нишләргә? Шулай ҙа һин, моғайын, еңеүсе була алмаҫың.
**АЛМА:** Нинә?
**ПОМИДОР:** Беренсе матур әйләнеп-әйләнеп, һикереп-һикереп бейергә тейеш икән.
**АЛМА:** Һоп-һоп! Ошолай бейер иң матур, ошолай ырғыр иң нурлы, ошолай әйләнер иң татлы! *(һикерә, ергә йығылып төшә).* Ай! Харап булдым! Ҡотҡарығыҙ! Ҡояш апай! Миңә һалҡын, мин ҡурҡам! Ҡотҡар!
**ПОМИДОР:** Хәҙер минең йырымды тыңла:
*Һин дә матур үҙенә,*
*Мин дә матур үҙемә,*
*Һаҫыған йомортҡа кеүек*
*Күренәһең күҙемә! Ха-ха!*
**АЛМА:** Ах, ҡуҙғала алмайым.
**ПОМИДОР:** Бик һәйбәт. Хәҙер иң матуры булып мин ҡалдым! Мин, мин! *(Сыға).*
**АЛМА:** Кем ҡотҡарыр мине?..

*Кишер инә.*

**КИШЕР:** Байрамда иң витаминлылар конкурсында мин еңеүсе булырға тейеш. Приз - минеке буласаҡ.
**АЛМА:** Ярҙам ит, бөтә витаминдарымды һиңә бирәм.
**КИШЕР:** Ә-ә, Алма? Нишләп ятаһың бында?
**АЛМА:** Йығылып төштөм. Ҡотҡар мине!
**КИШЕР:** Ә кем ерән томшоҡ?
**АЛМА:** Гәфү ит! Сығар мине ҡояш яҡтыһына.
**КИШЕР:** Витаминдарыңды бирһәң...
**АЛМА:** Бирермен. Алырһың.

**КИШЕР:** Тәүҙә бир! *(Алма уға витаминдарын бирә).* Ҡана, сығарһам, сығарайым.
**АЛМА:** Байрамға мине алып бар инде. Унда Ҡояш апай буласаҡ, мине ул ғына терелтә ала, ул ғына шәфҡәтсәк.
**КИШЕР:** О-о, мин - иң бай, иң бай... Көс еткеләҙ.
*О-о, миндә витамин...*
*О-о, иң файҙалы - мин!*
*О-о, иң кәрәкле - мин!*
*О-о, еңеүсе лә - мин!*
**АЛМА:** Тукта, мине ҡалдырма. Икәү барайыҡ.

**КИШЕР:** Гәфү ит, ашығам. Эштәрем бик күп. Витаминдарымды барларға кәрәк. *(Сыға).*
**АЛМА:** Нишләргә? Байрамға нисек барып етергә? Сеү, тағы кемдер килә? *(Боҫа).*

*Башаҡ менән Бәрәңге инә.*

**БАШАҠ:** Нинә бер ҙә кәйефең юҡ, Бәрәңге?
**БӘРӘҢГЕ:** Күпме көттөм уңыш байрамын. Ә күңелем китек. Ауыр һүҙҙәр менән рәнйеттеләр мине, Башаҡ дуҫ. Әле генә, ҡараморон, тип битемде йыртттылар, уф!..
**БАШАҠ:** Әй, башыңды юғары тот! Быйыл бигерәк уңдың. Икенсе икмәк, тигән маҡтаулы исем алдың. Ҡотлайым.
**БӘРӘҢГЕ:** Эйе шул, ниндәй ҙурлаңылар мине. Рәхмәт, Башаҡ дуҫ! Һин - Беренсе икмәк. Гел шулай булғанһың, буласаҡһың. Һиңә лә уңыштар теләйем.
**БАШАҠ:** Рәхмәт, рәхмәт!

*Кишер, Помидор инә.*

**ПОМИДОР:** Киттек, тиҙерәк байрамды башлайыҡ.
**КИШЕР:** Ашыктырма, юғиһә витаминдарым ҡойола. Ҡара, нисек ташып тора улар миндә.
**ПОМИДОР:** Ә минең кеүек матур был тирәлә юҡ! Иң йоморо, иң һутлы, иң матур ҙа иң татлы! Йә, әйтеп ҡара, кем ул? Алдыңда торам - мин ул!
**БАШАҠ:** Тыйылып тор бер аҙға. Башаҡ ағайың барҙа... *(Йырлап ебәрә).*
*Үҫтем мин - Алтын башаҡ,*
*Йыйығыҙ ҡосаҡ-ҡосаҡ!*
*Ерҙә бөтә тереклек*
*Мин булғанға икмәкле!*
*(Кишергә).*
*Ул - беҙҙең Алтын ҡаҙыҡ.*
*Алһалар тартып, ҡаҙып,*
*Ҙур хазина табырҙар,*
*Витаминга туйырҙар.*
*(Помидорға).*
*Ҡояш кеүек түңәрәк,*
*Уны һөймәгән һирәк.*
*Исемдәре - Помидор,*
*Ашарға йәл, ҡарап тор!*
*(Бәрәңгегә).*
*Их, бәрәңге, их, картуф!*
*Ҡарап тороуҙары - уф!*
*Йомро ғына аҡ тәнле,*
*Ашап туйғыһыҙ тәмле!*
*Ер алмаһы, тиҙәр уны,*
*Бүлбе, тип тә әйтәләр.*
*Кәртүк, тип тә яраталар,*
*Картуф тип тә йөр(ө)тәләр.*
*Американан килһә лә,*
*Үҙ иткән беҙҙең яҡты.*
*Икенсе башаҡ, тип ҙурлай*
*Уны бөтә ил халҡы.*
Йә, күңелегеҙ булдымы? Уңыш байрамына барабыҙ! Бөтәбеҙ бергә!
*Ҡояш - беҙҙең атабыҙ.*
*Тупраҡ - беҙҙең әсәбеҙ.*
*Бер, ике, өс! Алға, марш!*
*Ҡаршылай беҙҙе Ҡояш!*

*Башаҡ артынан Кишер, Помидор сыға. Бәрәңге арттараҡ ҡала.*

**АЛМА** *(күренә)*: Бәр... Бәрәңге!
**БӘРӘҢГЕ** *(кире килә)*: Кем мине саҡыра?
**АЛМА:** Ҡотҡар мине, Бәрәңге, байрамға алып бар! Зинһар, ташлап китмә... Һин генә мине аңларһың...
**БӘРӘҢГЕ:** Илама, Алмаҡай, илама, һылыуҡай! Һиңә илау түгел, йырлау ғына килешә. Тынысла! Мин һине күтәреп булһа ла алып барырмын.
**АЛМА:** Гәфү ит мине, Ер алмаһы - туғанҡайым.
**БӘРӘҢГЕ:** Рәхмәт йылы һүҙеңә, Күк алмаһы.

*Һөйрәлешеп Помидор менән Кишер инә. Уларға Башаҡ эйәргән.*

**БАШАҠ:** Нинә кире боролдоғоҙ?
**КИШЕР:** Ҡайҙа теге Алма? Ал, кире ал витаминдарыңды! Улар артыҡ, мин ауырыйым, мин һулыйым! *(Йығыла).*
**БАШАҠ** *(Кишерҙе ҡарай)*: Ҡомһоҙлоҡ сире тейгән.
**ПОМИДОР:** Ә мин... мин саҡ-саҡ торам. Торған ерҙән серейем, тарҡалам. Матурлығым бөттө...
**БАШАҠ** *(ҡарай)*: Һиндә - көнсөллөк сире. Шул һине кимерә.
**КИШЕР:** Ҡайҙа Алма? Гәфү ит мине!
**ПОМИДОР:** Мине лә кисер, Алмаҡай!
**АЛМА:** Һеҙ мине гәфү итегеҙ, бөтәгеҙ ҙә. Мин дә сирле инем - мин-минлек сиренән көскә ҡотолдом.
**БАШАҠ:** Ваҡытында гәфү үтенеү күп сирҙән, бәләнән ҡотҡара. Киттек, байрамда беҙҙе көтәләр.
**ПОМИДОР:** Беҙ һине күтәреп барырбыҙ, Алмаҡай.
**АЛМА:** Юҡ, мин дуҫым, туғаным Ер алмаһы менән барасаҡмын. Әйҙә, Ер алмаһы, туғанҡайым.
**БӘРӘҢГЕ:** Киттек, Күк алмаһы, һылыуҡайым.
**БАШАҠ:** Бәрәңге янында йөрөгән Алманан бәрәңге есе сыға башлар, тип ҡурҡаһығыҙмы әллә? Икенсе икмәк изгелек, татыулыҡ, таҙалыҡ ҡына өләшә. Ҡояш апайҙың ерҙәге алмаһы бит ул.
**БӨТӘҺЕ:**
*Күк алмаһы, Ер алмаһы -*
*Бары ла Ҡояш балаһы.*
*Бары ла Ер балаһы.*
*Ерҙә, күктә - бар донъяла -*
*Гөрләй уңыш байрамы,*
*Гөрләй уңыш байрамы! (Йырлап сығалар).*
*Тамам.*

*✓ Ҡул балаҫтары, әрмәктәр, урындыҡтарҙағы, һикеләрҙәге тирүгәләр, һандыҡ өҫтөндәге ҡаралты-яҫтыҡтар, йоҡо урындарын бүлгән шаршауҙар ҡабатланмаҫ милли мөхитте булдырып, күҙгә ташланып ҡына тора.*



*АФАРИН!*

# БАШҠОРТСА КИНО ҠАРАЙБЫҘ!



**Ниһайәт, ваҡыт табып, "Һеңлекәш" фильмын барып ҡараныҡ. Мостай Кәримдең әҫәрҙәрен бәләкәйҙән уҡып үҫкәс, был повестың кино версияһы нисегерәк булды икән, тигән ҡыҙыҡһыныу тынғы бирмәне. Етмәһә, афиша фотоһындағы балаларҙың һөйкөмлөлөгө үҙенә саҡырып, тартып торғандай ине. Фильмдың нимә тураһында булыуы һәм нисек барыуын һөйләп тороуҙың кәрәге булмаҫ. Шулай ҙа тап әҫәрҙәгесә генә икән тип тә уйламаһын тамашасы. Кино булараҡ, унда өҫтәмә күренештәр ҙә, "Беҙҙең өйҙөң йәме" менән "Оҙон-оҙаҡ бала саҡ"тың ҡушылып киткән урындары ла бар.**

Дөйөм алғанда, кино оҡшаны. Һәр хәлдә, ҡайһы бер башҡорт фильмдарындағы һымаҡ яһалмалыҡ шаһиты булыуҙан уңайһыҙланыу кисереп ултырылманы. Баштан уҡ үҙ эсенә алып инеп китте лә, көлдөрөп-илатып, аҙағынаса рәхәт тә, ҡыйын да булған көсөргәнештә тотто. Бигерәк тә Йәмилде уйнаған бәләкәс актерҙың ихласлығы, тотоп ҡына тупылдатып һөйөрлөк һөймәлекле һөйәк булыуы арбай. Был баланы һайлап, хәтәр генә лә отҡан ойоштороусылар. Хатта һөйләшкәндә, ҡапыл ҡарағанда, үҙһүҙләнеп, эйәген күтәреп ебәргәндә, аптырап йәки ҡурҡып киткәндә лә ул шундай тәбиғи, балаларса ябай, малайҙарса тупаҫыраҡ. Иптәше Марат та шундай уҡ. Бер ҡатлы, бошмаҫыраҡ, әммә тоғро һәм изгелекле. Уларҙың ҡыланышы, үҙҙәрен тотош-фиғеле "тас башҡортса" тип әйтке килә ошо урында.

Иҫ киткес тәбиғәт кинола. Башҡорт ерҙәренең хозурлығы үҙе бер айырым донъя шикелле булып күренә. Сит тамашасы, сит халыҡтар быны шунда уҡ аңғарыр, моғайын. Башҡорт ауылы, өйҙәре, өй эсендәге йыһаздар ҙа бик яҡын. Ҡул балаҫтары, әрмәктәр, урындыҡтарҙағы, һикеләрҙәге тирүгәләр, һандыҡ өҫтөндәге ҡаралты-яҫтыҡтар, йоҡо урындарын бүлгән шаршауҙар ҡабатланмаҫ милли мөхитте булдырып, күҙгә ташланып ҡына тора. Өләсәй бешергән түңәрәк майғы икмәк был йортта ысын ауыл башҡорттары йәшәгәнлеген һүҙһеҙ дәлилләй. Бөтөн ошо һөйләгәндәрҙе экранда күреү икенсе төрлө тәьҫораттар уята икән ул. Балалар ҙа әленән-әле: "Ҡара, өләсәйҙеке һымаҡ!" - тип тертләп китте. Ошолары менән дә алдырҙы фильм.

Балалар оҫта уйнаны, тип әйткәйнем инде. Балалар ололарға ҡарағанда күпкә яҡшыраҡ, тәбиғирәк уйнаны, тип тә өҫтәйем. Сөнки был ысынлап та шулай булды. Оло актерҙар сәхнә телендәрәк һөйләште, йәғни һүҙен әйтер алдынан уларҙың йөҙөнә, күҙҙәренә бер яһалмалыҡ һынлана ла, шунан ғына сәхнә интонацияһындағы телмәр килеп сыға. Ә балаларҙа ул юҡ. Улар быға өйрәнмәгән әле. Әгәр киноактер булырға теләһәләр, был стилгә бөтөнләй ултырмаһындар ине, тип теләйек. Кино телмәре менән театр телмәре араһында айырма ҙур һәм был, үкенескә күрә, беҙҙең драма актерҙарының уйнауында һиҙелә.

Тағы ла бер нәмә: киноның һөйләш телендә түгел, ә әҙәби телдә, хатта әле һуңғы йылдарҙа барлыҡҡа килгән ниндәйҙер яһалма әҙәби телдә булыуы ла аңғарылды. Балаларға хас булмағанса ауыр һөйләмдәр әйтеп ҡуя бәләкәс актерҙар. Боронғо (бөгөнгө өсөн боронғо инде) башҡорт ауылындағы балаларҙың улай һөйләшмәгәне көн кеүек асыҡ, әлбиттә. Бигерәк тә рус ҡыҙының ошо фильмда уйнау өсөн тырышып-тырышып башҡортса өйрәнеүе һәм буйтым итеп һөйләшеп тороуы үҙе үк һоҡланғыс. Балалары башҡортса һөйләшмәгән башҡорт ата-әсәләренең баҡсаһына елле генә таш та был.

Фильм "Һеңлекәш" тип атала, йәғни үҙендән бәләкәй ҡыҙ туғанының тураһында, йәнәһе. Эйе, Мостай Кәримдең әҫәрендә лә Йәмилгә һеңлекәш алып ҡайталар, ҡыҙыҡай унан бәләкәйерәк була. Ә бында фильмдың рекламаһындағы һүрәтенән үк малайҙың бәләкәй, ҡыҙҙың ҙур булыуын аңғарып, "Ни өсөн "һеңлекәш" икән?" тигән уй килә. Кинола ла һеңлеһе булған ҡыҙ бала малайҙан бер башҡа ҙур һәм йәшкә оло икәнен йәшерерлек түгел. Күрәһең, кинола һайланған ҡыҙыҡай шулай тура килгән дә, башҡорт телендәге туғанлыҡ терминдарын боҙоуҙы артыҡ һанға һуҡмағандар, күрәһең. Ысынында, шундай матур ҡыҙсыҡ, килеп тороп матур уйнай, килештерә - уны был ролгә алмау ҙа мөмкин булмағандыр. Нисек булғанда ла, был тәңгәлдә кино төшөрөүселәр тел мәсьәләһендәге бындай һорауҙарға түгел, ә актриса ҡыҙыҡайға яраҡлаштырған фильмды. Шул актриса икән - шул актриса, ә унда башҡортса "һеңле" тип әйтеләме "апаймы", "еңгәме", "инәйме" - барыбер уларға. Әммә башҡортса аңлаған, белгән һәм әсәйҙе әсәй, апайҙы апай, ә һеңлене һеңле тип үҫкәндәргә барыбер түгел. Бөгөн был фильмды ҡараған йөҙәрләгән бала-сағаға ла барыбер булмаһын ине.

Һәм тағы. Кинола аталары һуғышта үлгән балаларҙың хәлен, кисерештәрен бигерәк үҙәккә үткәрерлек итеп бирә алды кескәй малайҙар. Уларҙың "насар малай" булып һуғышып йөрөгәндәре лә, ыңғай геройҙары ла сытырман булып "атай" исеменә йәбешкән, тындары менән тартып ҡайтарырҙайҙар атайҙарын. Хатта фильм тулыһынса атай культына ғына бағышланған тигәндәй. Һуғыштан бөтә ауыл менән, һәр бала үҙ атаһын көтә лә, кемдәре уның һәләк булыуын белеп илай, кемеһенеңдер йөрәге ҡатып ҡала, кемелер атайһыҙлыҡтан тәрбиә күрмәй. Һәр бала үҙенсә кисерә был юғалтыуҙы. Оксана ла, Йәмил дә, Марат та, үрге ос малайҙары ла. Һәр береһе үҙ урынында тамашасының күңелен әйләндереп сығарырлыҡ роль башҡара. Афарин, малайҙар!

Дөйөм алғанда, кино бик-бик оҡшаны. Хан ҡыҙында ла бер хата була тигәндәй, өҫтә телгә алғандарын да күҙгә элмәҫкә мөмкиндер. Күп халыҡтарҙың билдәле фильмдары ла бит яҙылған әҫәрҙәренән ярайһы уҡ айырыла һәм улар өҫтөндә лә әллә ни төрлө бәхәстәр ишетелә. Эшләнгән эш һыртында фекерҙәр ҙә, бәхәстәр ҙә, төрлө ҡараштар ҙа булмай тормаҫ. Шулай уҡ тәнҡит тә урын алырға тейеш. Эш булмаһа ғына һүҙ булмай ул. Ә бында шундай ҙур һәм файҙалы хеҙмәт ята. Һәм был һуңғыһы ла булмаҫ, тигән өмөттә ҡалайыҡ.

**Лилиә ИСМӘҒИЛЕВА.**

*БЕҘГӘ ЯҘАЛАР*



**Яҡты донъяларға Хоҙай кешеләрҙе төрлө итеп яралтҡан: кемгәләр ҙур аҡыл, кемгәләр оло талант, кемгәләр ижади һәләт биргән. Ә кемгәләр төрлө ҡатмарлы һынауҙар биреп, физик яҡтан мөмкинлектәрен сикләгән, психик һәм аҡыл яғынан үҫешен тотҡарлаған. Минең эшем ошондай уҡыусыларҙы уҡытыу менән бәйле, йәғни хәрәкәт итеү мөмкинлектәре сикләнгән уҡыусыларға белем бирәм.**

# ХУР ҠЫҘЫ

Әлбиттә, бында атай-әсәйҙәрҙең үҙ балаһын аяҡҡа баҫтырыуға, тормошҡа яраҡлаштырыуға һалған көсөн әйтеп бөтөрөрлөк түгел. Ундай атай-әсәйҙең һәр береһе оло ихтирамға лайыҡ, һәр береһенә һәйкәл ҡуйырлыҡ. Шуға ла инвалид балаларға белем биргәндә уҡытыу-тәрбиә эше өс яҡлап - баланың үҙенең ынтылышы, атай-әсәйҙең тырышлығы, уҡытыусыларҙың фиҙаҡәр хеҙмәте менән тығыҙ бәйләнгән. Әгәр ҙә 20-30 йыл элегерәк күп инвалид уҡыусылар бөтөнләй уҡымаһа, хәҙер яңы стандарттарға ярашлы, "Уҡый алмаҫлыҡ бала юҡ" ("Необучаемых детей нет"). Шуға ла һәр инвалид уҡыусыға айырым уҡытыу программаһы ҡаралған, күптәре уны яҡшы үҙләштерә һәм, һуңынан тормошта ошо белемдәрен ҡулланып, үҙ урынын таба ала.

Минең уҡыусылар араһында ла төрлөһө бар: тырышып, төрлө конкурс-олимпиадаларҙа ҡатнашып, призлы урындар яулағандары ла; тырышып, яҡшы билдәләр менән атай-әсәйен ҡыуандырғаны ла; тырышып, бер нисә ай-йыл эсендә энә күҙендәй генә белем-тәрбиә үҙләштергәне лә... Эйе, "үҙенсәлекле" уҡыусылар менән эшләр өсөн уҡытыусыға ла төрлө яҡтан үҫешкән, төрлө яҡтан белемле, иң мөһиме, сабыр булырға кәрәк. Сөнки һөҙөмтәгә тиҙ генә ирешеп булмай, ҡайһы ваҡытта бөтөнләй һөҙөмтә булмаған кеүек тә тойола...

Шулай бер көндө (уҡыусының өйөнә барып уҡытам) уҡыусым менән дәрестәр үткәрҙек, һәр ваҡыттағыса, нимәгә өйрәтергә, ниндәй белем бирергә, ниндәй яңылыҡ асырға, нимәне үҙләштерергә тип уйлап, алдан дәрескә әҙерләндем. Тик ул көндө нисек кенә тырышһаҡ та, бер нәмә лә үҙләштерә лә, бер ниндәй яңылыҡ та аса алманыҡ. Төрлөсә аңлатып, күрһәтеп ҡараным, тик баланан бер генә лә яуап ишетмәнем, эшемдең тамсылай ҙа һөҙөмтәһен күрмәнем. Һәм бөтөнләй хәлем бөтөп, уҡыусының эргәһенә ултырҙым да, үҙ алдыма әкрен генә һөйләнә башланым: "Эй Хоҙайым, ярҙам итсе, нисек кенә аңлатайым икән, нисек кенә уҡытайым, белем бирәйем икән был балаға? Эй Хоҙайым, ниңә минең түккән көсөм шулай бушҡа китә икән? Эй Хоҙайым, берәй яҡшы һөҙөмтәгә ирешербеҙме икән? Эй Хоҙайым, был баланы нимәгә генә өйрәтә алырмын икән?" Мин был һүҙҙәрҙе шул тиклем ихлас әйттем, күҙҙәремдән йәш аҡҡанын да тойманым. Шул саҡ... уң яҡ ҡолағыма кемдеңдер әкрен генә "Хур ҡыҙы!" тип әйткән һүҙҙәрен ишеттем. Һиҫкәнеп, уянып киткәндәй булдым. Ян-яғыма ҡарайым, беҙ уҡыусы менән икәү генә ултырабыҙ. Ул минең күҙҙәремә мөлдөрәмә ҡарап баҡҡан, ә йөҙөндә йылмайыу, шул уҡ ваҡытта үҙен ғәйепле тойған кешенең уңайһыҙланыуы. Уны ҡосаҡлап алдым, уҡыусым ҡояштай балҡып китте! "Мин бит Хур ҡыҙы менән эшләйем! Ошондай "үҙенсәлекле" бала Хур ҡыҙы булмай кем булһын инде!" тигән һүҙҙәр килә тел осома...

Икенсе көндө дәрескә мин "Хур ҡыҙы менән эшләйем!" тип шатланып барҙым. Һәм беҙҙең дәрестәр ҙә еңел үтте, бик арыманыҡ та, күтәренке кәйеф менән уҡыу материалын, теманы үҙләштерә алдыҡ. "Үҙенсәлекле" баланың интуицияһы ныҡ үҫешкән, һинең күңелеңдә нимә ятҡанын улар шунда уҡ күрә, тоя, белә бит ул. Гәзит уҡыусылар араһында ла, бәлки, ошондай "үҙенсәлекле" балалар менән эшләгән уҡытыусылар, белгестәр барҙыр. "Беҙ Хур ҡыҙҙары-малайҙары менән эшләйбеҙ, беҙгә Хоҙай Тәғәлә шундай оло бәхет биргән!" тип әйтер инем мин коллегаларыма.

**Айһылыу СИРБАЕВА,**
**Инвалид балаларға дистанцион белем биреү республика үҙәгенең Дыуан бүлексәһе уҡытыусыһы.**

✓ *Балан, еҙәй, ҡарағат, миләш - бөтәһен дә берәр стакандан һалып бутарға, биш минут ҡайнатып йә термоста төнәтеп, шул сәйҙе эсергә. Бөтә ауырыуға ла килешә.*



ИНТЕРНЕТТАН



# ТӘМӘКЕНЕҢ...

## еңеле юҡ

■ Катара университеты ғалимдары чили боросо өлкәндәр өсөн файҙалы түгел, тип белдерә. 15 йыл дауамында ғалимдар 5 мең кеше ҡатнашлығында мәғлүмәт туплаған, һынауҙар башланғанда уларҙың уртаса йәше 63,5 йәш булған. Һәр 2-3 йыл һайын ҡатнашыусылар тест үткән һәм нисек туҡланыуы тураһында һөйләгән. Ҡырҡыу ризыҡ яратыусыларҙың хәтере насарыраҡ булып сыҡҡан. Чили боросо бигерәк тә тән ауырлығы түбән һәм физик әүҙемлеге юғары булғандарға зыянлы. Боросто көнөнә 50 грамдан артыҡ ашарға ярамай. Шул уҡ ваҡытта, чили донъялағы иң билдәле тәмләткес, бигерәк тә уны Азия илдәрендә яраталар. Ҡытайҙың ҡайһы бер төбәктәрендә өлкән йәштәге һәр кеше көн һайын чили ҡушылған ризыҡ менән туҡлана. Билдәле булыуынса, чили боросонда булған капсаицин матдәләр алышыныуҙы яҡшырта, ябыҡтыра, ҡан тамырҙары сирҙәренә ыңғай йоғонто яһай, сөнки ҡан баҫымын төшөрә. Ни өсөн ул хәтергә насар тәьҫир итә, был яуапҡа ғалимдар яуап бирә алмай.

■ Тиҙҙән вейп һәм кальянды тәмәке рәтенә индереүҙәре мөмкин. Хөкүмәт был инициативаны хуплаған да инде. Бөгөнгө көндә ҡайһы бер территорияларҙа, йәмәғәт урындарында тәмәке тартырға ярамай. Тыйыуҙы боҙған өсөн 500 һумдан 1500 һумға тиклем штраф та ҡаралған. Балаларҙың уйын майҙансығында тартҡан өсөн штраф күләме - 3000 һум. Хәҙер вейп менән кальян да популярлыҡ яуланы, шуға ла уларҙы тыйыу тураһында ҡарар ҡабул итеү көн үҙәгендә. 2016 йылда вептарҙы халыҡтың 3,5 проценты ҡулланһа, хәҙер был һан күпкә артҡан. Һаулыҡ һаҡлау министрлығы билдәләүенсә, электрон тәмәке халыҡтың сәләмәтлеген нығытыу эшенә ныҡ аяҡ сала. Электрон тәмәкелә шулай уҡ никотин бар, кешелә ул күнегеү барлыҡҡа килтерә. Ғәҙәти тәмәкенән бер яғы менән айырылмай икән, электрон тәмәкегә күсеүҙән бер нәмә лә үҙгәрмәйәсәк.

■ Мәскәү һаулыҡ һаҡлау департаменты диетологы Антонина Стародубова йәшел борсаҡ ашарға кәңәш итә. Ул стресс менән көрәшә икән. Борсаҡта В төркөмө витаминдары, магний күп, улар иһә нервы системаһы өсөн файҙалы. Шулай уҡ йәшел борсаҡ мускул туҡымаһын нығыта, организмдың инфекцияларға ҡаршы тороусанлығын көсәйтә. Бер юлы йөрәк-ҡан тамырҙары ауырыуҙары үсешен кәметә. Борсаҡтан тыш, С, В витаминдары, кальций, калий, марганец, фосфорға бай ҡабаҡ та өҫтәлегеҙҙә булһын.

■ Йоҡлай алмай яфаланһағыҙ, йоҡларҙан 90 минут алда ванна инегеҙ, тип кәңәш итә Техас университеты белгестәре. Ваннаның йылылығы 40-43 градус булһын. Йылы ванна йоҡлап китеү өсөн бик ҡулай. Эҫе һыу иһә калорияларҙы яндыра. Шул рәүешле сәғәтенә уртаса 126 калория яндырырға мөмкин. 25-30 минут йәйәү йөрөү ҙә шунса уҡ калорияны юҡҡа сығара. Был асыштарҙың барыһы ла диабетты контролдә тоторға тырышыу ваҡытында яһалған.

АҒИНӘЙ МӘКТӘБЕ

# ХАЛҠЫБЫҘ ӘМӘЛЕ -

## үҙеребеҙҙең мең төрлө үләне

**Учалы районы Уралтау арьяғында, Яйыҡ йылғаһы башланған Ирәмәлтау үренә үрелеп һуҙылған ҡайын урманлы һырттар буйлап ята. Мин был аҡ ҡайынлы төбәкте әллә нисә тапҡыр арҡыры-буйға кисеп үтһәм дә, һәр саҡ тәүгә күргәндәй һоҡланып, был яҡтың ожмахтай хозурлығына ғәжәпләнеп ҡайтам. 2019 йылдың көҙгө әбейҙәр сыуағы ваҡытында йәнә был яҡҡа юл төштө. Беҙҙе Учалы ағинәйҙәре Бөйҙө (Учалы-2) ауылы мәҙәниәт йортонда көтә ине.**

Ағинәйҙәр йыйыны һәр саҡ бер айырым темаға арнала: милли кейемдәрҙе өйрәнеү (этнография белгестәре һәм оҫталар махсус сығыштар яһай), халыҡ байрамдарын үткәреү (шулай уҡ белгестәр, режиссерҙар, ойоштороусылар лекция уҡый), балаларҙы туған телгә өйрәтеү (йәш сабый һәм мәктәп йәшендәгеләргә ниндәй аҡыл-фәһем биреү мотлаҡ - табип, психолог, балиғ булмағандар менән эшләү органдары хеҙмәткәре саҡырыла). Учалылар был юлы бик ябай һәм боронғо тема һайланы: дарыу үләндәре һәм халыҡ медицинаһы. Йыйын башында уҡ уның төп лейтмотивы иғлан ителде: "Кешегә үҙенең тыуған-үҫкән ерендәге үләндәр генә ярҙам итә ала". Тимәк, Урал арьяғындағы башҡорт ерҙәре шифаһын туплаған үҫемлектәр һәм ағастар хаҡында һүҙ барасаҡ.

Ошо йәшел аҙыҡты ашаған малдың ағы - һыйыр һәм кәзә һөтө тураһында тотош бер сәхнә күренеше менән бөйҙөләр осрашыуҙы башлап ебәрҙе. "Һөт аҙыҡтары" тигән өҫтәлдә егермеләп төрлө аҙыҡ теҙелгән, атамалары яҙылған: һөт, ҡаймаҡ, ҡатыҡ, эремсек, һары май, ҡыҙыл эремсек-эжегән, һары майға һәм аҡ майға батырылған eләк-емеш... Шунан башҡорт аҙығының батшаһы - ҡорот һәм уның төрҙәре теҙелеп китә: киптерелгән, еләкле, майлы-боросло, эркет... Эркет менән сәсте, битте-тәнде йыуыу, эсәктәрҙе таҙартыу, аяҡ сөйәлдәрен йомшартыу һәм дауалау, күҙҙе һәм тамаҡты сайҡатыу бик файҙалы икәнен иҫкә төшөрәләр. Әүәле кендек әбейҙәре сабыйҙың кендеген ҡырҡҡас, әсе эркеткә сайҡап, эркеткә манылған таҙа сепрәк бәйләгән. Көн һайын ярты сынаяҡ эркет эсеп, бауыр сирен һауыҡтырып, һимеҙлекте бөтөрөп була икәне лә билдәле. Был мәғлүмәттәр - барыһы ла һомғол буйлы, етеҙ хәрәкәтле, сағыу тауышлы Бөйҙө ағинәйҙәре теленән алынды. Улар йыйынды хөрмәтләп, һәр кемгә күстәнәс ҡороттар таратты.

Артабан ағинәйҙәр сиратлап төрлө дауа төрҙәрен йыйылыусылар иғтибарына тәҡдим итте. **Гәүһәр Мозафарова** үҙенең сығышын һарғылт төҫтәге шыйыҡ балды тәмләтеүҙән башланы: "Был - ҡарағай балы. Июнь айында йәшел ҡарағай тубырсыҡтарын йыйып, өс литрлы банкаға тултыраһың, бер килограмм аҡ шәкәр ҡомо йәки ете йөҙ грамлы банка менән шыйыҡ бал һалабыҙ. Тубырсыҡлы банканы тәҙрә төбөнә, ҡояшҡа ултыртабыҙ, көнгә бер мәртәбә әйләндереп болғатабыҙ. Сентябрь айына хәтле тора ул банка ҡояшта, шунан һөҙөп алып, ҡалаҡлап, сироп кеүек балды һыуға болғап эсәһең.. Иммунитетты күтәреү өсөн, тын юлы сирен сығарыу өсөн бик файҙалы", - тип һөйләне ул.

**Рәйлә Кәшәфетдинова һөйләй:** "Донъяла "Дүрт дарыу" тигән бер дауа бар. Балан, еҙәй, ҡарағат, миләш - бөтәһен дә берәр стакандан һалып бутарға, биш минут ҡайнатып йә термоста төнәтеп, шул сәйҙе эсергә. Бөтә ауырыуға ла килешә. Беҙҙең Урал үләндәре шул емештәрҙән ояһы инде. Электән билдәле был "дүрт дарыу" әллә нисә быуында үпкә, йөрәк, бөйөр, ҡан сирҙәренән ҡотҡарған".

**Рәмзиә Йомабаева һөйләй:** "Йәшерен-батырын түгел, эскелектән халҡыбыҙ бик миктәне. Иң яман яуҙар ҡыра алмағанды, "йәшел йылан" икеөс быуынды урып ырғытты. Эскелеккә ҡаршы бер генә эсемлек бар, ти торғайны беҙҙең яҡта йәшәгән бер имсе ҡарт: бер сынаяҡ һөткә бер семтем әрем сәскәһе һалып ҡайнатырға ла, тиҙ генә эсеп ебәрергә. Өс мәртәбә эскәндән һуң кеше араҡы яғына әйләнеп тә ҡарамай".

**Фәрит Фәйезов һөйләй** (һүрәттә): "Мин 1933 йылғымын, һикһән ете йәшем менән барам. Ҡайҙа ғына эшләмәнем, ниндәй генә ауыртыныуһыҙланыуҙар үткәрмәнем. Ләкин мин үләндәр ярҙамында ғына ошо йәшемә еттем. "Иң шифалы үлән нимә?" тип һорамағыҙ. Һәр бер үлән - дарыу, һәр береһе - ағыу. Ҡайсаҡ үҙегеҙҙе урманға сыҡҡан бесәй йәки эт итеп хис итегеҙ, күҙегеҙ йә тынығыҙ ниндәй үләнде эҙләп таба, шуға иғтибар итегеҙ, бәлки, был тап һеҙгә кәрәк дарыуҙыр. Һуңғы ваҡыт ашҡаҙан-эсәктәр хәле буйынса күп мөрәжәғәт итәләр: мин бер кәңәш бирә алам. Әрекмән, бәпембә, сельдерей тамырын алмаштилмәш ҡайнатып, унар көн эсергә кәрәк. Араһында берәр аҙна ял итергә. Ошо тамырҙар кешене эстән таҙарта. Мин көн дә велосипедта яланға үлән йыйырға сығам, был хәрәкәтләнеү - үҙе бер һаулыҡ, үҙе бер файҙа. Ә үләнде ҡайҙан, ҡасан, нисек йыйыу - бик мөһим. Уныһын китаптағы мәғлүмәттән тыш, үҙ белдегегеҙ менән эшләмәгеҙ, юғиһә, булған йәшел аптеканы әрәм-шәрәм итерһегеҙ. Юғиһә, ҡайһы берәүҙәр тау-яланға сыҡһа, ҡулы ҡысып, үләнде өҙергә генә тора. Хатта мал да үҙенә кәрәкмәгән үләнде урап үтә..."



Артабан ағинәйҙәр халыҡ медицинаһының бөгөн дә бик кәрәкле төрҙәре тураһындағы мәғлүмәттәр менән уртаҡлашты. **Таңһылыу Йосопова һөйләй:** "Радикулит ауырыуы менән йон-



*✓ Яҫы көмөш тәңкәне ҡырып, онтағын майға яғып ялауҙың тел-теш һәм тамаҡ ауырыуын дауалауын, йәки онтаҡ менән майҙы бутап, боҙолған ергә, яраға һөртөү килешкәнен белгәндәр.*



соған кешене янып ятҡан йылы тиреҫкә күмеп (тиҙәккә лә мөмкин) ҡуялар, өҫтән ҡалын кейем, толоп менән бөркәйҙәр. Әйләнгән һайын йылы сәй, һыу эсерәләр. Тиреҫкә бер мәртәбә ятыу (күмелеү) етә, тиҙәр, бары тик бер шарты бар: тиреҫтән сыҡҡас, толоп, быйма, бүрек кейеп, йылы өйҙә бер нисә сәғәт йоҡларға, йәки ял итергә кәрәк. Май айындағы яңы тағарылған йәш ҡайын япрағында ятыу ҙа шифалы: япраҡтарҙы йыйырға, уларҙы мендәр тышы йәки киндер тоҡ эсенә тултырып, йылы урынға һалып торорға. Аҙаҡ әлеге япраҡ араһына аяҡтарҙы тығып, юрғанға уранып, бер сәғәтләп ултырырға. Һуңынан йәнә йылы йөн ойоҡбаш, итек-быйма кейеп, бер нисә сәғәт ятыу йә ултырыу кәрәк".

**Мәүлиҙә Махиянова** эс һылау, йөрәк һылау, һөләк һылау, ҡот ҡойоуҙарҙың халыҡтың әүәлдән һыналған дауаланыу ысулдары булыуын иҫкә төшөрөп китте. Артабан **Мөкәримә Ғайсарова** дауам итә: "Һөләк һалыу тураһында беҙҙең башҡорт борондан белгән. Уның бик файҙалы һәм оҙаҡҡа етерлек шифаһы бар, был дауаны ныҡлап аяҡҡа баҫтырырға, иҫкә төшөрөргә кәрәк.. Беҙҙең яҡ халҡы хатта йырҙарында, иртәктәрендә, легендаларҙа һөләктә һөйләй, уны үҙенең сәләмәтлеген һаҡлаусы, үҙенә ярҙамсы бер йән эйәһе итеп күрә".

Мансур ауылынан **Зөлфирә Мөхәмәҙиева, Мәмдүҙә Мөхтәруллина** халыҡ им-том һәм дауалау ысулдарының береһе - "кернә тартыу" тураһында һөйләне. Баштағы сәсте бармаҡҡа урап тартып, баш тиреһе ҡойҡаһын ҡуҙғатыуҙы "кернә" тип атайҙар. Был ысул тире аҫтындағы һары һыуҙы тарата, ҡан тамырҙары һәм нервылар эшмәкәрлеген яҡшырта. "Кернә тартыу"ҙы баш ауыртҡанда, мейе һелкенгәндә лә ҡулланалар.

**Әсмә Хисамова һөйләй:** "Доғалар менән өшкөрөү беренсе урында тора, сөнки дауаланыу һәм терелеү - ул үҙ-үҙеңә ышаныуҙан башлана. Рух көсөн доғалар үҫтә. Мин үҙем һағын буҙаны ла изге доғалар менән өшкөрә-өшкөрә әҙерләйем, бар кешегә ризалыҡ һәм йән тыныслығы бирһен ул эсемлек, тием. Буҙаның шифаһын уны даими эскән кеше белә. Намаҙ кеүек файҙалы ул, тиер инем".

**Зөбәйҙә Ҡәләмова һөйләй:** "Кешене дауалау ваҡыты уның тыуған көнө менән бәйле. Күптәр тыуған көнөләйы алдынан ныҡ ауырып китеүсән. Быны борондан белгәндәр. Ул ваҡытта "ҡоро ураҙа" тотҡандар, йәғни бер-ике көн ашамай-эсмәй тороу хупланған. Икенсенән, айҙың торошона ҡарап дауалау булған. Үҫкән ай мәлендә дауалау күҙ, ҡолаҡ, һөйәк, быуын ауырыуына килешкән. Кәмегән ай ваҡытында ашҡаҙан, бауырҙы дауалағандар. Айҙың торошо һәр төрлө ауырыу-сырхауҙы йә баҫа, йә аҙҙырып ебәрә бит".

Ағинәйҙәр халҡыбыҙҙа көмөш тәңкә менән дауалауҙың киң таралған булыуын да иҫкә төшөрҙө. Мәҫәлән, кешене көмөш тәңкә ҡаптырып, ҡаҙанға ебәрелгән балыҡты күҙәтеп ултыртып ҡуялар. Шулай ултыра торғас, балыҡ йән бирергә тейеш. Был дауа алымы баш әйләнеүҙән, нервылар ҡаҡшауҙан, хатта эпилепсия сиренән дауалай икән. Икенсе миҫал: йортҡа йәш килен төшкәс, уға бағыулан, малдың ҡартаһынан аш бешерәләр, эсәк-ҡарын араһына мотлаҡ көмөш тәңкә һалып йә урап, килелгә һоғондоралар. Был уны төрлө эс сирҙәренән дауалай, тип ышанғандар. Шулай уҡ яҫы көмөш тәңкәне ҡырып, онтағын майға яғып ялауҙың тел-теш һәм тамаҡ ауырыуын дауалауын, йәки онтаҡ менән майҙы бутап, боҙолған ергә, яраға һөртөү килешкәнен белгәндәр. Бигерәк тә йәш баланы көмөш тәңкәле һыуҙа ҡойондороу, көмөш тәңкә менән ҡашын һыпырыу, сыбыртҡан тәненә һөртөү файҙалы була, тигәндәр. Бала кендеге боҙола башлаһа, эсе һыуҙа йә утта тотоп йылытып һыуытылған көмөш тәңкәне ҡуша бәйләп ҡуйғандар. Бүсерҙән дә көмөш тәңкә баҫып бәйләү ярҙам иткән.

**Учалы районы "Ағинәй" йәмғәт ойошмаһы етәксеһе Мәрзиә Солтанбаева** ла үҙ белгәндәре менән уртаҡлаша: "Минең өләсәйем тештәребеҙҙе үҙенсә дауалаланы. Башымдан яулыҡ бөркәп ябындыра ла, тилебәрән орлоғон яндырып, шуның төтөнөн уртлатып ултыртып ҡуя. Бер аҙ ултырғас, тештәр һәм ҡаҙналар янып ҡысыта башлай, ауыҙ эсенән шайыҡ-һыу ҡойола, шуның менән тештең эсендәге ҡорт төшә, тиер ине. Борондан теш һыҙлауын ошолай баҫҡандар, кариес та булмаған. Ошо дауа арҡаһындалыр инде, минең бер ҙә тешем һыҙламаны, етмешкә етеп барам - бер тешем дә хатта кителмәне лә..." **Артабан Мәрзиә Сәғит ҡыҙы Учалы ағинәйҙәренең яңы тормошсан проекттын иғлан итә: үҙ төбәгебеҙҙәге халыҡ дауалары тәжрибәһен өйрәнәбеҙ, яҙып алабыҙ, үҙебеҙҙә таратабыҙ, балалар баҡсаларында, мәктәптәрҙә, ауыл халҡы алдында сығыштар яһайбыҙ.**

Бөйҙә ауылы ағинәйҙәре йәнә бер нәмә менән аптыратты: улар бик матур итеп "Ағинәйҙәр бейеү"н башҡарҙы. Өйрәтеүселәре - йәш кенә һылыу ҡыҙ Әлиә Яҡупова килешле һәм йомшаҡ хәрәкәттәр менән башҡорт ҡатын-ҡыҙының төп асылын - күңел сафлығын һәм серлелеген, рух юғарылығын һәм байлығын сағылдырыуға өлгәшкән. Аһәңле бейеү бөтә ағинәйҙәргә бик оҡшаны, киләсәктә уны йыйындарҙа, майҙандарҙа, парадтарҙа барыһы бергә бейергә һүҙ ҡуйышты.

Учалы яғы уникаль фекерләүсе кешеләргә бай шул: **Финзирә Солтанова** үҙе теккән милли кейем - барын-табын ҡыҙҙары кейемен күрһәтте. Ул милли кейем белгесе Азат Ғарипов етәкселегендә бығаса музей һәм һандыҡ төбөндә һаҡланып ҡалған үрнәктәрҙең заманса яңы тегелешен тергеҙеүҙә ҙур әүҙемлек күрһәтә. Аяҡ кейеменең сарыҡ (күн табанлы тупыҡ башлы итеккә тула йәки һарыҡ йөнөнән бәйләнгән ҡуныс), үксәлә ҡата (күн итеккә тула ҡуныс) тигән төрҙәре лә халыҡҡа күрһәтелде. **Бығаса сәхнәгә галош һәм йөн ойоҡбаш менән сыҡтыҡ, артабан уны милли ҡата, ситек, сарыҡ алыштырасаҡ, тине учалылар.**

Шулай уҡ **Гөлйемеш Рәкипованың** сарыҡ ҡыҫмауы (сарыҡ ҡунысын бәйләй торған бауы) һәм "учалы камзулы" тип нарыҡлаған камзулын тамаша ҡылыу күп һорауҙар тыуҙырҙы. Камзул итәгенә теҙеп тәңкә баҫыу - тиләү ырыуына хас. Тимәк, камзул, еләң кеүек ҙур кейемде тергеҙгәндә, уларҙы барлыҡҡа килтергән ырыу атамаһын ҡалҡырыу, теүәл әйтеү - бик тә фарыз эш. Иҫтамғол ауылынан Гөлсирә Ғәлиәхмәтова ла "ҡаратабын ырыуы ҡатындарының камзул итәгенә биш рәткә хәтле тәңкә теҙеләү", ти. Улар һәр даим үҙҙәренең ғалимы, төп юл күрһәткес шәхес Азат Салауат улына ҡарап тора. Ул һәр йыйында берәй темаға махсус һүҙ ала. Был юлы "флүр" һәм "француз" яулыҡтарҙың айырмаһын бик асыҡ итеп аңлатып бирҙе.

Учалы яғында традицион һаҡалды "яға" тиҙәр (Силәбелә лә шулай). Бөйҙөгә йыйылған ағинәйҙәр һәр ауылдың биҙәге-сәскәһе булып, үҙ яғаларын тағып килгәйне. Әйтергә кәрәк, учалылар бары тик традицион стилдә эшләнгән яғаларҙы ғына халыҡ араһына кейә. Уйынсыҡ йә сувенир һымаҡ өйрәнсек эштәр бөтөнләй күренмәне. Бөгөн ағинәйҙәр араһында милли кейемде тергеҙеүҙәге "хаталар өҫтөндә эш" барыуын да уларҙың дөрөҫ аңлауы, дөрөҫ ишетеүе һәм ваҡытында төҙәтеүе бик тә мөһим бит.

**ШУЛАЙ ИТЕП...**

**Учалы яғына Ирәмәл түбәләре һынап ҡарағандай. Мең төрлө үҫемлек менән халыҡты һау-сәләмәт үрсеткән, йәштәккән изге төбәк ошо хазинаның да ҡәҙерен белеүҙе теләй. Һау-сәләмәт кешенең кейенергә лә, йыр-бейеүгә лә дәрте булыр, ти Ирәмәл. "Ир әмәле" тиеп лә аңлатыла был изге тауҙың исеме. Әмәлен таптҡан ил гәмәлен-эшен дә атҡарыр икәнен беләбеҙ бит инде беҙ.**

**Сәрүәр СУРИНА.**



*Кернә тартыу.*



*Силәбе ағинәйҙәре ҡунаҡҡа килде.*

СӘЛӘМӘТ БУЛ!



# ИЛЛЕ ЙӘШТӘН ҺУҢ...

## "Баҫҡыстар" күнегеүе

Әгәр һеҙ йәйләп, аяҡтарығыҙҙы саҡ шылдырып йөрөһәгеҙ, аяғығыҙҙы алға баҫҡан һайын ҡыҫҡа һәм шаулы итеп тын алығыҙ. Һәр аҙымға бер тын алыу тура килһен. Шулай һауаны шаулы итеп һулай-һулай алға барығыҙ. 8 аҙым-тын алыу яһағандан һуң бер ни тиклем, үҙ хәлегеҙгә ҡарап, ял итегеҙ. Тағы 8 аҙымдан һуң ҡабат ял итегеҙ. Иркен тын алығыҙ: туҡтағанда тын алыу режимы һәм ысулы мөһим түгел. Әгәр һеҙгә хәрәкәт итеүе бик тә ауыр икән, һәр дүрт аҙымдан һуң ял итегеҙ, әммә маҡсатығыҙға табан барығыҙ. Стрельникованың гимнастикаһын атлап барғанда эшләп, бер ниндәй ярҙамһыҙ магазинға йәки дарыуханаға тиклем барып етерһегеҙ. Һәм һеҙгә бүләк - кәрәкле дарыу йәки яңы бешкән икмәк буласаҡ. Йортоғоҙҙа лифт ватылһа йәки ремонтҡа туҡтаһа ла аптырамағыҙ. Тән ауырлығын өҫкө баҫҡысҡа күсереп, ҡыҫҡа, шаулы итеп тын алып, алға барығыҙ. Эстән генә 8 баҫҡыс һанағыҙ һәм ял итегеҙ. Ошо күнегеүҙе эшләп өйрәнһәгеҙ, юғары ҡатҡа ла еңел менә башларһығыҙ.

## Атлап барған ыңғайы "Бесәй" күнегеүе

Матур көндә тышта йәйләп баҫып йөрөһәгеҙ, һәр аҙымда ҡыҫҡа һәм шаулы итеп тын алырға һәм һигеҙ аҙым яһағандан һуң ял итеп алырға онотмағыҙ. Әгәр шәп итеп атлаһағыҙ, йә уң аяғығыҙҙы алға ҡуйғанда тын алығыҙ, йә тик һулына ғына көйләнегеҙ. Һәр аҙымды яһағанда саҡ ҡына сүгәләргә лә мөмкин, йәғни алға аҙым яһағанда саҡ ҡына ошо аяҡҡа ултыра төшөгөҙ һәм ҡыҫҡа, шаулы итеп тын алығыҙ. Тын үҙ йәйына сыға - уға иғтибар итмәгеҙ. Тынды танау аша сығарыу ауыр икән, ауыҙ аша сығарығыҙ.

## Түшәктә ятыусылар өсөн

Түшәктә ятҡан сирлене тәрбиәләү бигерәк ауыр. Шуға күрә ятҡан сирле туғандарына ауырлыҡ тыуҙырмаҫ, үҙен бер аҙ тәрбиәләй алырлыҡ булыр, йәйләп булһа ла өйҙә хәрәкәтләнер өсөн ауырыу менән көрәшергә тейеш. Был осраҡта Александра Стрельникованың тын алыу гимнастикаһы ярҙамға килә лә инде. Түшәктә ятҡан йәки операциянан һуң шундай режим һаҡларға мәжбүр булған ауырыуҙарға төп комплекстың дүрт: "Устар", "Погондар", "Яурындарынды ҡосаҡла", "Башыңды бор" һәм ярҙамсы комплекстан ике: "Аяҡ остары" һәм "Селәүсен" күнегеүен эшләргә кәрәк. Тәүҙә "Устар" күнегеүенән башлайбыҙ.

## "Устар"

Ятҡан килеш ҡулдарҙы терһәктән бөгәбеҙ (терһәк менән түшәккә терәлергә лә мөмкин), устарҙы алға ҡаратып яҙабыҙ. "Бер" тигәндә ҡыҫҡа, шаулы итеп тын алабыҙ һәм бер үк ваҡытта устарҙы йоҙроҡлайбыҙ (нимәнелер тотҡан хәрәкәт яһайбыҙ). Тынды сығарғанда устарҙы яҙабыҙ. Бер туҡтауһыҙ 4 тапҡыр тын алабыҙ һәм тын сығарабыҙ. Шунан 3-5 секунд ял итәбеҙ һәм тағы ла 4 тапҡыр эшләйбеҙ. Норма: 24 тапҡыр 4 тын алыу-тын сығарыу күнегеүен эшләргә. Әгәр инсульт үткәргәнһегеҙ һәм тәнегеҙҙең уң яғын фалиж һуҡҡан икән, һул яҡ усығыҙҙы ғына йомарлағыҙ. Ауырыу ҡулығыҙ түшәктә ятһа ла, уны ла йомарларға тырышығыҙ. Мотлаҡ ауырыу ҡулығыҙ ҙа сәләмәт яғы кеүек хәрәкәтләнә тип күҙ алдына килтерегеҙ. Йәйләп улар икеһе лә эшләй башлар.

**С. КУЗИНА.**

**(Дауамы бар).**



## 7 ОКТЯБРЯ ПОНЕДЕЛЬНИК

### ПЕРВЫЙ КАНАЛ

5.00 Телеканал "Доброе утро".
9.00 Новости.
9.15 Телеканал "Доброе утро".
9.50 Модный приговор. [6+]
10.50 Жить здорово! [16+]
12.00 Новости.
12.10 Время покажет. [16+]
15.00 Новости (с субтитрами).
15.15 Давай поженимся! [16+]
16.00 Мужское / Женское. [16+]
17.00 Время покажет. [16+]
18.00 Вечерние новости (с субтитрами).
18.30 На самом деле. [16+]
19.40 Пусть говорят. [16+]
21.00 Время.
21.30 Т/с Премьера. "Отчаянные". [16+]
23.25 Вечерний Ургант. [16+]
0.00 Познер. [16+]
1.00 Время покажет. [16+]
3.00 Новости.
3.05 Время покажет. [16+]
3.40 На самом деле. [16+]

### РОССИЯ 1

5.00, 6.10, 6.41, 7.10, 7.41, 8.10, 8.41 Утро России.
6.07, 6.35, 7.07, 7.35, 8.07, 8.35, 9.00 Местное время. Вести-Башкортостан. Утро.
9.25 Доброе утро, республика!
9.55 О самом главном. [12+]
11.00 Вести.
11.25 Местное время. Вести-Башкортостан.
11.45 Судьба человека с Борисом Корчевниковым. [12+]
12.50 "60 минут". [12+]
14.00 Вести.
14.25 Местное время. Вести-Башкортостан.
14.45 Кто против? [12+]
17.00 Местное время. Вести-Башкортостан.
17.25 Андрей Малахов. Прямой эфир. [16+]
18.50 "60 минут". [12+]
20.00 Вести.
20.45 Местное время. Вести-Башкортостан.
21.00 Т/с "Входя в дом, оглянись". [12+]
23.15 Вечер с Владимиром Соловьёвым. [12+]
02.00 Т/с "Екатерина". [12+]
03.45 Т/с "Семейный детектив". [12+]

### БСТ

**7.00 Сәләм.[12+]**
**9.00 Новости (на рус. яз.).**
**9.15 Сәләм.**
**10.00 Т/с "Орлова и Александров". [16+]**
**11.00 Итоги недели (на рус. яз.).**
**11.45 Специальный репортаж. [12+]**
**12.00 Счастливый час. [12+]**
**13.00 Новости (на баш. яз.).**
**13.30 Бәхетнамә. [12+]**
**14.30 Бай баҡса. [12+]**
**15.00 Интервью. [12+]**
**15.15 Әлләсе... [6+]**
**16.00 Новости (на рус. яз.).**
**16.15 Гора новостей.**
**16.30 Т/с "Орлова и Александров". [16+]**
**17.30 Новости (на рус. яз.).**
**17.45 Интервью. [12+]**
**18.00 Ради добра. [6+]**
**18.15 Инцидент-репортаж. [12+]**
**18.30 Новости (на баш. яз.).**
**18.45 Хоккей. КХЛ. "Салават Юлаев" (Уфа) - "Металлург" (Магнитогорск).**
**21.30 Новости (на рус. яз.).**
**22.00 Реальный футбол. [12+]**
**22.30 Новости (на баш. яз.).**
**23.00 Теге өсәү! [12+]**
**23.30 Күстәнәс. [12+]**
**0.00 Спектакль "Признание". [12+]**
**1.45 Х/ф "Зимний вечер в Гаграх". [12+]**
**3.15 Бәхетнамә. [12+]**
**4.00 Спектакль "Отчаянная". [12+]**
**5.30 Счастливый час. [12+]**
**6.30 Новости (на рус. яз.).**

## 8 ОКТЯБРЯ ВТОРНИК

### ПЕРВЫЙ КАНАЛ

5.00 Телеканал "Доброе утро".
9.00 Новости.
9.15 Телеканал "Доброе утро".
9.50 Модный приговор. [6+]
10.50 Жить здорово! [16+]
12.00 Новости.
12.10 Время покажет. [16+]
15.00 Новости (с субтитрами).
15.15 Давай поженимся! [16+]
16.00 Мужское / Женское. [16+]
17.00 Время покажет. [16+]
18.00 Вечерние новости (с субтитрами).
18.30 На самом деле. [16+]
19.40 Пусть говорят. [16+]
21.00 Время.
21.30 Т/с Премьера. "Отчаянные". [16+]
23.25 Вечерний Ургант. [16+]
0.00 Время покажет. [16+]
3.00 Новости.
3.05 Время покажет. [16+]
3.45 На самом деле. [16+]

### РОССИЯ 1

5.00, 6.10, 6.41, 7.10, 7.41, 8.10, 8.41 Утро России.
6.07, 6.35, 7.07, 7.35, 8.07, 8.35, 9.00 Местное время. Вести-Башкортостан. Утро.
9.25 Доброе утро, республика!
9.55 О самом главном. [12+]
11.00 Вести.
11.25 Местное время. Вести-Башкортостан.
11.45 Судьба человека с Борисом Корчевниковым. [12+]
12.50 "60 минут". [12+]
14.00 Вести.
14.25 Местное время. Вести-Башкортостан.
14.45 Кто против? [12+]
17.00 Местное время. Вести-Башкортостан.
17.25 Андрей Малахов. Прямой эфир. [16+]
18.50 "60 минут". [12+]
20.00 Вести.
20.45 Местное время. Вести-Башкортостан.
21.00 Т/с "Входя в дом, оглянись". [12+]
23.15 Вечер с Владимиром Соловьёвым. [12+]
02.00 Т/с "Екатерина". [12+]
03.40 Т/с "Семейный детектив". [12+]

### БСТ

**7.00 Сәләм. [12+]**
**9.00 Новости (на рус. яз.).**
**9.15 Сәләм. [12+]**
**10.00 Т/с "Орлова и Александров". [16+]**
**11.00 Новости (на рус. яз.).**
**11.15 Республика Live. #Дома. [12+]**
**11.45 Дорожный патруль. [16+]**
**12.00 Счастливый час. [12+]**
**13.00 Новости (на баш. яз.).**
**13.30 Бәхетнамә. [12+]**
**14.30 Дорога к храму. [0+]**
**15.00 Интервью. [12+]**
**15.15 Вопрос+Ответ=Портрет. [6+]**
**16.00 Новости (на рус. яз.).**
**16.15 Гора новостей.**
**16.30 Спектакль "Красная шапочка". [12+]**
**17.30 Новости (на рус. яз.).**
**17.45 Интервью. [12+]**
**18.00 Реальный футбол. [12+]**
**18.30 Новости (на баш. яз.).**
**19.00 Вечерний телецентр.**
**19.45 Сәңгелдәк. [0+]**
**20.00 Новости (на рус. яз.).**
**20.15 Криминальный спектр. [16+]**
**20.30 Интервью. [12+]**
**20.45 Полезные новости. [12+]**
**21.00 Уфимское "Времечко".[12+]**
**21.30 Новости (на рус. яз.).**
**22.00 По сути дела... [12+]**
**22.30 Новости (на баш. яз.).**
**23.00 Колесо времени. [12+]**
**0.00 Х/ф "Забытая мелодия для флейты". [12+]**
**2.15 Бәхетнамә. [12+]**
**3.00 Спектакль "Заблудшая". [12+]**
**5.30 Счастливый час. [12+]**
**6.30 Новости (на рус. яз.).**

## 9 ОКТЯБРЯ СРЕДА

### ПЕРВЫЙ КАНАЛ

5.00 Телеканал "Доброе утро".
9.00 Новости.
9.15 Телеканал "Доброе утро".
9.50 Модный приговор. [6+]
10.50 Жить здорово! [16+]
12.00 Новости.
12.10 Время покажет. [16+]
15.00 Новости (с субтитрами).
15.15 Давай поженимся! [16+]
16.00 Мужское / Женское. [16+]
17.00 Время покажет. [16+]
18.00 Вечерние новости (с субтитрами).
18.30 На самом деле. [16+]
19.40 Пусть говорят. [16+]
21.00 Время.
21.30 Т/с Премьера. "Отчаянные". [16+]
22.30 На самом деле. [16+]
23.30 Вечерний Ургант. [16+]
0.05 Время покажет. [16+]
3.00 Новости.
3.05 Время покажет. [16+]
3.45 Про любовь. [16+]

### РОССИЯ 1

5.00, 6.10, 6.41, 7.10, 7.41, 8.10, 8.41 Утро России.
6.07, 6.35, 7.07, 7.35, 8.07, 8.35, 9.00 Местное время. Вести-Башкортостан. Утро.
9.25 Доброе утро, республика!
9.55 О самом главном. [12+]
11.00 Вести.
11.25 Местное время. Вести-Башкортостан.
11.45 Судьба человека с Борисом Корчевниковым. [12+]
12.50 "60 минут". [12+]
14.00 Вести.
14.25 Местное время. Вести-Башкортостан.
14.45 Кто против? [12+]
17.00 Местное время. Вести-Башкортостан.
17.25 Андрей Малахов. Прямой эфир. [16+]
18.50 "60 минут". [12+]
20.00 Вести.
20.45 Местное время. Вести-Башкортостан.
21.00 Т/с "Входя в дом, оглянись". [12+]
23.15 Вечер с Владимиром Соловьёвым. [12+]
02.00 Т/с "Екатерина. Взлёт". [12+]
03.50 Т/с "Семейный детектив". [12+]

### БСТ

**7.00 Сәләм. [12+]**
**9.00 Новости (на рус. яз.).**
**9.15 Сәләм. [12+]**
**10.00 Т/с "Орлова и Александров". [16+]**
**11.00 Новости (на рус. яз.).**
**11.15 По сути дела... [12+]**
**11.45 Криминальный спектр. [16+]**
**12.00 Счастливый час. [12+]**
**13.00 Новости (на баш. яз.).**
**13.30 Бәхетнамә. [12+]**
**14.30 "Аль-Фатиха". [12+]**
**15.00 Интервью. [12+]**
**15.15 Бала-саға. [6+]**
**16.00 Новости (на рус. яз.).**
**16.15 Гора новостей.**
**16.30 Спектакль "Дураки". [12+]**
**17.30 Новости (на рус. яз.).**
**17.45 Интервью. [12+]**
**18.00 Ты можешь! [12+]**
**18.30 Новости (на баш. яз.).**
**18.45 Хоккей. КХЛ. "Салават Юлаев" (Уфа) - "Барыс" (Нур-Султан).**
**21.30 Новости (на рус. яз.).**
**22.00 Реальный футбол. [12+]**
**22.30 Новости (на баш. яз.).**
**23.00 Ете егет. [12+]**
**23.45 Земляки. [12+]**
**0.00 Х/ф "Гусарская баллада". Новости (на баш. яз.). [6+]**
**2.15 Бәхетнамә. [12+]**
**3.00 Спектакль "Тамарис". [12+]**
**4.45 Ете егет. [12+]**
**5.30 Счастливый час. [12+]**
**6.30 Новости (на рус. яз.).**

## 10 ОКТЯБРЯ ЧЕТВЕРГ

### ПЕРВЫЙ КАНАЛ

5.00 Телеканал "Доброе утро".
9.00 Новости.
9.15 Телеканал "Доброе утро".
9.50 Модный приговор. [6+]
10.50 Жить здорово! [16+]
12.00 Новости.
12.10 Время покажет. [16+]
15.00 Новости (с субтитрами).
15.15 Давай поженимся! [16+]
16.00 Мужское / Женское. [16+]
17.00 Время покажет. [16+]
18.00 Вечерние новости (с субтитрами).
18.30 На самом деле. [16+]
19.40 Пусть говорят. [16+]
21.00 Время.
21.35 Т/с Премьера. "Отчаянные". [16+]
22.35 На самом деле. [16+]
23.35 Футбол. Сборная России - сборная Шотландии. Отборочный матч чемпионата Европы-2020. Прямой эфир.
1.45 Вечерний Ургант. [16+]
2.20 Время покажет. [16+]
3.00 Новости.
3.05 Время покажет. [16+]

### РОССИЯ 1

5.00, 6.10, 6.41, 7.10, 7.41, 8.10, 8.41 Утро России.
6.07, 6.35, 7.07, 7.35, 8.07, 8.35, 9.00 Местное время. Вести-Башкортостан. Утро.
9.25 Доброе утро, республика!
9.55 О самом главном. [12+]
11.00 Вести.
11.25 Местное время. Вести-Башкортостан.
11.45 Судьба человека с Борисом Корчевниковым. [12+]
12.50 "60 минут". [12+]
14.00 Вести.
14.25 Местное время. Вести-Башкортостан.
14.45 Кто против? [12+]
17.00 Местное время. Вести-Башкортостан.
17.25 Андрей Малахов. Прямой эфир. [16+]
18.50 "60 минут". [12+]
20.00 Вести.
20.45 Местное время. Вести-Башкортостан.
21.00 Т/с "Входя в дом, оглянись". [12+]
23.15 Вечер с Владимиром Соловьёвым. [12+]
02.00 Т/с "Екатерина. Взлёт". [12+]
04.00 Т/с "Семейный детектив". [12+]

### БСТ

**7.00 Сәләм. [12+]**
**9.00 Новости (на рус. яз.).**
**9.15 Сәләм. [12+]**
**10.00 Т/с "Орлова и Александров". [16+]**
**11.00 Новости (на рус. яз.).**
**11.15 Честно говоря. [12+]**
**12.00 Счастливый час. [12+]**
**13.00 Новости (на баш. яз.).**
**13.30 Бәхетнамә. [12+]**
**14.30 Земляки. [12+]**
**14.45 Ради добра. [6+]**
**15.00 Интервью. [12+]**
**15.15 Бирешмә. Профи. [6+]**
**16.00 Новости (на рус. яз.).**
**16.15 Гора новостей.**
**16.30 Т/с "Орлова и Александров". [16+]**
**17.30 Новости (на рус. яз.).**
**17.45 Интервью. [12+]**
**18.00 Реальный футбол. [12+]**
**18.30 Новости (на баш. яз.).**
**19.00 Вечерний телецентр.**
**19.45 Сәңгелдәк. [0+]**
**20.00 Новости (на рус. яз.).**
**20.15 Криминальный спектр. [16+]**
**20.30 Интервью. [12+]**
**20.45 Инцидент-репортаж. [12+]**
**21.00 Уфимское "Времечко".**
**21.30 Новости (на рус. яз.).**
**22.00 Республика Live. #Дома. [12+]**
**22.30 Новости (на баш. яз.).**
**23.00 "Песня года". [12+]**
**23.30 Автограф. [12+]**
**0.00 Спектакль "Квадратура круга". [12+]**
**1.45 Х/ф "Победительница". [18+]**
**3.15 Бәхетнамә. [12+]**
**4.00 Спектакль "Половецкая мистерия". [12+]**
**5.30 Счастливый час. [12+]**
**6.30 Новости (на рус. яз.).**

## 11 ОКТЯБРЯ ПЯТНИЦА

### ПЕРВЫЙ КАНАЛ

5.00 Телеканал "Доброе утро".
9.00 Новости.
9.15 Телеканал "Доброе утро".
9.50 Модный приговор. [6+]
10.50 Жить здорово! [16+]
12.00 Новости.
12.10 Время покажет. [16+]
15.00 Новости (с субтитрами).
15.15 Давай поженимся! [16+]
16.00 Мужское / Женское. [16+]
17.00 Время покажет. [16+]
18.00 Вечерние новости (с субтитрами).
18.35 "Человек и закон" с Алексеем Пимановым. [16+]
19.45 Поле чудес. [16+]
21.00 Время.
21.30 "Голос". Новый сезон. [12+]
23.30 Вечерний Ургант. [16+]
0.25 Д/ф Премьера. "Эми Уайнхаус: История альбома "Back to black". [16+]
1.35 На самом деле. [16+]
2.35 Про любовь. [16+]
3.20 Мужское / Женское. [16+]
4.00 Наедине со всеми. [16+]

### РОССИЯ 1

5.00, 6.10, 6.41, 7.10, 7.41, 8.10, 8.41 Утро России.
6.07, 6.35, 7.07, 7.35, 8.07, 8.35, 9.00 Местное время. Вести-Башкортостан. Утро.
9.25 Доброе утро, республика!
9.55 О самом главном. [12+]
11.00 Вести.
11.25 Местное время. Вести-Приволжского федерального округа.
11.45 Судьба человека с Борисом Корчевниковым. [12+]
12.50 "60 минут". [12+]
14.00 Вести.
14.25 Местное время. Вести-Башкортостан.
14.45 Кто против? [12+]
17.00 Местное время. Вести-Башкортостан.
17.25 Андрей Малахов. Прямой эфир. [16+]
18.50 "60 минут". [12+]
20.00 Вести.
20.45 Местное время. Вести-Башкортостан.
21.00 "Аншлаг и Компания". [16+]
00.30 Х/ф "Старшая жена". [12+]
04.00 Судьба человека с Борисом Корчевниковым. [12+]

### БСТ

**7.00 "С праздником, Республика!" Концерт. [12+]**
**8.00 Новости (на баш. яз.).**
**8.15 "Йома". [0+]**
**8.45 "Йөрәк һүҙе". [12+]**
**9.00 Концерт группы "Бирешмә". [6+]**
**9.30 Медовая страна. [6+]**
**9.45 "Кумысный путь". [6+]**
**10.00 Д/ф "Первая Республика". [12+]**
**10.45 Страна Северных Амуров. [6+]**
**11.00 Гора новостей. [6+]**
**11.30 Үткән ғүмер. [12+]**
**12.00 Х/ф "Первая Республика". [12+]**
**13.55 Финал конноспортивного турнира "Терра Башкирия". [12+]**
**15.30 Новости (на баш. яз.).**
**16.00 Концерт, посвященный Дню Республики. [12+]**
**20.15 Новости (на рус. яз.).**
**20.50 Хоккей. КХЛ. "Торпедо" (Нижегородская область) - "Салават Юлаев" (Уфа).**
**23.30 Х/ф "Первая Республика". [12+]**
**1.15 Спектакль "Записки юного врача". [12+]**
**2.30 Х/ф "Макаров". [16+]**
**4.15 Спектакль "Нэркэс". [12+]**
**6.30 Новости (на рус. яз.).**

## 12 ОКТЯБРЯ СУББОТА

### ПЕРВЫЙ КАНАЛ

5.50 Х/ф "Комиссар". [12+]
6.00 Новости.
6.10 Х/ф "Комиссар". [12+]
8.10 Играй, гармонь любимая! [12+]
8.55 Умницы и умники. [12+]
9.45 Слово пастыря. [0+]
10.00 Новости.
10.10 Д/ф "Савелий Крамаров. Джентльмен удачи. Смешной до слез". [12+]
11.10 Д/с "Теория заговора". [16+]
12.00 Новости (с субтитрами).
12.10 Д/ф "Ролан Быков. "Я вас, дураков, не брошу..." [12+]
13.15 Х/ф "Из жизни отдыхающих". [12+]
14.55 Х/ф "По семейным обстоятельствам". [12+]
17.30 "Кто хочет стать миллионером?" с Дмитрием Дибровым. [12+]
19.00 Сегодня вечером. [16+]
21.00 Время.
21.20 "Клуб Веселых и Находчивых". Высшая лига. [16+]
23.30 Х/ф Премьера. "Шпионы по соседству". [16+]
1.30 Х/ф "Обезьяньи проделки". [12+]
3.20 Про любовь. [16+]

### РОССИЯ 1

05.00 Утро России. Суббота.
08.15 По секрету всему свету. [12+]
8.40 Местное время. Суббота. [12+]
09.20 Пятеро на одного. [12+]
10.10 Сто к одному. [12+]
11.00 Вести.
11.20 Местное время. Вести-Башкортостан.
11.40 "Юмор! Юмор! Юмор!!!" [16+]
13.50 Х/ф "Опавшие листья". [12+]
18.00 Привет, Андрей! [12+]
20.00 Вести в субботу.
21.00 Х/ф "Линия жизни". [12+]
01.00 Х/ф "Вдовец". [12+]

### БСТ

**7.00 "Доброе утро!" Концерт. [12+]**
**8.00 Новости (на баш. яз.).**
**8.15 "Аль-Фатиха". [12+]**
**8.45 Ты можешь! [12+]**
**9.15 Посмотрим... [12+]**
**10.00 Этноlike. [6+]**
**10.30 Телесеть "Тамыр". [6+]**
**11.00 Күстәнәс. [12+]**
**11.30 Бай баҡса. [12+]**
**12.00 100 имен Башкортостана. [12+]**
**12.30 Ете егет. [12+]**
**13.15 Земляки. [12+]**
**13.30 Хазина о хазине. [0+]**
**14.00 "Дарю песню". [12+]**
**16.00 Колесо времени. [12+]**
**17.00 Спектакль "Аленький цветочек". [12+]**
**18.00 Бизнес-обзор. [12+]**
**18.15 Полезные новости. [12+]**
**18.30 Новости (на баш. яз.).**
**19.00 Вопрос+Ответ=Портрет.**
**19.45 Сәңгелдәк. [0+]**
**20.00 Деловой Башкортостан. [12+]**
**20.15 Ради добра. [6+]**
**20.30 "Байыҡ-2019". [12+]**
**21.30 Новости (на рус. яз.).**
**22.00 Караоке по-башкирски. [12+]**
**22.30 Итоги недели (на баш. яз.).**
**23.15 Концерт заслуженного артиста РБ Рустама Гиззатуллина. [12+]**
**1.45 Х/ф "Никто не заменит тебя". [16+]**
**3.00 Итоги недели (на баш. яз.).**
**3.45 Спектакль "Операция". [12+]**
**5.45 "Йөрәк һүҙе". [12+]**
**6.00 Д/ф "Мы - одна семья". [12+]**
**6.30 Новости (на рус. яз.).**

## 13 ОКТЯБРЯ ВОСКРЕСЕНЬЕ

### ПЕРВЫЙ КАНАЛ

4.00 Д/ф "Ролан Быков. "Я вас, дураков, не брошу..." [12+]
4.45 Х/ф "По семейным обстоятельствам". [12+]
7.00 Бокс. Бой за титул чемпиона мира. Д. Бивол - Л. Кастильо, А. Усик - Т. Спонг. Прямой эфир. [12+]
9.00 Здоровье. [16+]
10.00 Новости.
10.10 Жизнь других. [12+]
11.15 Видели видео? [6+]
12.00 Новости (с субтитрами).
12.25 Видели видео? [6+]
14.05 Д/ф "Савелий Крамаров. Джентльмен удачи. Смешной до слез". [12+]
14.55 Д/с Премьера. "Страна Советов. Забытые вожди". [16+]
16.55 Премьера. Праздничный концерт к Дню работника сельского хозяйства. [12+]
18.30 Премьера. "Щас спою!" [12+]
19.40 Время.
20.45 Футбол. Сборная России - сборная Кипра. Отборочный матч чемпионата Европы-2020. Прямой эфир.
23.00 Большая игра. [16+]
0.45 Х/ф "Чего хочет Джульетта". [16+]
2.30 Про любовь. [16+]
3.25 Наедине со всеми. [16+]

### РОССИЯ 1

04.40 Сам себе режиссёр. [12+]
05.20 Х/ф "Мама напрокат". [12+]
07.20 Семейные каникулы. [12+]
07.30 "Смехопанорама" Евгения Петросяна. [12+]
08.00 Утренняя почта. [12+]
08.40 Местное время. Воскресенье.
09.20 Когда все дома с Тимуром Кизяковым. [12+]
10.10 Сто к одному. [12+]
11.00 Вести.
11.20 "Смеяться разрешается". [12+]
13.40 Х/ф "Моё сердце с тобой". [12+]
17.50 "Удивительные люди-4". [12+]
20.00 Вести недели.
22.00 Москва. Кремль. Путин. [12+]
22.40 Воскресный вечер с Владимиром Соловьёвым. [12+]
00.30 "Действующие лица с Наилей Аскер-заде". [12+]
01.30 Х/ф "Два билета в Венецию". [12+]
03.25 Х/ф "Мама напрокат". [12+]

### БСТ

**7.00 "Доброе утро!" Концерт. [12+]**
**8.00 Новости (на баш. яз.).**
**8.15 "Йома". [0+]**
**8.45 "Бай". [12+]**
**9.15 Моя вершина. [12+]**
**9.45 М/ф "Мультфильмы". [0+]**
**10.00 "Танцуй". [0+]**
**10.15 Ой, крутой! [6+]**
**10.30 "Детей много не бывает". [0+]**
**11.00 "Сулпылар". [0+]**
**11.30 Гора новостей. [6+]**
**11.45 Бирешмә. Профи. [12+]**
**12.30 Итоги недели (на баш. яз.).**
**13.15 Алтын тирмә. [0+]**
**14.00 "Дарю песню". [12+]**
**15.30 Башҡорттар. [6+]**
**16.00 Дорога к храму. [0+]**
**16.30 Историческая среда. [12+]**
**17.00 Спектакль "Старик и море". [12+]**
**17.50 Хоккей. КХЛ. "Йокерит" (Хельсинки) - "Салават Юлаев" (Уфа).**
**20.30 Ты можешь! [12+]**
**21.00 Республика Live. #Дома. [12+]**
**21.30 Итоги недели (на рус. яз.).**
**22.15 Специальный репортаж. [12+]**
**22.30 "Красная кнопка". [16+]**
**23.15 "Байыҡ-2019". [12+]**
**0.15 Х/ф "Гармония". [0+]**
**1.30 Спектакль "Скупой". [12+]**
**3.15 Д/ф "Млечный путь". [12+]**
**4.00 Историческая среда. [12+]**
**4.30 Х/ф "Гармония". [0+]**
**6.00 Итоги недели (на рус. яз.).**
**6.45 Специальный репортаж. [12+]**

# НАМАҘ ВАҠЫТТАРЫ

*1441 һижри йыл.*

| Октябрь (Сәфәр) | Иртәнге намаҙ | Ҡояш ҡалҡа | Өйлә намаҙы | Икенде намаҙы | Аҡшам намаҙы | Йәстү намаҙы |
|---|---|---|---|---|---|---|
| 7 (8) дүшәмбе | 6:00 | 7:30 | 13:30 | 17:06 | 18:36 | 20:06 |
| 8 (9) шишәмбе | 6:02 | 7:32 | 13:30 | 17:04 | 18:34 | 20:04 |
| 9 (10) шаршамбы | 6:04 | 7:34 | 13:30 | 17:01 | 18:31 | 20:01 |
| 10 (11) кесе йома | 6:06 | 7:36 | 13:30 | 16:59 | 18:29 | 19:59 |
| 11 (12) йома | 6:08 | 7:38 | 13:30 | 16:56 | 18:26 | 19:56 |
| 12 (13) шәмбе | 6:10 | 7:40 | 13:30 | 16:54 | 18:24 | 19:54 |
| 13 (14) йәкшәмбе | 6:12 | 7:42 | 13:30 | 16:51 | 18:21 | 19:51 |

*"Башҡортса дини календарь"ҙан алынды.*

*БАШ ЭШЛӘТМӘК*

# СИЛӘБЕ БАТЫРҘАРЫ




**Йәмилә ШӘРӘФЕТДИНОВА төҙөнө.**

**38-се һандағы сканворд яуаптары.**

**Горизонталь буйынса:** Тырыз. Усманов. Наряд. Ашлыҡ. Алмас. Радикал. Тубыҡ. Ғәниев. Аят. Урама. Рант. Аҡ. Район. Театр. Дуға. Иғтибар. Уймаҡ. Самауыр. Нуғай.

**Вертикаль буйынса:** Реферат. Абдуллина. Калахари. Уғры. Ғайсин. Ҡолға. Томан. Алиби. Бағана. Ротмистр. Урыны. Завод. Рим. Ант. Утрау. Убыр. Ырым. Саҡ. Айнығ.

## ҠОТЛАЙБЫҘ!

Мәләүез ҡалаһында йәшәүсе ҡәҙерлебеҙ, әсәкәйебеҙ **Яппарова Сәриә Хәйрулла ҡыҙын** тыуған көнө менән ҡотлайбыҙ! Әсәй, бөгөн һин 60 йәшлек ғүмер миҙгеленә аяҡ баҫаһың. Һинең тыуған көнөң - барыбыҙ өсөн дә яҡты, илаһи ҙур байрам. Беҙҙең тормошобоҙҙо йәмгә күмеп, ейәндәрең өсөн йән атып, күңел йылыңды өләшеп оҙаҡ-оҙаҡ йәшә. Йөрәк түрендә йөрөтөп тә әйтә алмаған рәхмәттәребеҙҙе, йылы хистәребеҙҙе белдергебеҙ килә һиңә. Ошо бәрәкәтле мул тормошта, именлектә тик бәхеткә төрөнөп ғүмер йомғағын һүтергә яҙһын һиңә, берҙән-беребеҙ!



*Ҡотло булһын тыуған көнөң,*
*Юбилейың-байрамың.*
*Кескәй генә һиңә бүләгебеҙ -*
*Изге теләктәрҙең бәйләме.*
*Һин булғанға беҙҙең тормош матур,*
*Һин бит беҙгә оло бер терәк.*
*Йондоҙҙарға ай нисек кәрәк булһа,*
*Һин дә беҙгә шулай бик кәрәк.*

**Ҡотлау менән ҡыҙҙарың Ләйсән, Зәлиә, кейәүең Марат һәм ейән-ейәнсәрең Булат һәм Илмира.**

*ХУЖАБИКӘГӘ*

## Аяҡ кейемен нисек йомшартырға?

Аяҡ кейеменә бер аҙ глицерин һөртөп йомшартырға була. Шул көйө бер нисә минут тоторға һәм ныҡлап ялтыратып һөртөп алырға кәрәк.

Аяҡ кейемен йомшартыу өсөн кастор майы ла бик ҡулай. Майҙы мамыҡ тампонға тамыҙып, күн аяҡ кейемен ентекләп һөртөп алырға кәрәк.

Әгәр ҙә аяҡ кейеме табанды өйкәһә, 3 процентлы аш һеркәһе ярҙам итер. Уның менән аяҡ кейемен эстән һөртөп алып, тулыһынса киптерергә кәрәк.

Аяҡ кейеменә йомшартҡыс махсус май әҙерләргә була. Бының өсөн бал ҡорто балауыҙын ҡайнар һыу быуында иретеп, кастор майы һәм скипидар ҡушырға. Был сара аяҡ кейемен йомшарта, ялтырата һәм дымланыуҙан һаҡлай.

*БЫЛ - ҠЫҘЫҠ*



# ТӘБИҒӘТТӘ...

## аралашыу нисек бара?

**Был йомшаҡ йән эйәләренә тулыһынса битараф булған кешене табыуы ауырҙыр, моғайын: уларҙың бойондороҡһоҙлоғо, һығылмалылығы, ирек яратыуы теләһә кемде һоҡланырға булһа ла мәжбүр итә. Эйе, эйе, һүҙебеҙ бесәйҙәр хаҡында бөгөн.**

Йорт бесәйҙәре төҫөнә, тоҡомона, физик төҙөлөшөнә ҡарамаҫтан, Азияның һәм Африканың таулы, сүлле урындарында йәшәгән ялан бесәйҙәренән (Felis silvestris lybica) килеп сыҡҡан. Боронғо кешенең иғтибарын улар нисек йәлеп иткәндер, әммә был дуҫлыҡҡа хәҙер 10 мең йылдан ашыу. Шундай ҙур ваҡытҡа ҡарамаҫтан, ғалимдар күптән түгел генә бесәйҙәр ғаиләһе вәкилдәренең башҡа һиймаҫлыҡ үҙенсәлеген асҡан: бесәйҙәр, һунар итеү һәм дошмандарын ҡурҡытыу өсөн, махсус бактериялар менән килешеп йәшәй.

### Бесәйҙәр үҙ-ара нисек аралаша?

Хайуандарҙың телен аңларға мөмкинме? Мөмкин икән шул! Бесәйҙәрҙең телен аңлау өсөн хатта тотош фән - фелинология уйлап табыла. Хужаһына үҙенең теләген еткерер өсөн улар барлыҡ алымдарҙы ҡуллана: ишара, торош һәм тауыш. Бындай аралашыуҙа мөһим урынды ҡойроҡ алып тора. Уның ярҙамында бесәй үҙенең хис-тойғоларын белдерә. Әгәр ул ҡойроғон күтәрә икән, был сәләмләү йәиһә ҡәнәғәтлек билдәһе була. Асыуланғанда ҡойроғо менән ян-яҡҡа бәргеләй, үҙенең ризаһыҙлығын күрһәтә. Ә инде алышҡа әҙерләнгәндә, ҡойроҡ тәнгә һылаша.

Социаль хайуан булараҡ, бесәйҙәр үҙ-ара кеше менән аралашҡандағыға ҡарағанда күпкә ауырыраҡ телдә аралаша. Ҡайһы берҙә теге йәки был хис-тойғоно белдерер өсөн улар шундай юғары диапазон ала, был тауышты хатта кеше ҡолағы ҡабул итә алмай.

### Бактериялар аша аралашыу

Бесәйҙәрҙе кеше ҡулға эйәләштереп, йорт хайуанына әйләндергәнгә тиклем, уларға даими рәүештә үҙ нәҫелен, территорияһын көтөлмәгән дошмандарҙан һаҡларға тура килгән. Бесәйҙәрҙең яҙмышын бер аҙ еңеләйтер өсөн эволюция уларға ғәҙәти булмаған һәләт - анал биҙҙәрендә йәшәүсе бактериялар биргән. Организмдарында йәшәүсе бактериялар бүлеп сығарған секрет ярҙамында бесәйҙәр үҙ территорияһының тейелгеһеҙлеген билдәләй һәм үҙ-ара аралаша.

### Симбиоз

Ике тере организмдың бындай аралашыу ысулы тәбиғәттә симбиоз тип атала һәм ике яҡ та файҙа күрә. Бесәй-бактерия парынан башҡа, тәбиғәттә акулалар һәм балыҡтар, зебра һәм страус, крокодил һәм ҡоштар араһында симбиоз бар.

Ҡоштарҙың ҡайһы бер төрөн крокодилдар стоматолог сифатында файҙалана. Хайуандың ауыҙ ҡыуышлығына инеп, ожанка тип аталған ҡош, уның теше араһында ҡалған аҙыҡ ҡалдыҡтарын сүпләй, хатта үҙенең ем булырынан да хәүефләнмәй.

Төрлө хайуандар араһындағы симбиоздан тыш, был күренеш үҫемлектәр донъяһында ла күҙәтелә. Уларҙың Рәсәй өсөн иң киң таралғаны - ҡайын ағасы менән ҡайын бәшмәге. Был осраҡта ағас үҙенә үҫеү өсөн кәрәкле тоҙҙарҙы ала, ә бәшмәкте ағас төрлө органик матдәләр менән тәьмин итә.

**Интернет селтәренән.**

*СӘНҒӘТ ЯҢЫЛЫҠТАРЫ*

# АЙГӨЛ ИЛЕ ҺАҒЫНДЫРҒАН...

**Режиссер Зиннур Сөләймәнов быйылғы яҙҙы хыял һәм ысынбарлыҡ эсендә, ер менән күк араһында үткәрҙе: ул күптәнге хыялына - Мостай Кәримдең "Айгөл иле" пьесаһы буйынса яңы сәхнәүи асышына шундай уйланыуҙар, яныуҙар аша барҙы. Режиссерҙың шундай ашҡыныуында мин заманалар һәм хәтирәләр ҡатламын аҡтарыр бер ажар күргәйнем...**

Ниһайәт, Өфө дәүләт "Нур" театрының оло сәхнәһе асылып китте - ундағы әкиәти донъя ғәжәйеп бер тылсымлы көйгә тирбәлә ине. Күккә олғашҡан мәғрур ағастар артында ҡаяташлы тау армыттары күренә, төпһөҙ диңгеҙҙәй урман шырлығы һәр яралы йәнгә йәшеренеп кенә иларлыҡ һәм ҡабат терелеп йырларлыҡ йәшәрткес шифа бөркә... "Айгөл иле" - донъя иңләп тулҡын-тулҡын ағылған һәр бер замандың йәш самими йөрәгенән оло тормошҡа төбәлгән саф һәм нурлы ҡарашы бит ул. Ҡайһылай ҙа һағындырған икән был ил! Беҙ нисәмә йылдар буйы уның бөйөк тынын, аһәңле яҡтылығын, ялҡынлы һүҙҙәрен күтәп йәшәгәнбеҙ... Ана, үҙ иленең һайрар ҡошо - ун алты йәшлек Айгөл ҡаяташта талпына. Ҡыҙ нисәнсе ҡат инде тауҙарға, күктәргә үҙенең һөйөү һүҙҙәрен әйтә, артынан ҡалмай өйөрөлөп эйәреп йөрөгән мөхәббәт хисе, хыялдары уның һәр өнөн, һәр хисен ҡабатлай, уларҙың бергә ҡыуанысынан бөтә Айгөл иле яғымлы һәм иркә ауаздарға сума. Һәм был самими илде һағыш, нәфрәт, үкенес, хыянат ҡылыстары менән тураҡлап башҡа геройҙар инә...

Спектаклдә яңғыраған һорауҙар бынан бик күп йылдар элек, 1970 йылдарҙа уҡ илде һәм илдәге күңелдәрҙе урап сыҡҡан. Был пьесаны уйнамаған театр һәм драма түңәрәктәре ҡалмағандыр... Тимәк, уйларға ла, әйтергә лә, эшләргә лә форсат булған. Барыһын да ҡатмарлы заманаға япһарған һәм үҙенең шәхсән гонаһын танымаған кешеләргә шағир киҫәтеүе лә барып еткәндер, ләкин... Беҙ быға са сәнғәтте көслө, тип ышана, өмөтләнә инек, ләкин батырһыҙ һәм хужаһыҙ сәнғәт - ҡурҡаҡтар һәм башһыҙҙар уйынсығы булып ҡала икән. Шағирҙар ни өсөн үлә, шул хаҡта иҫкәртә Айгөл иле. Шағирҙарҙың рухы Айгөл илен эҙләп китә, ахыры.

Зиннур Сөләймәнов "Айгөл иле"нең изге шаңдауын йылдар аша беҙгә йәнә еткерҙе. "Нур" театры артистары уйыны, һәр ваҡыттағыса, фиҙаҡәр һәм ихлас, улар халыҡсанлыҡ һәм тәрән образлылыҡ аша был мәңгелек ғибрәти сәхифәне һүтеп бирә. Айгөлдөң сәмауи дуҫтары - тау, һыу, урман эйәләре кейемен әҙерләгән рәссам Наталья Степанова, хореографик образдарын тапҡан бейеү теле оҫтаһы Рәмизә Мөхәмәтшина, бигерәк тә музыкаль яҡтан биҙәүсе композитор Илшат Яхин, Сит кеше тауышын Интернет кешеһе итеп виртуаль донъя тауышына тоташтырған видеоинженер Урал Махиянов - һәммәһе лә беҙҙең башҡорт сәнғәтендә ҙур идея башланғысы һәм сәхнәүи фәлсәфә асҡысы булған "Айгөл иле"нең яңыса асылыуына ҙур тырышлыҡ менән үҙенең ижади сәмен ҡушҡан. Аныҡ хәрәкәт-ым, тулы ҡанлы сәхнә күренештәре һәр образды ҡылыҡһырларға һәм аңларға мөмкинлек бирә: тамашасының алҡыштары бигерәк лә ауыл ҡатындарына, Айгөл һылыуға, уның әсәһе Зөлхәбирәгә һәм Ҡәҙерйән Ябағаевҡа арналды. Спектакль барышында ҡул сабыуҙар менән оҙатылған сағыу картиналар бик күп булды. Әллә һоҡланыу, әллә ғәжәпләнеү, әллә тәрән хәсрәт менән сәпәкәй итте халыҡ...

# ЙӘЛЛӘҮ АША УЙЛАНЫУ



**Драматург Зөһрә Фәйзуллинаның "Р"-һыҙ ҡалған Мыраубай" пьесаһы буйынса спектакль бынан ун йылдар самаһы элек Сибай ҡалаһындағы "Сулпан" театрында бер нисә йыл буйы гөрләп барҙы. Тимәк, яңы быуын балалар ҙа "Р"-ҙы юғалта һәм таба алмай йонсой. Тимәк, бик ябай һәм бәләкәй генә ваҡиға артында мәңгелек һорау тора: "Ни өсөн "Р"-һыҙ йәшәп булмай?"**

Әле күптән түгел М. Кәрим исемендәге Милли йәштәр театрында был спектаклдең өр-яңы премьераһы үтте. Режиссер Азат Йыһаншин артистар менән бергә байтаҡ әҫәрҙәр уҡып сығыуҙарын һәм шунда уҡ актерҙарҙың шау-гөр килеп ролгә инә башлауын, уйнарға тотоноуын, ихласлап бер тауыштан "Мыраубайҙы" һайлауын белдерҙе. "Йәштәр театрының башҡорт бүлеге актерҙары балалар менән шулай теремек аралашыуға ҡоролған асыҡ спектакль уйнарлыҡ пьесаны күптән көтә ине", - ти режиссер. Ысынлап та, Мыраубайҙың башына төшкән хәсрәте: "Р" хәрефен юғалтыуы һәм шул арҡала көлкөгә ҡалыуы, әйтер һүҙен аңлата алмайынса бәләгә ҡалыу күренештәре ҡыҙыҡ та, фәһемле лә.

Зөһрә апай Фәйзуллина премьераға үҙенең тормош иптәше Вәкил ағай менән килгәйне. Ағай кеше премьераларға һирәк сыға икән. Был юлы ул шаҡ ҡатып ҡарап ултырҙы, аҙаҡ уға "Оҡшанымы?" тип өндәшеүгә яуап бирә алмай торҙо. Бер аҙҙан ғына һушын йыйғандай булды һәм тыныс ҡына шундай баһа бирҙе: "Бик матур уйнай икән был театр актерҙары! Кейемдәре, йырҙары, бейеүҙәре - бик шәп бит! Ә телдәре ниндәй асыҡ, саф башҡортса һәм балаларса!" Раҫ әгәре, раҫ, ағай! Телдәре - башҡортса! Һәм тамаша залы һәр һүҙҙе аңлап, ҡушылып йырлап, һөйләп ултыра. Был яғы инде актерҙарҙың оҫталығына һәм яуаплылығына бәйле, юғиһә, ваҡ-төйәк тел осонда торған әрһеҙ "заманса" сүп-ымлыҡтар сәхнә теле менән урам телен бутап та ҡуя.

Беҙҙең Йәштәр театрының актерҙары күптән инде бына тигән әкиәтселәр, онотолмаҫ сәхнәүи образдары менән тамашасы күңелен байытыусылар булараҡ ихтирам ҡаҙанған. Мыраубай ролен башҡарған Нәғим Нурғәлин, Әтәс ролендәге Илгиз Таһиров, Һарыҡ (Венер Камалов), Кәзә һәм Сысҡандарҙың уйыны балаларҙың һоҡланыулы алҡыштарына күмелде. Көлөү аша аңлау, йәлләү аша уйлауға ҡоролған был аҡыллы халыҡсан әкиәт - үҙе өләсәй булған драматургтың бик уңышлы һәм кәрәкле ижад емеше.

**Кинйә МӘЗИТ.**

*АҠЫЛ-ҠАҘНА*



**Аҡыллы кешеләрҙең һүҙҙәренә эйәреп, донъяуи хәҡиҡәткә баҡ, һығымталар яһа һәм, әлбиттә, тормошта ҡуллан. Бәхетле һәм уңышлы кеше булыр өсөн.**

# ИҪКЕ ЯҢЫНЫ ҺАҠЛАЙ

Исемең шәп булһын, ырыуыңа тап булһын.

**(Башҡорт халыҡ мәҡәле).**

Йәмғиәт ике синыф кешеләренән тора: берәүҙәренең ашарына бар, әммә аппетиттары юҡ; икенселәренең аппетиты бар, ашарына юҡ.

**(Н. Шамфор).**

Бөйөк эштәр башҡарыу өсөн бөйөк даһи булыу мотлаҡ түгел; кешеләрҙән өҫтөн булма, улар менән бергә бул.

**(Ш. Монтескье).**

"Ҡартаймайһың да инде!" тигән комплимент әйтәләрме? Тимәк, һин ҡартая башлағанһың икәненә шикләнмә.

**(У. Ирвинг).**

Маңлайыңда һырҙар булһа булһын, йөрәгеңдә һырҙар булмаһын. Рух ҡартайырға тейеш түгел.

**(Д. Гарфильд).**

Йәшлегең мөхәббәтһеҙ үтһә, ҡартлыҡта аҡыл ултырмаһа... ғүмерең бушҡа уҙған тигән һүҙ.

**(Швед халыҡ мәҡәле).**

Йәшлек хаталар яһай, йәшлек менән ҡартлыҡ араһындағы осор ул хаталарға ҡаршы көрәшә, ҡартлыҡ ошо ике осор өсөн дә үкенес белдерә.

**(Б. Дизраэли).**

Йәш кешеләр зауығын һаҡлаған ҡарттар көлкө тыуҙырып ҡына ҡалмай, улар хөрмәткә лә лайыҡ түгел.

**(Наполеон I).**

**Шулай итеп, тағы бер риүәйәт: "Бер кеше Хәҡиҡәтте табырға ҡарар итә. Тәүҙә ул уны өйөндә эҙләй, шунан үҙе йәшәгән ҡаланы ҡыҙыра, һуңынан донъя буйлап сығып китә. Ярлылар йәшәгән ҡаласыҡтарға инеп сыға, байҙар йәшәгән һарайҙарҙа була, мәсеттәрҙән һәм сиркәүҙәрҙән эҙләй Хәҡиҡәтте, ләкин уны бер ҡайҙа ла таба алмай. Алыҫ-алыҫ бер илдә, тау башындағы бер бәләкәй йортта таба ул эҙләгәнен.**

**- Бында Хәҡиҡәт юҡмы? - тигән һорауына бер монах:**

**- Эйе, Хәҡиҡәт бында йәшәй. Ана, Ул түшәктә юрған аҫтында ята. Юрғандың бер ситенән генә асып ҡара, күрерһең... - тип яуаплай.**

**Кеше шулай итә лә. Юрғандың бер ситен генә күтәреп ҡарай һәм... һушын юғалта. Юрған аҫтындағы Хәҡиҡәт шул тиклем ҡурҡыныс була. Кеше иҫенә килгәс, былай ти:**

**- Хәҡиҡәт, мин һине эҙләп донъяны урап сыҡтым. Халыҡҡа ни тип яуап бирермен, Хәҡиҡәт шул тиклем ҡурҡыныс, тиһәм, кем миңә ышаныр?**

**- Ә һин алдаш, - ти аҡрын ғына итеп Хәҡиҡәт, - ул саҡта һиңә барыһы ла ышаныр..."**

*БАШҠОРТСА ҺҮҘЛЕК*

# ТАҘҒАРА НИМӘ БУЛА?

**Биология фәндәре докторы, БДУ-ның Сибай институты профессоры Сәфәрғәли Йәнтүриндың "Зоология терминдарының русса-башҡортса, башҡортса-русса һүҙлеге"нән Башҡортостанда йыш осраған ҡоштарҙың башҡортса-русса атамалары менән танышығыҙ.**

**хохлатый жаворонок** - өлтөклө һабан турғайы

**чайка серебристая** - көмөш аҡсарлаҡ

**чеглок** - ҡыйғыр ыласын

**черная крачка** - ҡара сарлаҡ

**черноголовая гаичка** - ҡарабаш тебейек

**черноголовая славка** - ҡарабаш килейек

**черноголовый хохотун** - ҡарабаш шарҡылдаҡ сарлаҡ

**черноголовый чекан** - ҡарабаш шаҡылдаҡ

**чернозобая гагара** - ҡағараҡ

**чернолобый сорокапут** - алағанат

**чернопегая каменка** - ала таштурғай

**черный аист** - ҡара ҡауҙы

**черный дрозд** - ҡара барҡылдаҡ

**чекан луговой** - шаҡылдаҡ

**черный гриф** - таҙғара

**черный коршун** - ҡара төйлөгән

**чибис** - тәгәрлек

**чиж** - һары турғай

**чирок-свистунок** - һыҙғыраҡ сүрәгәй

**чирок-трескунок** - керелдәк сүрәгәй

**чомга** - өлкән сыпҡай (һыу ҡошо)

**шилоклювка** - беҙсуҡыш, беҙсуҡыш көйөлдө

**(Аҙағы. Башы 33-34, 37-39-сы һандарҙа).**

“Киске Өфө” гәзитен ойоштороусы: **Өфө ҡалаһы ҡала округы хакимиәте**

Гәзит Киң коммуникация, элемтә һәм мәҙәни мираҫты һаҡлау өлкәһен күҙәтеү буйынса федераль хеҙмәттең Башҡортостан Республикаһы идаралығында теркәлде.

Теркәү таныҡлығы №ТУ 02-00001, 10 июнь 2008 йыл.

Баш мөхәррир: **Гөлфиә ЯНБАЕВА.**

**Мөхәрририәт:** Ләйсән НАФИҠОВА, Зәйтүнә ӘЙЛЕ, Фәүзиә МӨХӘМӘТШИНА, Миләүшә ҠАҺАРМАНОВА, Артур БАТЫРШИН.

Редакция һәм нәшер итеүсе адресы: **450005, Башҡортостан Республикаһы, Өфө ҡалаһы, Революцион урамы, 167/1**

Беҙҙең сайт: **www.kiskeufa.ru**

E-mail: **kiskeufa@mail.ru**

«Печатник» ЯСЙ типографияһында баҫылды (450591, Башҡортостан Республикаһы, Өфө районы, Чесноковка ауылы, Воровский урамы, 32).

**Телефондар:**

| | |
|---|---|
| **Баш мөхәррир** | **253-25-44** |
| **Хәбәрселәр** | **252-39-99, 246-03-24** |
| **Матбуғат таратыу** | **246-03-23** |

**Ҡул ҡуйыу ваҡыты -** 4 октябрь 17 сәғәт 00 мин. Ҡул ҡуйылды - 16 сәғәт 00 мин.

«Киске Өфө»нөң реклама хеҙмәте **253-25-44**, **246-03-23** телефондары буйынса «Киске Өфө» гәзитенә ойошмаларҙан һәм айырым кешеләрҙән рекламалар ҡабул итә.

«Киске Өфө»нөң индексы – **ПР905**

Тиражы - 3707

Заказ - 1968/10